ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# КискеӨфө
20-26 февраль (шаҡай) 2026
№7 (1202)
kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Уҡытыусылар бәйге тотто**




3

**Һәр дәрес - тормош һабағы**



4-5

**Данлы ғаилә улы**



11

**Ураҙа мәктәбе үткәндәр...**

һәр һынауға әҙер була



13

***Үҙ һүҙендә тора белгән, һәр ваҡыт анығ эш менән мәшғүл һәм үҙ эшенең оҫтаһы булған ир - ысын ир. Эшләү, ижад итеү, эҙләнеү, барлыҡҡа килтереү, булғанды ишәйтеү - көслө заттың төп тәғәйенләнеше. Ир-егеттәребеҙгә - уңыштар!***

БАЙРАМ МЕНӘН!

# ИР-АЗАМАТ ҺҮҘЕ

**Йыл да 23 февралдә "Ватанды һаҡлаусылар көнө"н байрам итәбеҙ һәм гәзитебеҙҙең сираттағы һанын да ир-азаматтарыбыҙҙың фәһемле һүҙен ишеттереүгә, абруйлы тәжрибәһен яҡтыртыуға, фиҙаҡәр хеҙмәтен күтәрмәләүгә арнайбыҙ. Был һанда ла шулай итәбеҙ: маҡсатыбыҙ - башҡорт ир-егеттәренә һүҙ биреп, уларҙың сәм, рух, һөнәри өлгөһөн башҡаларға ла "йоҡтормаҡсы" инек. Тыңлағыҙ һәм уларҙың бәйәнен үҙегеҙгә төбәлгән итеп ҡабул итегеҙ.**



***Айҙар МӘЖИТОВ,*** Баймаҡ районы Темәс тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, танылған тарихсы-реконструктор: "Үҙем һәм "Төньяҡ амурҙары" клубы менән таныштырғас, алыҫ ата-бабаларымдың тап ошо ерҙә 200 йыл элек йөрөүҙәрен, ҡурай уйнауҙарын һөйләп, "Любизар" көйөн уйнап, илсегә ҡурай бүләк иттем. Тап ошо минуттарҙа мин үҙемдең тарихи миссиямды аңланым һәм Аллаһ Тәғәләгә мине был яҡты донъяға башҡорт итеп яралтыуына рәхмәт уҡыным. Әгәр мин башҡорт булмаһам, берәй ваҡыт Парижда булыр инемме икән..."

*(10-11-се биттәр).*



***Сәғит БӘҘРЕТДИНОВ,*** әүҙем ирекмән, донъяға киң ҡарашлы, өс юғары белемгә эйә йәш кеше: "Армия сафтарында хеҙмәт итеү - үҙенсәлекле тормош тәжрибәһе ул. Тик ир-егеттәрҙән генә торған коллективта бер-береңде аңларға, аралашырға, уртаҡ тел табырға өйрәнәһең. Армия хеҙмәтендә сынығыу үтеү - боронғо традиция, ул кешенең шәхесен физик һәм рухи яҡтан сыныҡтыра. Мин уны ир-егеттәрҙең күмәкләп һунарға йөрөүе менән сағыштырыр инем: һунарҙа сая, ҡыйыу, йылғыр, тәүәккәл кешеләр уңышҡа өлгәшә..."

*(8-9-сы биттәр).*



***Иҙел ХӘКИМОВ,*** этнодизайнер, башҡорт милли кейеме оҫтаһы: "Был һөнәр ир-егеттәр эше түгел, тигән фекер ҙә бар ул. Әммә беҙҙең ғаиләлә атайым, кәрәк булһа, ваҡ-төйәк тегенеү эшен дә башҡара торғайны. Беҙ шуны күреп үҫтек. Башҡорттар араһында ла ир кешеләр тире эшкәртеү, сыбыртҡы үреү кеүек кәсептәр менән булған бит. Милли кейем үрнәктәре эҙләп, районға экспедицияларға сыҡҡанда ла тап ирҙәр тегеү, бесеү эшенә оҫта икәнен күргәнем булды. Бөгөнгө көндә донъялағы иң күренекле дизайнерҙар ҙа - ир-егеттәр..."

*(6-16-сы биттәр).*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МӘКТӘПТЕҢ ДӘ ИҢ ҘУРЫ!



**Өфөнөң "Кузнецов затоны" биҫтәһендә Волга буйы федераль округындағы иң ҙур мәктәп эш башланы. 2 200 балаға иҫәпләнгән 164-се мәғариф үҙәген асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

- Был мәктәп ысын мәғәнәһендә балалар өсөн инновацион тәрбиә, мәҙәни, спорт һәм ял итеү үҙәге. Уның уҡыусыларының ҡаҙаныштары тураһында күп тапҡыр ишетербеҙ әле, тип ышанам. Иң мөһиме, мәктәп Тыуған илен яратҡан кешеләрҙе тәрбиәләһен, - тине Радий Хәбиров.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

**✔ Пилотһыҙ осоу системалары ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәргә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тәғәйен барлыҡ дәүләт ярҙам саралары, льготалар һәм социаль гарантиялар ҡаралған.**



ҠЫҪҠАСА

# ҒАИЛӘГӘ ЯҢЫ ТҮЛӘҮ

**2026 йылда социаль ярҙам системаһында төп яңылыҡ - ғаилә түләүҙәре башлана. Льгота эшләп йөрөгән, ике һәм унан күберәк балаһы булған ата-әсәләргә бирелә.** Ғаиләнең йән башына уртаса килеме төбәктә йәшәү минимумының 1,5 тапҡырлыҡ күләменән артмаған, ә мөлкәте билдәләнгән мохтажлыҡ критерийҙарына тап килгән осраҡта, ғаилә түләнгән 13 процент һалым аҡсаһының (НДФЛ) бер өлөшөн кире ҡайтара ала. Быйыл республикала йән башына йәшәү минимумы 16 856 һум тәшкил итә. 1,5 тапҡырлыҡ күләм - ғаилә ағзаһына 25 824 һум. Ата-әсәләргә түләнгән 13 процент НДФЛ-дың 7 проценты кире ҡайтарыла. Шарттар түбәндәгесә. Балаларҙың йәше - 18-гә, әгәр ҙә юғары уҡыу йортонда көндөҙгө бүлектә уҡыһа, 23 йәшкә тиклем булырға тейеш. Ата-әсәләрҙең рәсми эшләүе (йәғни НДФЛ түләүе) мотлаҡ. Уларҙың алимент буйынса бурыстары булмауы ла иҫәпкә алына. 2025 йылға ғаилә түләүен алыу өсөн ғаризаларҙы ағымдағы йылдың июнь-октябрь айҙарында бирергә мөмкин.

✔ **Башҡортостанда БПЛА өсөн "Урал арьяғы" полигоны булдырыла.** Өфөнән Сибайға тиклем 35 мең квадрат километрлыҡ биләмәлә инфраструктура, ултыртыу майҙансыҡтары һәм дронопорттар урынлаштырыла. Башҡортостан Хөкүмәтендә ошо турала белдерҙеләр. "Урал арьяғы" полигонын 2026 йылда асыу планлаштырыла. Шулай уҡ республика "Пилотһыҙ авиация системалары" милли проекты буйынса төбәк ғилми-етештереү үҙәге майҙансығында 20-нән ашыу компания-резидент берләштерелә. "Иҡтисад тармаҡтары өсөн яңы белем биреү программаларын эшләү һәм квалификациялы заказсылар әҙерләү, йәштәрҙе йәлеп итеү һәм яңы технологияларҙы асыҡлау өсөн БАС буйынса ярыштар уҙғарыу, МХО ветерандарын социаль яраҡлаштырыу өсөн гражданлыҡ һөнәрҙәренә ҡайтанан уҡытыу менән шөғөлләнәсәк белем биреү үҙәген булдырыу планлаштырыла", - тип билдәләнеләр республика министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәтендә.

✔ **Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы дәүләт ярҙамы алыу өсөн конкурста ҡатнашырға теләгән йәш белгестәрҙән документтар ҡабул итә башланы.** Был агросәнәғәт комплексының кадрҙар потенциалына булышлыҡ итеү буйынса республика программаһы ярҙамында бойомға ашырыла. Программа ауыл хужалығы ойошмаларының йәш белгестәренә 750-шәр мең һумлыҡ "дәртләндереү" аҡсаһы бүлеүҙе күҙ уңында тота. "Икенсе йыл "Аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген технологик тәьмин итеү" милли проекты эшләй, уның сиктәрендә "Агросәнәғәт комплексынд кадрҙар" федераль проекты булдырылды. Беҙгә 2030 йылға агросәнәғәт комплексы предприятиеларын 95 процентҡа тиклем белгестәр менән тәьмин итеү мөһим", - тип белдерҙе республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# БЕРЛӘШЕҮ КӘРӘК ИНЕ

**Өфөлә МХО ветерандары ассоциацияһының Бөтә Рәсәй йыйыны булды. Уларҙа 150-нән ашыу махсус операция ветераны - Рәсәй Федерацияһының 89 төбәгенән МХО ветерандарының төбәк ассоциациялары етәкселәре һәм вәкилдәре ҡатнашты.**



"Мин тәү сиратта һеҙгә республикабыҙ исеменән хәрби хеҙмәтегеҙ өсөн тәрән ихтирам һәм рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә теләйем. Һеҙгә ҙур рәхмәт, беҙ һеҙҙең менән ғорурланабыҙ һәм хөрмәт итәбеҙ. Республикабыҙҙа йыйындар үткәрергә ҡарар итеүегеҙ өсөн бик рәхмәтлемен. Был беҙҙең өсөн ҙур яуаплылыҡ, оло мәртәбә булды. 2022 йылдың көҙөндә, илдә мобилизация башланғас, ҡоралды конфликттарҙа ҡатнашыусыларҙы берләштергән ветеран ойошмаларының беҙгә шул тиклем нығ ярҙам күрһәтеүҙәрен тойҙоҡ. Был ойошмаларҙан башҡа әлеге юлды үтеүе ҡыйын булыр ине. Хәҙер инде МХО ветерандары ассоциацияһы булмаһа, алдыбыҙҙа торған күп кенә бурыстар хәл ителмәҫен яҡшы аңлайбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

"Яугирҙарға һәм уларҙың яҡындарына ярҙам итеү - төп өҫтөнлөк", тип тә билдәләне республика етәксеһе. Башҡортостанда ошондай ярҙам сараларының төбәк системаһы эшләй. Былтыр республикала 12 яңы сара өҫтәлде һәм хәҙер улар 55-кә етте. Төбәктә "бер тәҙрә" принцибы буйынса МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам үҙәктәре асыла. Йыл һуңына тиклем улар барлыҡ райондарҙа һәм ҡалаларҙа эшләргә тейеш. Яуҙан ҡайтҡан өс мең яҡташыбыҙҙың барыһы ла тиерлек эшкә урынлаштырылған һәм диспансеризация үткән (78 процент, 86 процент). Реабилитацияға, протезлауға, яңы һөнәрҙәрҙе үҙләштереүгә, үҙ эшен асыуҙа ярҙам итеүгә, йәмәғәт тормошона, адаптив спортҡа йәлеп итеүгә етди иғтибар бүленә.

"Беҙҙең уртаҡ бурысыбыҙ - көслө, ныҡлы МХО ветерандары ассоциацияһын булдырыу. Республикала беҙ уны партнерыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ, бөтә мәсьәләләрҙе ингә-иң терәшеп хәл итербеҙ", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# ҺАҠЛАНҒАНДЫ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика ҡалалары мәктәптәренең директорҙары менән осрашты. Осрашыуҙа белем биреү учреждениеларын террорҙан һаҡлау мәсьәләләре тикшерелде.**

- Мәктәптәрҙә хәүефһеҙлек системаһы яңынан ҡарауға һәм көсәйтеүгә мохтаж. Беҙ балаларҙы яҡларға бурыслы. Уларҙың һаулығы, ғүмере, киләсәге беҙҙең дөйөм хәүефте алдан күрә белеүгә бәйле, - тине Радий Хәбиров. - Хәҙер беҙ ике мәсьәлә өҫтөндә эшләйбеҙ. Беренсеһе - мәктәптәрҙе физик һаҡлауҙы тәьмин итеү мәсьәләһе. Ошо йәһәттән эште яҡшыртырға кәрәк. Был маҡсатҡа өҫтәмә финанслау бүләрбеҙ. Росгвардия менән контроль сараларҙы ла көсәйтеү тураһында һөйләшеп килештек. Икенсеһе - хәүефһеҙлекте тәьмин итеүҙең техник сараларын яңыртыу буйынса эште дауам итербеҙ.

Үҫмерҙәр, бигерәк тә социаль яҡтан хәүефлеләр менән эште үҙгәртергә кәрәк, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды республика етәксеһе.

- Хәҙер беҙ мәктәптәрҙә тәртип боҙоуҙарҙы иҫкәртеү, мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың ғүмере һәм һаулығы өсөн хәүефле булған кире күренештәрҙе, шул иҫәптән буллингты иҫкәртеү һәм булдырмау эше өсөн дә баһалайбыҙ. Шул рәүешле эшегеҙҙе күреп торорбоҙ, - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

Радий Хәбиров республиканың Мәғариф министрлығына директорҙарҙың тәрбиә эше буйынса урынбаҫарҙарына төбәктән өҫтәмә түләү мәсьәләһен тикшерергә, уларҙы уҡытырға, шулай уҡ мәктәптә психология хеҙмәтен яңыртырға ҡушты.

КӨН ТЕМАҺЫ

# ТАШЛАМАЛАР ҘА БАР



**Республика Башлығының хәрбиҙәр менән бәйләнеш буйынса кәңәшсеһе Алик Камалетдинов, Махсус хәрби операция барышында Башҡортостан яугирҙары пилотһыҙ осоу аппараттары менән эш итеүҙә ҙур тәжрибә тупланы, ти.**

Уның билдәләүенсә, тәүге осорҙа БПЛА менән идара итеү буйынса белгестәр етешмәй. Шуға хәрби күнекмәнән һуң һалдаттар өҫтәмә рәүештә дрондарҙы өйрәнә һәм үҙаллы яңы хәрби һөнәр үҙләштерә. Хәҙер улар, юғары класлы белгестәр булараҡ, МХО-ла алған тәжрибәне йәштәргә тапшыра. Башҡортостан төбәктә тупланған исемле үҙ батальондарын пилотһыҙ осоу аппараттары менән даими тәьмин итеп тора.

Шуны белеү мөһим: пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙары йыраҡтан тороп эшләй. Дрондарға идара итеү пультынан алғы һыҙыҡҡа тиклем бер нисә тиҫтә километр булыуы ихтимал. Операторҙар яу яланын өйрәнә, дошмандың позицияһын разведкалай, кәрәк саҡта һөжүм итә, хатта йөк алып барып еткерә. Һөжүмтәлелек өсөн өҫтәмә түләү бар. Дошман позицияһына, техникаһына уңышлы һөжүм итеүселәргә 50 меңдән 500 мең һумға тиклем аҡсалата премия яҙыла. Оператор, әлбиттә, компьютер техникаһын, информатиканы яҡшы белергә тейеш. Карта менән эшләү оҫталығы ла кәрәк. Сит ил телдәрен белһә, бигерәк тә яҡшы.

Пилотһыҙ осоу системалары ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәргә МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә тәғәйен барлыҡ дәүләт ярҙам саралары, льготалар һәм социаль гарантиялар ҡаралған. Шуны ла әйтергә кәрәк, был һөнәр эйәләре алған тәжрибәһен, белемен тыныс тормошта ла ҡуллана ала. "Пилотһыҙ осоу аппараттары белгестәре сәнәғәттең, ауыл хужалығының, яғыулыҡ-энергетика комплексының бөтә тармаҡтарында ла эшләй ала", - ти Алик Камалетдинов.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғариза Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ла ҡабул ителә.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Башлығы республикабыҙҙың халыҡ шағиры, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре Ҡәҙим Аралбаевтың 85 йәшен билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Республика Хөкүмәтенә сараларҙы үткәреү өсөн әҙерлек планын раҫлау бурысы йөкмәтелде. Сараларҙы әҙерләү һәм үткәреү буйынса сығымдар бюджет ассигнованиелары һәм бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә финанслана. Указдың үтәлешен Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев контролдә тота.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың указы менән Алексей Касьянов республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Алексей Анатольевич Касьянов республикала һөҙөмтәле эшләгән идарасыларҙың береһе булараҡ билдәле. Оҙаҡ йылдар ул прокуратура һәм тикшереү органдарында эшләй, Башҡортостан Республикаһы буйынса баш федераль инспектор вазифаһын башҡара. Алексей Касьянов - юстиция генерал-лейтенанты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған юрисы. Юғары дәүләт наградаларына лайыҡ булған.

✔Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан Республикаһы буйынса баш идаралығы начальнигы вазифаһына Владимир Горин тәғәйенләнде, тип хәбәр итәләр идаралыҡтың рәсми сайтында. Ул Мәләүез ҡалаһы һәм Мәләүез районы дәүләт янғын күҙәтеүе хеҙмәтендә, Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса Баш идаралығында төрлө вазифалар биләй. 2025 йылдың июненән 2026 йылдың февраленә тиклем Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының БР буйынса Баш идаралығы начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡара.

✔Руслан Насретдинов Башҡортостанда "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк башҡарма комитеты етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы. Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, сәйәсмән 2022 йылдан алып республикала "Берҙәм Рәсәй"ҙең етәксеһе булды. "Республика Башлығы Радий Хәбировҡа ярҙамы һәм аҡыллы етәкселеге өсөн рәхмәт белдерәм. Һеҙҙең башланғыс аҫтында эшләү - ҙур яуаплылыҡ һәм ҙур тәжрибә. Алда - яңы бурыстар, яңы пландар. Әммә бында алынған тәжрибә артабанғы эшемдә ныҡлы таяныс буласаҡ", - тине ул.

✔2026 йылдың 1 апреленән социаль пенсиялар 6,8 процентҡа индексациялана. Социаль пенсия төрлө сәбәптәр арҡаһында страховка пенсияһын алыу өсөн кәрәкле стаж туплай алмағандарға тәғәйенләнә. Әгәр уның күләме пенсионерҙың төбәк йәшәү минимумынан түбәнерәк булһа, түләүҙәргә билдәләнгән кимәлгә еткереүсе социаль өҫтәмә билдәләнә. Рәсәйҙә 3,6 миллион самаһы кеше социаль пенсия ала.

✔ ***"Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2026" конкурсында Анатолий Хохлов исемендәге 10-сы белем биреү үҙәгенән Ләйсән Хәсәнова еңеү яулаҡы.***



ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



# ЫҢҒАЙ ҮҘГӘРЕШТӘР МАЙҘАНЫ

**Был аҙнала бишенсе саҡырылыш Өфө ҡала Советының 60-сы ултырышы булып үтте. Уның эшендә республика Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Ултырышта сығыш яһап, республика Башлығы Радий Хәбиров баш ҡаланың 450 йыллығына башҡарылған эштәргә юғары баһа бирҙе. Шул уҡ ваҡытта, ҡала потенциалын арттырыу буйынса әүҙем эш алып барырға кәрәк, тип билдәләне. Республика Башлығы фекеренсә, Өфө үҙенең "Хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" исемен тулыһынса аҡлай һәм хәҙер Махсус хәрби операция бурыстарын үтәүгә, алғы һыҙыҡтағы яҡташтарыбыҙға ярҙам итеүгә лайыҡлы өлөш индерә. "2025 йыл беҙҙән берҙәмлек талап итте. Беҙ иҡтисадтың һәм социаль өлкәнең тотороҡлолоғон тәьмин иттек, ҙур инфраструктура проекттарын тормошҡа ашырҙыҡ. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү буйынса мөһим бурыстарҙы бергәләп хәл итәбеҙ. Тылды, Ватандың оборона ҡалҡанын нығыттыҡ, мөһим бурыстарҙы хәл иттек", - тине Радий Хәбиров.

Көн тәртибенә ярашлы, ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев 2025 йылда Өфөнөң социаль-иҡтисади үҫеш йомғаҡтары, эшмәкәрлеге һәм 2026 йылға төп бурыстар тураһында отчет доклады менән сығыш яһаны.

2025 йылда баш ҡала бюджеты киләме 46,7 миллиард һум тәшкил иткән. Уның 60 процентҡа яҡыны мәғариф, спорт, мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте йүнәлештәрен финанслауға тотонолған. Торлаҡ-коммуналь һәм юл хужалығы тармаҡтарын, шулай уҡ транспортты үҫтереүгә 12,8 миллиард һум йүнәлтелгән. Шул иҫәптән юл инфраструктураһын үҫтереүгә 3,6 миллиард һум бүленгән.

Ратмир Мәүлиев билдәләүенсә, 2025 йылда сәнәғәт продукцияһы етештереү күләме 1,3 триллион һум тәшкил иткән һәм был күрһәткес буйынса Өфө миллионлы ҡалалар араһында алдынғы урындарҙы һаҡлап ҡала. Инвестициялар йәлеп итеү йәһәтенән әүҙем эш алып барыла. Үткән осор менән сағыштырғанда, инвестициялар 25 процентҡа артҡан һәм 130 миллиард һумға еткән.

Төп иғтибар ҡайтҡан яугирҙарға тыныс тормошта үҙ урындарын табыу һәм реабилитация мәсьәләләренә йүнәлтелгән. МХО ветерандарына һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү үҙәгенә 8 меңдән ашыу кеше мөрәжәғәт иткән һәм уларҙың барыһы ла ярҙам алған. Алғы һыҙыҡҡа бер йылда ғына 32 гуманитар конвой оҙатылған. "2025 йыл ҙур ҡаҙаныштар йылы булды, әммә алда тағы ла ҙурыраҡ һынауҙар һәм шул уҡ ваҡытта мөмкинлектәр булыуын асыҡ аңлайбыҙ. Һәм үҙебеҙ өсөн төп үҫеш йүнәлештәрен билдәләгәнбеҙ. Беҙҙең төп стратегиябыҙҙы "Өфө - даими ыңғай үҙгәрештәр майҙаны" тип билдәләнек. Был ҡоро һүҙәр генә түгел. Был - беҙҙең һәр өфөлө алдындағы бурысыбыҙ", - тине Ратмир Мәүлиев, докладын йомғаҡлап.

# УҠЫТЫУСЫЛАР БӘЙГЕ ТОТТО

**Өфөлә "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы-2026" һәм "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2026" ҡала конкурстары йомғаҡланды.**




Конкурстарҙың ҡала этабында Өфөнөң дөйөм белем биреү ойошмаларынан бөтәһе 73 уҡытыусы ҡатнашты. Педагогтар "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы" (25 уҡытыусы), "Рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" (10), "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" (12), "Педагогик дебют" (22), "Педагогик өмөт" (4) номинацияларында үҙ көсөн һынаны. 29-сы белем биреү үҙәгенең математика уҡытыусыһы Данил Бобров "Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы-2026" конкурсының абсолют еңеүсеһе тип танылды. "Башҡортостан баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2026" конкурсында Анатолий Хохлов исемендәге 10-сы белем биреү үҙәгенән Ләйсән Хәсәнова еңеү яуланы.

Өфөнөң Мәғариф идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, конкурс еңеүселәренә баш ҡала хакимиәтенең маҡтау грамотаһы, аҡсалата сертификат, статуэтка тапшырылды. Абсолют еңеүсе Рәсәй халыҡ мәғарифы һәм фән хеҙмәткәрҙәре профсоюзының республика ойошмаһынан шифаханаға сертификат менән бүләкләнде.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# МӘКТӘПТЕҢ ДӘ ИҢ ҘУРЫ!

**(Башы 1-се биттә).**

Бөтәһе 96 уҡыу кабинеты, дүрт спорт залы, стадион, бер нисә уйын майҙансығы, медицина блогы булған, һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн лифт, пандустар һәм айырым санитар бүлмәләр йыһазландырылған 31 мең квадрат метрҙан ашыу майҙанлы мәктәп бинаһы "А" хәрефенең архитектура формаһында төҙөлгән. Яңы мәғариф үҙәге директоры Миләүшә Мырҙағәлина учреждениела "Тулы көн мәктәбе" программаһын тормошҡа ашырыуҙары тураһында хәбәр итте. Дәрестән һуң уҡыусыларҙың түңәрәктәргә һәм секцияларға йөрөү, ижад һәм спорт менән шөғөлләнеү мөмкинлеге бар. Бынан тыш, бында "Ломоносов фән мөйөшө", "Кулибин оҫтаханаһы", "Пушкин ҡунаҡ бүлмәһе" кеүек профилле йүнәлештәр менән "Мөмкин-



лектәр мәктәбе" проекты эшләй. Шулай уҡ медицина, полиция, психология-педагогия, эшҡыуарлыҡ кластары һәм креатив индустриялар класы ойошторолған. Балалар робототехниканы, авиамоделләштереү, программалау, блоггинг, театр һәм ораторлыҡ сәнғәтен, актерлыҡ оҫталығын, мультипликация, нәшриәт эшен, спорт туризмын өйрәнә, шулай уҡ шахмат, шашка, волейбол, гандбол, баскетбол уйнай ала.

- Әлегә мәктәптә 1-8 кластарҙа 1 339 бала уҡый. Беҙҙә беренсе кластар унау, - ти Миләүшә Мырҙағәлина. - Быйыл 9-11-се класс уҡыусыларын да йыйырға планлаштырабыҙ. Ә 2026 йылдың 1 сентябренән ата-әсәләр һорауы буйынса һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн коррекция һәм аутизм спектры боҙолған уҡыусылар өсөн кластар асасаҡбыҙ.

Радий Хәбиров заманса видеокүҙәтеү системаһы менән һаҡ пунктын, биология һәм башланғыс кластар кабинеттарын, лабораторияларҙы, дизайн студияһын, 494 урынлыҡ тамаша залын, спорт залын, 700 урынлыҡ ашхананы һәм эко-кафены ҡараны. Бөтә кабинеттар - интерактив ҡорамалдар, ә оҫтаханалар заманса техника менән йыһазландырылған.

- Волга буйы федераль округындағы иң ҙур мәктәп буш урында тиерлек барлыҡҡа килде. Был мөһим объектты төҙөү беҙгә еңел бирелмәне. Тапшырыу ваҡытын бер нисә тапҡыр күсерергә тура килде. Ниһайәт, быларҙың барыһы ла артта ҡалды, - тип билдәләне республика Башлығы журналистар менән әңгәмәлә.

# МОХТАЖДАРҒА...

**Өфөнөң барлыҡ райондарында аҙыҡ-түлек менән ярҙам итеү пункттары асылды. Улар "Ғаилә" үҙәктәрендә эшләй.**

Бының өсөн "Аҙыҡ-түлек" социаль ярҙам ойошмаһы вәкилдәре семинарҙар үткәрҙе, унда таратыу пункттарын ойоштороу, алыусылар менән үҙ-ара эш итеү, шулай уҡ берҙәм биҙәү стилен булдырыу тураһында һүҙ барҙы. "Хәҙер 1000-дән ашыу мохтаж кеше - ауыр тормош хәлендә ҡалған балалы ғаиләләр, яңғыҙ пенсионерҙар тейешле ярҙам алырға мөмкин. Шулай уҡ "Изгелек кәрзине" марафонының дүрт акцияһын үткәреү - аҙыҡ-түлек йыйыу планлаштырыла", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтендә.

Сара мохтаждарға 100 төрлө аҙыҡ-түлек йыйылмаһын формалаштырыу менән тамамлана.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы Ҙур һәм татыу ғаилә йылына арналған "Өйҙә" медиаконкурсы иғлан итә. Унда 8 - 17 йәшлек балалар һәм үҫмерҙәр ҡатнаша ала. Конкурс шарты буйынса, 30 мартҡа тиклем "Бәйләнештә" селтәрендәге төркөмгә (vk.com/tamir_telekanal) үҙ ғаиләң тураһында 3 минутҡа тиклем видео төшөрөп ебәрергә кәрәк. Еңеүсе "Тамыр" телеканалының төркөмөндә тауыш биреү юлы менән һайлап алына. Конкурстың төп призы - телевизор.

✔2026 йылдың ғинуарында Благовещен районы хакимиәте башлығы вазифаһына конкурс иғлан ителде. Конкурс комиссияһы ике кандидатураны күрһәтте. Депутаттар бер тауыштан Анна Карабанованың кандидатураһын хупланы. Карабанова 2024 йылдың ғинуарынан 2026 йылдың ғинуарына тиклем ошо вазифаны биләне, 2019-2024 йылдарҙа хакимиәт башлығының эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм инвестиция эшмәкәрлеге мәсьәләләре буйынса урынбаҫары, бизнес-шериф булып эшләне.

✔Рәсәй банкы булып уҙған ултырыш йомғаҡтары буйынса төп ставканы 0,5 процент пунктына, йылына 15,5 процентҡа тиклем төшөрҙө. Мәғлүмәт Рәсәй Үҙәк банкының рәсми телеграм-каналында баҫылған. Рәсми релизда күренеүенсә, илдең иҡтисады баланслы үҫеш траекторияһына кире ҡайтыуын дауам итә. "Төп сценарий уртаса төп ставканың 2026 йылда йылына 13,5-14,5 процент тирәһе булыуын фаразлай", - тиелә хәбәрҙә.

✔Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға эшкә күсә. Был турала Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә белдерҙе. Билдәле булыуынса, Иванова 15 йылдан ашыу республиканың хеҙмәт министрлығы менән етәкселек итте. Парламентта ул закон сығарыу эшмәкәрлеге менән шөғөлләнәсәк. Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры итеп Ольга Кабанова тәғәйенләнде. Быға тиклем Кабанова ведомство етәксеһенең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләне.

✔Республикала пенсионерҙарҙы һәм уларҙың пенсияһын иҫәпләнеләр. Социаль фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһе мәғлүмәттәре буйынса, 2026 йылдың 1 февраленә республикала 1,121 миллион пенсионер иҫәпләнгән. Уларҙың 151 меңе эшләп йөрөй. Быйыл 1 ғинуарҙағы индексациялауҙан һуң ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме 1 февралгә 26 211 һумға еткән. Февраль башына тәғәйенләнгән пенсияларҙың уртаса күләме 24 566 һум тәшкил иткән.

*ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*



## АҢ МЕНӘН ИДАРА ИТӘ АЛЫРМЫ?

**Редакцияға Вәли Иҙрисовтан яһалма интеллект мөмкинлектәре һәм хәүефтәре тураһында һорауҙар килде. Беҙ был хаҡта туранан-тура ЯИ-ның үҙенән һорарға булдыҡ һәм донъяның алдынғы өс виртуаль әңгәмәсеһе, Әлисә (Алиса, Рәсәй), Дөпсөк (DeepSeek, Ҡытай) һәм Google яһалма интеллекты (АҠШ) нейроселтәрҙәренә мөрәжәғәт иттек. Уларҙың киң мәғлүмәтле, урыны менән айырылып торған, әммә төп фекерҙәре берҙәм булған яуаптарын иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

**3-сө һорау. Яһалма интеллекттың нейролингвистик программалау методикаларын күпләп ҡуллана башлауы ниндәй эҙемтәләргә килтерер?**

***Әлисә (Алиса, Рәсәй):*** НЛП-ға нигеҙләнгән технологияларҙы күпләп ҡулланыуҙы ике яҡлы үткер бысаҡ менән сағыштырыр инем. Бер яҡтан, был - үтә лә файҙалы шәхси ярҙам һәм аралашыуҙы яҡшыртыу булһа, икенсе яҡтан - кешеләрҙең ризалығын һорап та тормайынса, улар менән манипуляциялау ихтималлығы. Big Data-ны анализлаусы яһалма интеллект тотош төркөмдәрҙең эске шиктәрен һәм йәшәйеш ҡиммәттәрен асыҡлап, уларға маҡсатлы йоғонто яһай ала. Был ышаныс көрсөгөнә һәм цифрлы арығанлыҡҡа килтерәсәк. Шуға күрә дәүләт кимәлендә ҡәтғи сикләүҙәр булдырырға һәм кешеләрҙең цифрлы мәҙәниәтен үҫтерергә кәрәк.

***Дөпсөк (DeepSeek, Ҡытай):*** Һүҙ иҫке методикалар тураһында түгел, ә телде анализлау һәм синтезлау (Natural Language Processing) ҡеүәтенең кешегә нисек йоғонто яһаясағы, был ҡоралдың нисек ҡулланыласағы тураһында бара. Ирекле ихтыярҙың системалы рәүештә ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә кешенең аңлы ҡарар ҡабул итеү һәләте алгоритм функцияһына әүерелеү хәүефе бар. Был хәүефкә ЯИ-ны маҡсатлы ҡулланыуҙы көйләү һәм сикләү саралары ғына ҡаршы тора ала. Әйтәйек, кеше ҡылығын күҙәтеүсе цифрлы системалар һәр кемгә билдәле булырға һәм ундай күҙәтеүҙе һүндерә йәки ҡабыҙа алыу мөмкинлеге булырға тейеш.

***Google яһалма интеллекты (АҠШ):*** Яһалма интеллекттың ышандырыу техникаһын күпләп ҡулланыуы - бөгөнгө көн ысынбарлығы. Беҙ "үтә һөҙөмтәле ҡылыҡ инженерияһын" күҙәтәбеҙ. Яһалма интеллект кеше психикаһының "ҡаҡшаған урындарына" теүәл йүнәлтелгән "ышандырыу бомбалары" ташлай. Был "когнитив капитуляцияға" - кешенең үҙ ирке менән ҡатмарлы анализдан, фекерләүҙән баш тартыуына килтерә. Быға яуап итеп, EU AI Act (Европа союзының яһалма интеллект тураһындағы законы) кеүек ҡанундар яһалма интеллект системаларының кеше ҡылығына көслө йоғонто яһауын тыя. Шәхестең когнитив үҙаллылығын һаҡлап ҡалыу - көн ҡаҙағындағы мөһим бурыс.

**Рөстәм НУРЫЕВ.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҺӘР ДӘРЕС - ТОРМОШ ҺАБАҒЫ



**Ҡыҙыҡ: беҙҙең мәғариф системаһы сиктән-сиккә һуғылыуҙарҙан, йыш ҡына төплө уйланмаған "реформалар"ҙан һәм уҡыусылар, студенттарҙың белем кимәле өҫтөндә тәжрибәләр үткәреүҙән ҡасан туҡтар икән?**

Һаман да шул совет осорондағы тетрәнеүҙәрһеҙ, тотороҡло, ышаныслы һәм төплө белем биреү системаһын иҫкә төшөрөргә тура килә. Ул саҡтарҙағы белем биреү кимәле хаҡында бөгөн дә, совет заманына "аллергияһы" көслө әҙәмдәрҙән дә хатта йыш ҡына ыңғай фекерҙәр генә ишетелеп килә. Эйе, ул саҡта мәғариф етәкселеге океан аръяғына ла, йәнәшәләге Европа яғына ла аланйолан ҡаранып, уларса эшләргә, уларға ярарға тырышманы ла шикелле. Өҫтәүенә, ул замандарҙа Болонья системаһы тигән нәмә лә юҡ ине. Сит илдәрҙә совет дипломын таныусы берҙән-бер критерий, ул да булһа, белем кимәле булды. Шунлыҡтан, совет белеме алған күп һәләтле ғалимдар һәм белгестәрҙең тап ана шул тарафтарҙа ҙур һорау менән файҙаланғаны, юғары баһаланғаны бер кемгә лә сер түгел. Ярай, 2003 йылда, ҡайһы бер билдәле вуз етәкселәре (МДУ ректоры В.Садовничий, мәҫәлән) ҡәтғи ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, күстеләр ҙә Көнбайыш тәртибенә, ләкин ул студентҡа ни бирҙе һуң? Бөтөн Рәсәй студенттар союзы рәйесе Олег Цапко әйтеүенсә, Рәсәй дипломдарын барыбер "автоматик" рәүештә танырға йыйынманылар ҙа. Һәр хәлдә Рәсәй вузын тамамлаусыларға - бакалаврмы ул, магистрантмы - квалификацияларын раҫлатыу өсөн махсус тикшереүҙәр, һынауҙар аша үтергә тура килде.

Депутат Олег Смолин да уны йөпләй: Болонья системаһында ҡатнашыу уңыш ҡаҙаныуға килтермәне, сит илдәр тарафынан белем тураһындағы документтарҙы таныу һәр ваҡыт хөкүмәт-ара килешеүҙәргә бәйле булып ҡалды. Бөгөн килеп, Дәүләт Думаһында 1 сентябрҙән вуздарҙы тағы ла ниндәйҙер аңлайышһыҙ "яңы модель"гә күсереү хаҡында һүҙ алып барыла. Әлеге "яңы модель" тигәндән, депутат Ксения Горячева әйтеүенсә, 2026 йылдың сентябренән илдең 11 вузында тәжрибә рәүешендә бакалавриат менән магистратураны нигеҙ (4-6 йыл) һәм махсуслаштырылған юғары белем (1-3 йыл. Ординатура, ассистентура-стажировка) системаһы алмаштырасаҡ, ә ҡалған вуздарҙа элеккесә тәртип һаҡланып ҡаласаҡ. Яңы модель инженер һәм фән менән төплө шөғөлләнеүсе йүнәлештәр өсөн мөһим, сөнки был өлкәлә һөнәр һайлаусы студенттарға юғары әҙерлек талап ителә һәм улар был белемде дүрт йыл эсендә генә алып бөтөрә алмаясаҡ, тип аңлатыла.

Был дөрөҫтөр ҙә, сөнки хеҙмәт баҙарында барған етеҙ үҙгәрештәр уҡытыу программаһын бөгөнгө көн талабынан сығып ирекле рәүештә төҙөүҙе талап итә. Дөрөҫөн әйткәндә, был мәсьәлә бөгөнгө рубриканың төп темаһы булып та тормай ине, төп сәбәп - белем биреү өлкәһендә ҡуҙғатылмаҡсы тағы бер яңылыҡ хаҡында: РФ Мәғариф министрлығы ошо йылдың 1 сентябренән дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендә сит тел дәрестәрен сикләмәксе. Был нигеҙҙә 5-7 кластарҙа аҙнаһына өс сәғәттән сит тел дәрестәрен икәүгә ҡалдырыу хаҡында бара.

Һөҙөмтәлә был класс балалары уҡыу йылы барышында 510 сәғәт урынына сит телдә 408 сәғәт, йәғни 92 сәғәткә кәм, уҡыясаҡ. Әйткәндәй, мәҫәлән, инглиз теленән Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыусылар һаны ла йылдан-йыл кәмей барыуы күҙәтелә: 2023 йылда улар һаны 85,5 мең уҡыусы булһа, 2024 йылда - 84,7 мең, ә былтыр 81 мең кеше тапшырған. Шуға ярашлы, инглиз теленән уртаса балл да кәметелә, ә үтә торған балл хәҙер ни бары 22 менән сикләнәсәк. Ләкин вуздарҙа ул 40 балл. Тик шулай ҙа бюджет урыны өсөн конкурста ни тиклем юғарыраҡ балл булһа, шул тиклем һәйбәт икәнлеге былай ҙа аңлашыла. Мәскәүҙең Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты уҡытыусыһы Валерия Архипова фекеренсә, инглиз телен БДИ-ға һуңғы кластарҙа ғына "штурмлау" етмәй, уны нигеҙ белем булараҡ, тап ана шул 5-6 кластарҙа ныҡлап өйрәнеү, даими телмәр үҫтереү кәрәк.

*ИШАРА*

# ҠӘҘЕР КҮРҺЕН ЭШ КЕШЕҺЕ...

**Гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙең береһен дә ҡалдырмай уҡып барам. Улар уйландыра. Ҡайһы берҙәренә үҙ фекеремде белдереп, яуап яҙғы килә. Бына гәзитебеҙҙең бер һанында "Алты урам һепереүсе фатирлы булды" тигән бер мәғлүмәт булды. Онотолған яҡшы йоланы иҫкә төшөрөп, яйға һалыу бигерәк ҡыуандырҙы. Совет заманының ыңғай яҡтарын күреп, тергеҙергә кәрәк шул.**

Бер "Ералаш" фильмы иҫтә ҡалған. Уҡытыусы дәрескә әҙерләнеп килмәгән, шул сәбәпле һорауға яуап бирә алмаған уҡыусыға: "Тырышып уҡымаһаң, урам һепереүсе генә булырһың инде", - ти. Тәнәфестә был синыфтың бөтөн уҡыусылары баяғы синыфташтарын - Вованы уратып ала. Был хәлде икенсе дәресте үткәрергә килеп ингән уҡытыусы аптырап күҙәтә һәм: "Аңламайым - ни сәбәпле һеҙ Воваға һоҡланаһығыҙ?" - тип һорай. Бер уҡыусы тороп баҫып: "Ул бит үҫкәс урам һепереүсе, түтәлдәргә һыу һибә

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быуаттар буйына телдән-телгә күсеп килгән "Урал батыр" эпосы тәүге тапҡыр Европа сәхнәләрендә яңғырай. AY YOLA төркөмө Европа буйлап турнеға юллана. "Беҙ ысын тауыш алып киләбеҙ: ҡурай, думбыра, ҡумыҙ. Шулай уҡ Башҡортостан ерендә тыуған тарих менән таныштырабыҙ", - тип белдерҙеләр төркөмдә. Беренсе сығыш Сербияның баш ҡалаһы Белградта 28 февралдә була. Һуңынан AY YOLA Болгарияға, Венгрияға һәм Германияға юллана.

✓Стәрлетамаҡ ҡалаһы үҙәгенең туристик коды булдырылды, тип белдерҙе Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина. "Был - туризмды үҫтереүҙә һәм тарихи мирасты һаҡлауҙа мөһим аҙым. Тормошҡа ашырылған саралар ҡала халҡын һәм ҡунаҡтарҙы йәлеп итеп кенә ҡалмай, әүҙем ял итеү һәм саралар үткәреү өсөн заманса шарттар ҙа тыуҙыра", - ти тармаҡ етәксеһе. "Стәрлетамаҡ - креатив ҡала" проектына 100,5 миллион һум аҡса йәлеп ителгән.

✓2026 йылда республикала 13 күперҙе ремонтлау һәм реконструкциялау ҡаралған, тип хәбәр итәләр төбәктең Транспорт министрлығынан. Улар Борай, Дүртөйлө, Дәүләкән, Ишембай, Күгәрсен, Салауат һәм башҡа районларҙа урынлашҡан. "Эштәр тамамланғас, ошо йүнәлештәр буйынса хәрәкәт хәүефһеҙ һәм уңайлылыҡ буласаҡ", - ти Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓Башҡортостан экспортына ярҙам итеү үҙәге Төркиәлә күп тармаҡлы бизнес-миссияла ҡатнашыу өсөн предприятиелар исемлеген төҙөй. Сара 25 марттан 27 мартҡа тиклем Стамбул ҡалаһында үтә. "Төркиә Башҡортостан тышҡы сауҙа әйләнешенең 15,6 процентын биләй һәм был күрһәткес буйынса икенсе урында тора. Сарала ҡатнашыу беҙҙең экспортерҙарға ышаныслы бәйләнештәр булдырырға булышлыҡ итәсәк", - тип белдерә тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева.

✓Республикала "Һөт кухняһы"ның 134 пункты эшләй. 2025 йылда улар аша 20,8 мең кеше бушлай һөт ризыҡтары алған. 2019 йылда асылған "Һөт кухняһы" селтәрҙәре 7 йыл эсендә 120 мең кешене хеҙмәтләндергән. Ошо көндәрҙә уның тағы ике яңы пункты эшләй башланы. Благовещенда ул сауҙа үҙәктәренең береһендә асылһа, Учалыла махсус йыһазландырылған айырым бинала урынлашты. Был хаҡта социаль селтәрҙәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте.

*✔ Һәр кеше юғары белемгә эйә була алмай. Тәбиғәт кешене төрлө һәләтле итеп яратҡан. Шуға ябай эшсегә хөрмәт менән ҡараһаҡ ине. Урам һепереүсе хеҙмәтен дә хөрмәт итергә өйрәнһәк ине.*



Сит илдәр менән мөнәсәбәттәр үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, тормош дауам итә, шуға күрә лә сит телдәрҙе уҡытыуҙа ниндәйҙер сәйәси сәбәптәр кәртә була алмайҙыр. Сит телдәрҙе яҡшы үҙләштереү йәштәрҙең донъя кимәлендә аралашыуына юл аса; күптәр халыҡ-ара компанияларҙа эшләп, тәжрибә тупларға, донъяуи кимәлдә фекер йөрөтөргә, дуҫтар табырға теләй. Инглиз теле булһынмы ул, ҡытай телеме - һәр хәлдә лә был бөгөнгө йәштәрҙе карьера үҫешенә, әүҙем эшмәкәрлеккә әйҙәйәсәк сара. Дөрөҫ, Балтик буйы илдәре кеүек, Рәсәйгә агрессив мөнәсәбәтле төбәктәрҙә рус теле даими ҡыҫырыҡлана, ләкин бындай әхлаки сикләнгәнлек һәм сәйәси күрәгаралыҡ уларҙың үҙҙәре өсөн генә зыян.

Рәсәй Мәғариф министрлығының сит телдәр уҡытыу сәғәттәрен кәметеү ниәте уҡытыу программаһына 5-7 кластарҙа "Рәсәй халыҡтарының рухи-әхлаҡи мәҙәниәте нигеҙҙәре" (ОДНКНР) урынына уның яңыртылған һәм өҫтәлгән варианты - "Рәсәйҙең рухи-әхлаҡи мәҙәниәте" сәғәттәре индереү һәм уға дәрес теҙмәһендә башҡа предметтар иҫәбенә урын биреү кәрәклеге менән аңлатыла. Был йәһәттән Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Мәскәүҙең 109-сы мәктәбе директоры Евгений Ямбург былай тине: "Яңы предметтар индереү буйынса тәҡдимдәр бик күп, ләкин шул уҡ ваҡытта мәктәп программаһының резина түгеллеген дә оноторға ярамай. Мин рухи-әхлаҡи мәҙәниәткә һис ҡаршы түгелмен,- ти танылған педагог, - ләкин мәғариф сиктәрен туктатыуһыҙ киңәйтә барыу ҙа мөмкин түгел. Юғиһә, мәктәп программаһына индереп ебәрергә тигән ниндәй генә тәҡдимдәр яңғырамай: һалым министрлығы - һалымдар хаҡында, Экология министрлығы сүп-сарҙы айырымлап йыйыу тураһында дәрестәр индерергә тәҡдим итә һәм башҡалар. Бындай ваҡытта мин аптыраштан: "Ә нимә иҫәбенә? Математиканымы әллә рус телен ҡыҫҡартабыҙмы?" - тип һорайым. Һис юғында баланың башы, мейе мөмкинлектәре хаҡында уйлайыҡ - ул да бит төпһөҙ түгел, үҙенә күрә нормалары бар, ә уны боҙоу көрсөккә килтерәсәк",- тип яуап бирәм", - тигәйне.

Уның фекеренсә, рухи-әхлаҡи мәҙәниәт хаҡында һәр бер гуманитар предмет үҙе күпте һөйләй һәм төплө һабаҡ бирә. Һәләтле уҡытыусы класында, әлбиттә. Мәҫәлән, рус теле һәм әҙәбиәте, тарих, география, биология дәрестәре - шул уҡ рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр хаҡында түгелме ни? Достоевский, Толстой, Чехов һәм башҡа классиктарҙың үлемһеҙ әҫәрҙәре, бөйөк тарихи шәхестәребеҙҙең тормош өлгөһө, шулай уҡ Тыуған ил, Ватан киңлектәрен һәм байлыҡтарын өйрәнеүсе хатта география предметы ла төплө белемле уҡытыусы дәресендә ысын мәғәнәһендә рухи ҡиммәттәребеҙгә һөйөү тәрбиәләүсе һабаҡҡа әйләнә. Йәнә лә был кластарҙа электән "Рәсәй халыҡтарының рухи-әхлаҡи мәҙәниәт нигеҙ-ҙәре" дәресе уҡытылып килгәс, тимәк, уның дәрестәр теҙмәһендә тәғәйен үҙ урыны бар, тигән һүҙ һәм яңы вариант өсөн ниндәйҙер предмет сәғәттәрен ҡыҫҡартыу ҙа кәрәк булмай сыға түгелме, тип комментарийҙар яҙа социаль селтәрҙәрҙә ата-әсәләр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

торған шлангыһының хужаһы буласаҡ. Беҙҙең дә ул шлангты тотоп, һыу сәсрәткебеҙ килә. Былар әле сиратҡа яҙылдыҡ та инде",- тимәһенме!

Был көләмәс, әлбиттә. Әммә совет осоронда һәр бер хеҙмәткә хөрмәт бар ине. Етмәһә, эшләп уҡыған бик күп студенттар ул хеҙмәттең ауырлығын белә ине (мин үҙем иртәнге почта таратыусы булдым). Бөтөн донъяға билдәле опера йырсыһы Нетрепко, мәҫәлән, үҙе уҡыған уҡыу йортоноң коридорын йыуған.

Һәр кеше юғары белемгә эйә була алмай. Тәбиғәт кешене төрлө һәләтле итеп яратҡан. Шуға ябай эшсегә хөрмәт менән ҡараһаҡ ине. Урам һепереүсе хеҙмәтен дә хөрмәт итергә өйрәнһәк ине. Юҡһа, урам тулы сүп-сар ҡайҙан килә? Ана шул кешелеклелек булмау, башҡаларҙы хөрмәт итә белмәү һөҙөмтәһе был.

Әйткәндәй, бер телевизион тапшырыуҙа, Альберт Эйнштейн беренсе бомбаның шартлауын күргәс: "Нинә генә мин ғалим һөнәрен һайланым икән, урам һепереүсе булһам, күпкә яҡшыраҡ булыр ине", - тип үкенгән, тинеләр. Әйтер һүҙем шул: бер сиктән икенсе сиккә һикермәй йәшәһәк ине. Юғиһә, Украинала коммунизмдың бөтөрҙәләр ҙә, фашизм баш ҡалҡытты. Һәләте булмаһа ла, амбицияһы ҙур кешеләрҙән кешелек донъяһы күпме зыян күргәнен тарих үҙе генә белә. Йәнә, бер юморист әйткәнсә: "Заводтар тик тора. Эшләргә бөрәү ҙә юҡ. Барыһы ла - менеджер"... Һығымтаһын һәр кем үҙенсә яһар.

**Айгөл АХУНОВА.**

---

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# МӨҘҘӘТЕ ҮТКӘН ПРЕЗИДЕНТ

**Үткән аҙнаның ахырғы көнөнә ҡарата килгән хәбәрҙәрҙән Запорожьелағы "Көнсығыш" ғәскәр төркөмө артиллерияһының Украина Ҡораллы көстәре ҡарамағындағы дрондар менән идара итеү пунтын юҡ итеүе, ә "Көнбайыш"төркөмө "Ураган"ының Ҡыҙыл Лиман йүнәлешендәге дошман позицияларын ҡыйратыуы хаҡында мәғлүм булды.**

Херсон өлкәһе башлығы Владимир Сальдо өлкә үҙәгенең Украина Ҡораллы көстәре контролендә булыуы һәм унда электр энергияһы, йылылыҡ биреүҙең туктатылыуы, һөҙөмтәлә сит ил ялланыусы боевиктарҙың Херсондан сығып ҡасыуҙары хаҡында бәйән итте. Үткән аҙнала Харьков өлкәһенең Чугуновка һәм Сумы өлкәһенең Сидоровка тораҡ пункттары беҙҙең "Төньяҡ" ғәскәр төркөмө ҡарамағына күсте. Дошман 1425 һалдатын юғалтты, 6 бронемашина, 81 автомобиль, 12 ялан артиллерияһы оруҙиеһы, "Град" һәм "Yampire" хәрби машиналары, 45 боеприпас склады ҡыйратылды.

Киев режимы башлығы Владимир Зеленский хәүефһеҙлек буйынса Мюнхен конференцияһында АҠШ-тың конфликтты көйләүҙе тиҙләтеүгә баҫым яһауына яуап итеп, әгәр ике айға утты туктатып торған хәлдә, 31 мартта президент һайлауҙары үткәрергә әҙер булыуы хаҡында белдергәйне. Экспертҡар аңлатма биреүенсә, был президент булараҡ вәкәләтлек мөҙҙәте үткән Зеленскийҙың сираттағы "уйыны" ғына: һайлауҙар үткәреүгә һылтанып, ул Рәсәйгә ғәскәрҙәр хәрәкәтен ваҡытлыса туктатып торорға шарт ҡуймаҡсы, ләкин Мәскәү конфликтты тыныс көйләүгә өлгәшеү маҡсатында хәрби хәрәкәттәрҙе дауам итәсәк, сөнки әлегә Украинала президент һайлауҙарын ғәмәли ойоштороу мәсьәләһе етди ҡаралмай; икенсенән, Киев алдына был һайлауҙарҙың легитимлыҡ мәсьәләһе килеп баҫасаҡ: йөҙәрләгән мең хәрби хеҙмәткәр фронтта, ә миллионлаған украин граждандары сит илдәргә сығып киткән. Киев мэры Виталий Кличко әйтеүенсә, бойондороҡһоҙ дәүләт булараҡ Украинаның һаҡланып ҡалыу мәсьәләһе ҡыл өҫтөндә.

Шул уҡ ваҡытта Киев өсөн отошһоҙ шарттарҙа конфликтты тамамлауҙы талап итеп, АҠШ Украинаға баҫым яһауын дауам итә. Икенсе яҡтан, Кличко менән Зеленский араһындағы конфликт та хәлде ҡатмарлаштыра. Үткән аҙнала Зеленскийҙың белдереүенсә, Рәсәй ғәскәрҙәре Киев, Одесса һәм Днепрҙағы энергетика объекттарын утҡа тотҡан. Һөҙөмтәлә баш ҡалала 3 меңгә яҡын йортҡа электр энергияһы һәм йылылыҡ биреү туктатылған. Ошо сәбәпле һәм, ғөмүмән, Киев режимы сәйәсәте арҡаһында тыныс халыҡ араһында ғәйәт көслө ризаһыҙлыҡ потенциалы тупланды. Украин сәйәсмәне Спиридон Килинкаров фекеренсә, әле халыҡ хәрәкәтен ойоштороусы лидер юҡ, ләкин мәле килеп етһә, Украинала үҙгәрештәр килтереүсе берҙән-бер реаль көс "бисәләр бунты" буласаҡ, ти рада депутаты.

*Һуңғы осорҙа социаль селтәрҙәр таҫмаһын баҫып алған һәм интернет ҡулланыусыларҙың теңкәһенә тейеүсе яңы күренеш - яһалма видеолар хаҡында бер нисә һүҙ.* Был хаҡта бөгөн, ниһайәт, етди баҫмалар ҙа яҙа башларға һәм раҫми фекерен белдерергә мәжбүр. Яһалма интеллект (ИИ) интернет киңлектәрендә һәр төрлө видеороликтар, һүрәттәр һәм музыка һалыу өсөн мәғәнәһеҙ һәм сифатһыҙ ИИ-слоп тигән күренеш килтереп тыуҙырҙы, тип яҙа "Известия" каналы. Был яңы "термин" инглиз теленән һүҙмә-һүҙ тәржемәлә "йыуынты һыу" тигәнде, йәғни күберәк аудитория туплау һәм килем алыу өсөн нейросеть ярҙамында тормошта булмаған күренештәрҙән контент булдырыуға ҡарата әйтелә. Унда интернет ҡулланыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеү һәм уларҙа ниндәй ҙә булһа хис-тойғо уятып, ҡараусыларҙан "лайыҡтар" йыйыу, комментарийҙар яҙыуына өлгәшеүгә баҫым яһала. ИИ-слоп тыуҙырыусы сервистарҙың, ахыр сиктә мәғәнәһеҙ һәм хатта хәүефле рәүешкә инә барыуы билдәләнә. Ысынбарлыҡтан ситләшеү, икеле-микеле сифат рәүеше һәм уның киң күләм халыҡҡа йүнәлтелеүе - ИИ-слоптың төп билдәләре. Эт урынына бегемот "етәкләп" йөрөтөүсе әбей йәки билдәле сәйәсмәндәрҙең көлкөлө портреттары һүрәтләнгән видеолар ана шундай типик слоп миҫалы була ла инде. Күп кешегә яһалма уйлап сығарылған фотоһүрәттәр һәм видеолар оҡшамай, сөнки бындай контент кешене албырғата һәм ысынбарлыҡты уйҙырма менән бутарға мәжбүр итә. ИИ-слоп сәйәсәт өлкәһенә лә килеп инде һәм был бәхәстәр тыуҙырмай ҡалманы. ИИ ярҙамында тиҙ генә ниндәйҙер дөрөҫлөгө тикшерелеп тә тормаған берәй контент һалыу ҡулланыусылар кәйефенә генә түгел, уларҙың сәйәси ҡараштарына ла тәьҫир итә. Ҡайһы саҡ АҠШ президенты Дональд Трамп та хатта ИИ-слоп менән мауығып ала. Айырыуса уның Газа секторы һәм маймыл һүрәтендә бирелгән элекке президент Барак Обама хаҡындағы видеороликтары төрлө фекер һәм бәхәс тыуҙырҙы. Интернет ҡулланыусылар ИИ-слоп күренешенә ниндәй генә мөнәсәбәттә булмаһын, ул уның авторҙары өсөн финанс яғынан отошло: еңел һәм байтаҡ килем килтерә. Былтырғы мәғлүмәттәр буйынса, донъя йөҙөндәге иң популяр 15 мең YouTube-каналдың 278-е яһалма интеллект ярҙамында ҡоролған. Һөҙөмтәлә улар 63 млрд тапҡыр ҡаралған һәм 221 млн яҙылыусы туплаған. YouTube-тағы ИИ-слоп баҙары йылына 117 млн доллар күләменә барып баҫа, тип иҫәпләй эксперттар.

YouTube-тың генераль директоры Нил Мохан йыш ҡабатланыусы сифатһыҙ контенттар менән көрәшәсәге хаҡында белдерә. 2026 йыл башынан алып, ИИ-слоп менән мауығыусы бер нисә популяр канал ябылған, ә бәгзеләренең ҡағиҙәләрҙе боҙоусы видеороликтары алып ташланған.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Мосолмандарҙың Үҙәк диниә назараты рәйесе, Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин "Өфөнөң почетлы гражданы" исеменә лайыҡ булды. Бүләкләү тантанаһында уға диплом, күкрәккә таға торған билдә һәм махсус таныҡлыҡ тапшырылды. "Һеҙҙең ошо ҡарарығыҙ һәм юғары исем өсөн ысын күңелдән рәхмәт белдерәм. Иң мөһиме, беҙ республикала тыныслыкты һәм милләт-ара татыулыкты һаҡлап ҡалдыҡ. Бөгөн беҙҙең яугирҙар бөйөк илебеҙҙең бойондороҡһоҙлоғон һәм суверенитетын яҡлай. Илебеҙ берләшеп, оло яуызлыҡҡа ҡаршы тора", - тип билдәләне Тәлғәт Тажетдин яуап һүҙендә.

✔1 марттан торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ваҡыты үҙгәрә, тип иҫкә төшөрҙөләр Өфө хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Рәсәй Торлаҡ кодексына индерелгән төҙәтмәләргә ярашлы, хәҙер торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәрҙе түләү ваҡыты айҙың 10-сы көнөнән 15-енә күсерелә. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн ваҡытында түләү - фатир хужаһының бурысы. Ваҡытында түләү коммуналь ресурстар: электр уты, һыу, йылылыҡ менән өҙлөкһөҙ тәьмин итергә һәм ваҡытында ремонт үткәрергә мөмкинлек бирә. Бынан тыш, был пеня өҫтәлеүгә, хеҙмәтте күрһәтеүҙе туктатыуға һәм суд процестарын булдырыуға юл ҡуймай.

✔Башҡортостан мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ "Кирбес ҡапҡалы Безруковтар усадьбаһы"н дәүләт һаҡлауы аҫтына алды. Йорт Октябрь Революцияһы урамындағы 22а һәм 226 адресы буйынса урынлашҡан. Усадьба 1870 йылда төҙәлгән. Билдәле булыуынса, ҡаланың мәҙәни-тарихи үҙәге буласаҡ был урамдағы йорттарҙа йәшәгән кешеләр тулыһынса күсерелгән. Законға ярашлы, биналарҙың төҙәлөш үҙенсәлектәре һәм архитектура биҙәүестәре тулыһынса һаҡланырға тейеш.

✔ "Алексеевский" агросәнәғәт комплексы (совхозы) Өфөләге магазиндарын яба. Әле 80 сауҙа нөктәһенең 72-һе ябылған да. Агросәнәғәт комплексының генераль директоры Дмитрий Овчинников билдәләүенсә, совхоз эре сауҙа селтәрҙәре менән тиң эшләй алмай, сөнки етештерелгән һөт, һөт ризыҡтары, йәшелсә, ярайһы юғары үҙкиммәткә эйә, ситтән килтерелгән продукция арзанырак һәм шуға үтемле лә. "20-30 кв м майҙанда өй эргәһендәге бәләкәй магазиндар форматында эшләргә ниәтләйбеҙ. Уларҙы яҙ йәки йәй асыу күҙаллана. Ассортимент элекке кеүек ҡаласаҡ", - ти етәксе.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ Башҡорттар араһында ла ир кешеләр тире эшкәртеү, сыбыртҡы үреү кеүек кәсептәр менән булған бит. Милли кейем үрнәктәре эҙләп, районға экспедицияларға сыҡҡанда ла тап ирҙәр тегеү, бесеү эшенә оҫта икәнен күргәнем булды.



ХАҘИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Сәләмәтлек сихәте

Грипп тейгәндә балға шул хәтлем ҡырылған һарымһаҡ болғап, төнгөлөккә бер ҡалаҡ ашайҙар. Йәиһә ярты стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, гөлйемеш, ҡурай еләге, ҡараған ҡушып, ашарҙан алда бөткәнсе әсәләр. Ангина, стоматит булғанда бер стакан ҡайнар һыуға берәр ҡалаҡ бал, ромашка болғап ауыҙҙы сайҡайҙар.

Склероз, мейе склерозы, атеросклероз кисергәндә бер стакан балға шул тиклем үк һуған һуты ҡушып, яҡшылап бутап, ашарҙан бер сәғәт алда көнөнә өс мәртәбә ҡабул итәләр. Радикулиттан, ревматизмдан интеккәндә торманы соҡоп, бал һалып, дүрт сәғәттән һуң уны ауыртҡан урынға һөртәләр.

Халыҡ медицинаһында туберкулездан, үпкә шешенән, бронхиттан дауаланыуҙың төрлө ысулдары билдәле. Эмалле кәстрүлгә йөҙәр грамм йүкә балы, аҡ май, эске сусҡа майы һалып, утҡа ҡуйып иретәләр, мәгәр ҡайнар хәлгә еткермәйҙәр. Шунан иретмәгә йөҙ илле грамм алоэ, илле грамм какао порошогы ҡушып, яҡшылап болғайҙар. Бер ҡалаҡ ҡушымтаны бер стакан ҡайнар һөткә болғап, иртән һәм кис оҙаҡ ваҡыт эсәләр. Им сараһын түбәндәге ҡушылмалар менән дә әҙерләйҙәр: бер килограмдан ашыу йүкә балы, ике стакан һыу, йөҙ грамм зәйтүн майы, ваҡлап туралған алоэ, егерме биш грамм ҡайын бөрөһө, ун грамм йүкә сәскәһе төнәтмәһе. Ошо ҡушымтаны көнөнә өс мәртәбә берәр ҡалаҡ ашайҙар.

Әүәл, тәьҫирле дарыуҙар юҡ саҡта, туберкулез дауалауға бирешмәгән сир ине. Шул ваҡытта беҙҙең күрше ауылдан үпкә ауырыуына дусар бер апай бик оҙаҡ район дауаханаһында ятты. Дауалаусы табип, ниһайәт, иренә әйтә: "Ҡатынығыҙҙы алып ҡайтығыҙ, ике-өс ай ғына йәшәре ҡалған". Был ауыр хәбәрҙе апай ишетеп ҡала. Ҡайтҡас, ҡайғыһынан кәрәҙле балдан әсе бал ҡоя ла эсә, ҡоя ла эсә. Байтаҡ умарта тотҡан булалар. Шулай өс-дүрт ай, ярты йыл үтеп китә, апай һаман иҫән, яҡты донъя менән хушлашмай, ә теремекләнгәндән-теремекләнә. Бер мәл ауылға табиптар килеп төшә, ни күрһендәр - апай йүгереп йөрөп ята. Район дауаханаһына алып барып, рентгендан ҡараһалар - туберкулездың эҙе лә ҡалмаған. Мансалы, прополислы, инә һөтлө кәрәҙле балдың әсе балы бына шулай үпкә сиренә шифа була.

Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге бал нигеҙендә бер нисә төрҙән торған туҡланыу-һауыҡтырыу ниғмәттәре тәҡдим итә. Балдың "Сәләмәтлек" серияһы тәбиғи балға үҫемлектәр төнәтмәһе, актив биологик өҫтәлмәләр өҫтәп әҙерләнә.

Бал менән бергә юл япрағының антисептик тәьҫире, шешеүгә ҡаршы, йәрәхәттәрҙе уңалтыуға, ауыртыуҙы баҫыуға, ҡаҡырыҡ сығарыуға йоғонтоһо арта. Эвкалипт ҡушылған бал да көслө антисептик тәьҫир яһай, ауыртыуҙы, микробтарҙы бөтөрә. Шулай уҡ календулалы бал йәрәхәттәрҙе уңалтыу, шешеүҙе, бактерияларҙы, спазманы юҡ итеү, йәнә үт ҡыуыу үҙенсәлектәренә эйә. С витамины һәм күҙле бәшмәк (чага) ҡушыулы балда шештәргә ҡаршы тороусанлыҡты көсәйтә.

Йөрәгүлән ҡушылған балды даими ҡабул иткәндә ҡан тамырҙары баҫымы кәмей, йөрәк ауырыуына бәйле шешенеү бөтә, йоҡо һәйбәтләнә, физик әүҙемлек арта, аң-зиһен асыла. Дунала өҫтәлгән бал йөрәк-тамыр системаһы, йөрәк мускулдары эшмәкәрлеген яҡшырта, йөрәк тибеүе йышлығын, холестерин кимәлен кәметә. Бесәй үләне ҡушылған бал иһә нервы, йөрәк-тамыр системаһын тынысландыра, бәүел бүленеүҙе һәм йоҡоно һәйбәтләндерә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 1-6-сы һандарҙа).**

АФАРИН ЕГЕТ!

# ЗАМАН ЙӘШТӘРЕ ЛӘ...

## этномода шауҡымында

**Бөгөнгө көндә төрлө сараларҙа, хатта урамда ла этно элементтары булған кейемле кешеләрҙе күреү бер кемде лә аптыратмай хәҙер. Халҡыбыҙҙың аҫыл костюм үрнәктәрен, биҙәүестәрен тергеҙеү эше лә активлаша. Тормошон шул эшкә бағышлаған йәш егет Иҙел ХӘКИМОВ менән милли кейем оҫтаһы һөнәренең үҙенсәлектәре тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**➔ Тыуып үҫкән ерҙәрең, ғаиләң тураһында һөйләп кит әле. Атай-әсәйеңдән алған тәрбиә, һабаҡтар ниндәй?**

- Мин үҙем Әбйәлил районы Аҫҡар ауылында тыуып үҫкәнмен. Атайым - Фәрит Булат улы, урман башҡорто, сығышы менән үҙенең ҡул оҫталары менән дан тотҡан Ишкилде ауылынан була. Шуға мин дә үҙемде сығышым менән Ишкилде ауылынан тип таныштырам. Атайым эске эштәр органдарында эшләне, әлеге ваҡытта хаҡлы ялда. Әсәйем - Рима Фазулла ҡыҙы, иҡтисадсы, бөгөнгө көндә район хакимиәтенең мәғариф бүлеге хеҙмәткәре. Улар ғаилә ҡороп, Аҫҡарға күсеп килгәс, беҙ тыуғанбыҙ. Ғаиләлә өс малай, иң кесеһе - мин һәм Урал батырҙың өсөнсө улы Иҙелдең исемен миңә ҡушҡандар. Әсәй-атайым икеһе лә ныҡ уҡымышлы кешеләр: әсәйем рус әҙәбиәтен яҡшы белһә, атайым башҡортса күп уҡый. Һәм улар мине башҡорт мөхитендә, тыуған ерҙе яратырға, тамырҙарынды онотмаҫҡа, туғанлыҡ ептәрен өҙмәҫкә өйрәтеп үҫтерҙеләр. Шундай тәрбиә биргәндәре өсөн рәхмәтлемен уларға.

Ғөмүмән, бала сағым бәхетле үтте. Ярты йәйҙе Күсем ауылындағы өләсәйемдә, инәйҙәремдә күлдә һыу инеп, ҡояшта ҡыҙынып үткәрһәм, икенсе яртыһы Ишкилделәге икенсе олатайыма бесән эшләшеп үтә торғайны.

**➔ Һөнәр һайлау юлың бормалы-бормалы булған, ахры, шулаймы?**

- Эйе, Таһир Күсимов исемендәге Аҫҡар гимназияһын тамамлағас, артабан ҡайҙа барырға тигән һорау килеп тыуҙы. Үҙемдең киләсәктә кем булырымды аныҡ ҡына белмәһәм дә, тыуған ерҙә йәшәү, халҡыма хеҙмәт итеү хыялы ҙур ине. Ғөмүмән, бәләкәй сағымда аттар менән ныҡ ҡыҙыҡһындым. Башҡортостанда балалар өсөн берҙән-бер "Юрға" ат-спорт мәктәбенә йөрөү бәхете тейҙе. Бала саҡта аттарға ҡарата һөйөү олатайым мәктәбенән, уның менән бесәнгә йөрөгән ваҡыттарҙан ҡалған. Ат йәнле кеше булғас, үҫкәс, ветеринар булырмын тигән уйҙар ҙа бар ине. Әммә мәктәптә уҡыған йылдарҙа медицина өлкәһе бик оҡшаһа ла, химия менән бик борсаҡ бешмәне минең. Унан башҡа математиканы яҡшы белә инем. Шул ваҡытта әсәйем медицина өлкәһендә инженер һөнәрен һайларға тәҡдим итте. Уйланым-уйланым да, шул юҫыҡта әҙерләнә башланым. Физика һәм математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырҙым. Мәскәүгә уҡырға китергә тигән уй ҙа бар ине, атай-әсәйем: "Тәүҙә Өфөлә уҡып сыҡ, уҡып бөткәс, теләгең һүрелмәһә, Мәскәүгә китерһең", - тинеләр, төпсөк улдары булғас, йыраҡҡа ебәрергә теләмәгәндәрҙер инде. Мәктәптә уҡығанда уҡ бейеүгә йөрөгәйнем, шуға сәнғәт өлкәһенә лә китергә тигән уйҙар булып алды, әммә ғаилә менән кәңәшләшкәндән һуң, төплөрәк белем алыр өсөн ул ваҡыттағы Өфө дәүләт авиация техник университетын һайланым.

Медицина өлкәһендә инженер - бик етди һөнәр, студент булғас, бейеүҙе ташлайым, башкөллө уҡыуға сумам, тип ниәтләп барған инем. Әммә ижадилыҡ үҙенекен итте: шунда уҡ беренсе курстар араһында ойошторолған конкурста ҡатнашырға ризалыҡ биргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым. Ул ваҡытта ӨДАТУ күпселеген рус мөхитле уҡыу йорто булараҡ билдәле ине, мин башҡорттарға хас ябайлығым менән яулап алдым, ахыры, шунан һуң башҡорт, татар дуҫтарым барлыҡҡа килде. Шул конкурстан һуң "Айтуған" халыҡ бейеүҙәре ансамбленә саҡырҙылар. Тәүҙә бер аҙ икеләнеп торһам да, шулай ҙа ризалаштым.

Бакалаврҙы тамамлағас, эш эҙләү әллә ни уңышлы булманы, шуға күрә артабан да үҙемдең йүнәлешем буйынса магистратураға индем. Ул ваҡытта мин милли кейем менән ныҡлы ҡыҙыҡһына, киләсәктә инженер булып эшләмәйәсәгемде аңлай башлағайным инде. Ярты йыл белем алғандан һуң, БДУ-ның Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына күсергә тигән ҡарарға килдем. Был күсеүемә ҡыуанып бөтә алмайым, дөрөҫөн генә әйткәндә. Әлеге ваҡытта аспирантмын.

**➔ Һәр хәлдә, әлеге шөғөлөңә университетта өйрәтмәгәндәрҙер. Башҡорттарҙа тегенеү - ирҙәр эше түгел, тигән фекер йөрөй бит инде, һин был шөғөлгә, дизайнер эшенә, нисек килдең? Модельер булараҡ тәүге тәжрибәң тураһында һөйлә әле?**

- Дизайнер кешенең үҙенең коллекцияһы булырға тейеш, мин әле ундай кимәлгә етмәгәнмен, үҙ коллекциямды булдырыу минең өсөн әле хыял булып ҡына ҡала. Үҙемде милли кейем оҫтаһы тип һанайым. Белеүемсә, әсәйемдең өләсәһе итек тегеү, балаҫ һуғыу оҫтаһы булған. Бәлки, уның оҫталығы быуындар аша миңә күскәндер. Әсәйемдең әсәһе лә мине ни өсөндөр һәр саҡ ҡул эштәренә өйрәтте. Хатта шарф бәйләп ҡарағаным булды. Шул ваҡытта минең күңелемә тәүге орлоҡтар һалынғандыр, моғайын.

Ғаиләбеҙҙә милли кейем өлкәһендә эшләгән кеше булманы, әммә һәр ваҡыт минең ҡыҙыҡһыныуҙарымды күтәреп алып, дәртләндереп торҙолар. Мәҫәлән, дүртенсе кластарҙа уҡығанда, "Китап" нәшриәте һатыу менән районға килгән ваҡытта, атайым миңә үҙем теләгән барлыҡ китаптарҙы, шул иҫәптән Руденконың "Башҡорттар" китабын да алып, эсенә "Иҙелдең шәхси китапханаһы" тип яҙып та биргәйне. Бәләкәй сағымда шул китаптарҙы ҡарап ултырғанда, көләпәрә күреп ҡалып, бесәнгә кейергә уңайлы тип, шундайҙы үҙемә тегеп алғайным. Уны эҫе ҡояштан елкәне ҡаплап кейеп йөрөнөм. Был шөғөлгә китаптар аша килдем, тип әйтһәң дә була.

Мәктәптә тикшеренеү эштәре менән булғанда, һыбай йөрөгәндә милли костюмда сығыш яһау теләге уянғайны. Бейегән осорҙа ла ошо миллилек мөхитендә ҡайнап йәшәйһең бит инде. Сәхнә костюмдары өсөн тәңкәләрҙән сулпылар эшләй торғайным. Тап шул мәлдә интернет селтәрендә оҫта-реконструкторҙар эштәре киң тарала башлағайны, шул эштәр ҙә мине илһамландырҙы.

Тәүге стилләштерелгән селтәремдең схемаһын бейеү конкурстарында милли биҙәүестәр эшләгән апай һыҙып, нисек яһалғанын аңлатып биргәйне. Яҡындағы "Лилиә" ательеһынан кәрәкле материалдар алып, яйлап ҡына әсәйемә тип селтәр эшләй башланым. Бынан ары ҡыҙыҡһыныуым арта ғына барҙы.

Юғары уҡыу йортонда уҡыған ваҡытта "Этномода" конкурсына иғлан күреп ҡалдым. Ҡатнашыу теләге бар икәнен белгәс, профком бар мөмкинлектәр булдырҙы, ныҡ ярҙам итте. Был конкурсҡа мин үҙем белгәнсә башҡорт костюмы әҙерләнем. Еңгәм Зөбәржәт Үтәрбаева тегеү машинаһында күлдәктәр тегеп бирҙе, биҙәүестәрен үҙем әҙерләнем. Шулай итеп, ҙур булмаған коллекциям менән Майкоп ҡалаһында үткән "Этномода" халыҡ-ара йәш дизайнерҙар конкурсында ҡатнаштым. Рәсәйҙең төрлө-төрлө төбәктәренән йәштәр йыйылғайны. Башҡортостандан бер мин генә инем. "Милли кейем" номинацияһында беренсе урын яуланым. Дизайн эшенә ҡағылышлы булған һөнәрле кешеләр араһында мин берҙән-бер инженер инем.

Тәүге осорҙа ауыр булыр һымаҡ күренде, халҡыбыҙҙа "Башҡорттар улай итмәй" тигән фекер ҙә йөрөй бит инде. Әммә әлегәсә мин үҙемдең тормошомда һөнәремә ҡағылышлы бер ниндәй ҙә ҡаршылыҡ тойғаным булманы. Яҡындарым һәр саҡ ярҙам итергә әҙер. Дуҫтарым, үҙем бик үк иғлан итергә тырышмаһам да, "Иҙел милли кейемдәр тегә" тип, данымды алдан таратып йөрөй. Яңы таныштарым һорауҙар бирә, ҡыҙыҡһыналар, ғаиләләрендәге ҡомартҡыларға бәйле тарихтар менән бүлешәләр, минең өсөн ҡыуаналар. Бөтөнләй таныш булмағандар мастер-кластарға килеп, эшләп, тегеп ҡарайҙар. Бөгөнгө көндә кәрәкме ул, тип һорағандар ҙа булды. Минеңсә, бындай шөғөлдәр һәр ваҡытта ла актуаллеген юғалтмаясаҡ, яһалма интеллект уларҙы тулыһынса алмаштыра алмаясаҡ.

Ир-егеттәр эше түгел, тигән фекергә килгәндә, беҙҙең ғаиләлә атайым, кәрәк булһа, ваҡ-төйәк тегенеү эшен дә башҡара торғайны. Беҙ шуны күреп үҫтек. Башҡорттар араһында ла ир кешеләр тире эшкәртеү, сыбыртҡы үреү кеүек кәсептәр менән булған бит. Милли кейем үрнәктәре эҙләп, районға экспедицияларға сыҡҡанда ла тап ирҙәр тегеү, бесеү эшенә оҫта икәнен күргәнем булды. Бөгөнгө көндә донъялағы иң күренекле дизайнерҙар ҙа - ир-егеттәр.

**➔ Һинең был шөғөлөң нимәһе менән үҙенсәлекле? Башҡорт халҡының ошо хазинаһын, мираҫын һаҡлауға, тергеҙеүгә өлөшөң бар тип иҫәпләйһеңме? Милләттәштәрҙе ҡыҙыҡһындырамы был һин тыуҙырған моделдәр?**

- Һәр бер һөнәр эйәһе был тормошта үҙ эше менән тирә-яҡтағыларға файҙа килтерергә тейеш. Тап мин ошо оҫталығым менән башҡаларҙы халҡыбыҙҙың бай тарихы, үҙенсәлектәре менән таныштыра, үҙебеҙгә лә уны онотмаҫҡа ярҙам итә алам тип уйлайым. Милли кейем үткәндәрҙе лә сағылдыра һәм милләттең үҫеүен, үҙгәреүен дә раҫлай.

Башҡалар менән сағыштырғанда, мин бар эштәремдә лә музей өлгөләренә ҡарап, башҡорт милли кейем ҡанундары буйынса, үҙ ҡулдарым менән эшләйем. Биҙәүестәр өсөн мәрйен-аҡсалар ҙа, уларҙың нигеҙе буласаҡ кейеҙҙәр ҙә ҡул менән эшкәртелә. Күптәрҙең, халыҡ костюмдары элементтары тағыуға ауыр, уңайһыҙ, тигәнен белеп, мин биҙәүестәрҙе хәҙерге заманға яраҡлаштырып стилләштерергә, әммә ябайлаштырмаҫҡа тырышам.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ *Беҙҙе ҡаршы алған башҡорт, ҡунаҡсыллығын күрһәтеп, шундуҡ үҙенең өйөнә саҡырҙы, улына аттарыбыҙҙы ҡарарға, ҡатынына самауыр ҡуйырға ҡушты.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# УРМАН БАШҠОРТТАРЫНА СӘЙӘХӘТ

**XIX быуат аҙағында - XX быуат башында йәшәгән рус табибы, медицина докторы Дмитрий Петрович НИКОЛЬСКИЙ 1899 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан "Башкиры. Этнографическое и санитарно-антропологическое исследование" тип исемләнгән үтә ҡыҙыҡлы китап авторы булараҡ билдәле. Унан башҡа Д.П. Никольский 1895 йылда "Землеведение" ғилми журналында "Из поездки к лесным башкирам" тигән этнографик мәҡәлә баҫтыра. Был мәҡәләлә Архангел заводы, Тирәкле, Уҫманғәле, Инйәр ауылдары һәм Көньяҡ Уралдың башҡа урындары иҫкә алына. Автор урындағы башҡорттарҙың көнкүреше һәм йәшәү рәүеше, ялан һәм урман зоналары башҡорттары араһындағы айырмалыҡтар хаҡында ла бәйән итә.**

Йыш ҡына өй икегә бүленгән була: беренсе яртыһында, йәғни ишектән ингән яғында, аш-һыу әҙерләнә; шунда уҡ усаҡ яғыла, ябай ғына аҙыҡ-түлек һәм башҡа ваҡ-төйәк келәте лә шунда; стена йә иһә шаршау менән ҡапланған икенсе яғы йоҡо бүлмәһе ителә, ундағы тәпәш кенә һике өҫтөнә өй кәрәк-яраҡтары, һунар әйберҙәре, ат сбруяһы һәм башҡа нәмәләр һалып ҡуйыла. Тәҙрәләр булмағас, яҡтылыҡ асыҡ ишектән һәм ярыҡтар аша ғына төшә. Йорт былай таҙа тотола. Былдай йәйләү өйҙәрен урман башҡорттары бер нисә урында, үҙҙәре күсеп йөрөгән ерҙә ҡора, - ҡайһы берҙәренең 3-5 һәм унан да күберәк йәйләү өйҙәре була, шуға күрә икенсе йылға йәйләүгә сыҡҡанда уның йорто әҙер тора, шул уҡ ваҡытта дала башҡортона һәр йыл һайын үҙе менән тирмә алып килеп ҡорорға тура килә.

Йәйләүгә сығыу, тауҙарҙа ҡар иреп бөтөп, үләндәр ҡалҡып сыҡҡан ваҡытта башлана. Башлыса, май айының беренсе яртыһынан йә иһә аҙағынан алдараҡ сыҡмайҙар, ҡайһы саҡта хатта июнь башында ғына ҡуҙғалалар; бөтә ауыл бергә сыға, - унда бер кем дә ҡалмай, ауыл юҡҡа сыҡҡан кеүек тойола, уны кесерткән һәм ҡырағай киндер баҫып китә.

Беҙҙе ҡаршы алған башҡорт, ҡунаҡсыллығын күрһәтеп, шундуҡ үҙенең өйөнә саҡырҙы, улына аттарыбыҙҙы ҡарарға, ҡатынына самауыр ҡуйырға ҡушты. Башҡорттарға хас булған ҡыҙыҡһыныусанлыҡ менән минең кем булыуымды, ҡайҙа һәм ни өсөн барыуым тураһында белеште. Уны ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуап биреп бөткәс, юлдашым менән тирә-яҡты, шулай уҡ йәйләүҙәге башҡа йорттарҙы ҡарарға булдыҡ. Уларҙың береһе янында бер төркөм башҡорттар ниҙер хаҡында һөйләшеп тора ине. Йыраҡ түгел усаҡ яғылған, унда эленгән ҡаҙанда ит бешерергә ҡуйылған. Алсаҡ хужа, ә ул мулла булып сыҡты, беҙҙе үҙенең ҡунаҡтары итеп күреп, үҙенә саҡырҙы. Йола буйынса



беҙ баш тарта алманыҡ. Мин муллаға үҙемдең сәйәхәтемдең маҡсаты хаҡында һөйләй башланым. Мулла шым ғына башын һелкеп торҙо һәм ваҡыты-ваҡыты менән "Ярар, ярар", тип әйткеләне, ул шул рәүешле "Яҡшы булған", тип хуплауын белдерҙе.

Икенсе көндә иртә менән беҙ юлыбыҙҙы дауам иттек. Елмерҙәк һырттарынан бик матур күренештәр асыла. Йыраҡта сығып килеүсе ҡояш нурҙарында тау түбәләре күренә, түбәндә, тау аҫтында, томан түшәлеп ята, ул күперелеп өҫкә табан күтәрелә һәм ағастарҙы ҡуйы аҡ пәрҙә менән ҡаплай.

Ниһайәт, беҙ тауҙың иң бейек һырттарының береһенә күтәрелдек (2500 м тиклем). Елмерҙәктең урта һырты түбәһе ылыҫлы урман менән ҡапланған, ә түбәнерәк өлөшөндә һәм итәктәрендә ҡарурман өҫтөнлөк итә; бында, башлыса имән, ҡарама, ҡайын, уҫаҡ һәм күк тирәк ағастары үҫә; һуңғыһы йылға ярҙарында һәм үҙәндәрендә бигерәк тә күп осрай. Ҡарағас һәм аҡ шыршы бында иҫ китмәле бейек булып үҫә. Елмерҙәктең көнсығыш битләүенән Шүре һәм Инйәр йылғалары үҙәндәренә төшөп етергә була. Шүре йылғаһы ҙур ауышлыҡлы, нык бормалы һәм уның төбө, башҡа тау йылғаларыныҡы кеүек, ташлы. Уның ағымы көслө, текә һәм бейек ярҙары ҡуйы урман йә иһә ҡыуаҡлыҡтар менән ҡапланған. Һәр саҡта ла тын торған урманда уның ағым тауышы йыраҡтан ишетелеп тора. Уның аша сығыу урынын ҡыйынлыҡ менән табып була, ә йылғаны бер нисә тапҡыр аша сығырға тура килә. Йылға үҙәнендә һерәйеп торған ҡаялар күп урындарҙа емерелгән, һәм буй-буй булып түшәлгән таш ишелмәләре юлды ҡаплап ята. Тик ошондай юлдарҙа йөрөргә күнеккән башҡорт аты ғына ошо ҙур таштар аша иркен үтеп сыға ала.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 3-6-сы һандарҙа).**

*ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП...*

# СУҠЫНДЫРЫУ СӘЙӘСӘТЕН...

## башҡорттар ҡабул итмәгән

### Икенсе осор



Сәйет Садир етәкселегендәге ихтилал (1681 йыл) башланғандан алып 1735-1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалына тиклемге ваҡытты үҙ эсенә ала. Был осор Башҡортостанда батша хөкүмәтенең әүҙем дини сәйәсәтенең башланыуы, Рәсәйҙә самодержавиеның нығыныуы, батшаның сикләнмәгән власҡа эйә булыуы менән ныҡ бәйле.

Дини иҙеүҙең башы дәүләт закондарында яҡшы күренә. 1681 йылдың 15 февралендәге указ менән суҡынғандарға өҫтөнлөктәр бирелә, өҫтәүенә, эш хаҡы ла вәғәҙә ителә. 1681 йылдың 16 майындағы указ суҡыныуҙан баш тартҡан татар мырҙаларын ер биләмәләренән мәхрүм итә. 1681 йылда Өфөлә махсус епископ тәғәйенләнеүе лә ошолай ҡабул ителә. Башҡа дин кешеләрен христианлыҡҡа күсерергә бойороҡ биреләүе хаҡындағы хәбәр 1681-1684 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының башланыуына төп сәбәп була. Башҡорттарҙың хәрәкәтен һүлпәнәйтеү маҡсатында батша хөкүмәте 1682 йылдың 6 июнендә махсус грамота баҫып сығарырға мәжбүр була: "...такого нашего указа о крещении, чтоб крестить неволею, не бывало и ныне нет. И вам бы о том ни о чем не сумневатца". Ихтилалды тар-мар иткәс тә, христиан миссионерҙарының эше уңышлыраҡ барһын өсөн, суҡынғандарға өҫтөнлөктәр биреүҙе дауам итәләр. Атап әйткәндә, бер указ буйынса яңы суҡынғандарҙы холоплыҡҡа күсереү тыйыла. Шул уҡ ваҡытта батша хөкүмәте христиан булмаған халыҡтарҙың дини тойғоларын рәнйетмәй генә, "изге динде" ирекле рәүештә ҡабул итеү йүнәлешен тоторға тырыша: "которые крестятся, и к тем держать ласку и привет, чтобы на тех смотря и иные православной веры пожелали".

Төньяҡ һуғышы осоронда - 1700-1721 йылдарҙа - аҡсаға мохтажлыҡ кисергән Петр хөкүмәте ошо ауыр хәлдән сығыу юлын феодаль һалымдарҙы артабан арттырыуҙа күргән. Рус крәҫтиәндәренең һалымы ике тапҡырға артҡан. Башҡорттар ҡаҙнаға ҡиммәтле йәнлек тиреләре һәм бал менән яһаҡ түләгән, хәрби хеҙмәт үтәгән. Бынан тыш, уларға төрлө өҫтәлмә һалымдар индерелгән.

Шулай итеп, һалымсыларҙың "эшмәкәрлеге", халыҡтан көлөү 1704-1711 йылдарҙа барған башҡорттар ихтилалының башланыуына сәбәп булған. Башҡорттарҙың милли азатлыҡ хәрәкәте һигеҙ йылға һуҙыла. Баш күтәреүселәр, нигеҙҙә, православие ғибәҙәтханаларын ҡыйрата. 1709 йылға тиклем Ҡаҙан һәм Өфө өйәҙҙәрендә улар тарафынан 75 сиркәү яндырыла. Ахырҙа батша хөкүмәте башҡорттар өсөн яңы һалымдарҙан баш тартырға мәжбүр була. Бер үк ваҡытта православиены ҡабул иткәндәргә өҫтөнлөктәр булдырыла: улар (1720 йылдың 15 сентябрендәге указ менән) өс йылға йән башына һалынған һалымдан һәм (1722 йылдың 1 ноябрендәге указ менән) ғәскәргә алыныуҙан азат ителә. Шулай ҙа миссионерҙар бик ҙур уңышҡа өлгәшә алмай: XVIII быуаттың тәүге яртыһында Башҡортостанда суҡындырылғандар 300 йорт ҡына тәшкил иткән. Мосолман руханиҙарының мәжүсиҙәр араһындағы эшмәкәрлеген туҡтатыу өсөн 1729 йылдағы указ менән мосолмандарҙың миссионерлыҡ эше үлем язаһы менән тыйыла.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы. Башы 4-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



**Сергей РУДЕНКО**

# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Башҡорттарҙа игенде һуғып алыу төрлө ысулдар менән башҡарылған: аттар, буш һәм таш һалынған арбалар ярҙамында, сыбағас һуғып, XVIII быуат һуңында, И. Г. Георги һүҙҙәренсә, башҡорттар орлоҡто һаламдан эре малдан тапатып айырған. Йәғни һуғыуға әҙерләнгән иген өҫтөнән эре малды йөрөткәндәр. В.М. Черемшанский билдәреүенсә, уҙған быуат уртаһында игенде былдай ысул менән һуғыу Башҡортостандың рус булмаған халҡы араһында ғына түгел, рустар араһында ла киң таралған булған.

Дағаланмаған аттар менән баҫтырғанда бәйләнгән көлтәләр түңәрәк буйынса берберенә яҡын итеп, тығыҙлап, башаҡтарын өҫкә ҡаратып баҫтырып ҡуйылған. Баҫтырыусы аттар һаны төрлөсә: өстән алып унға һәм унан да күберәк булған. Улар бер-береһенә муйындарынан һәм ҡойроҡтарынан бәйләп ҡуйылған. Түңәрәк уртаһында ҡамсылы бер кеше торған һәм аттарҙы ҡыуалаған. Ҡабырға яҡтарҙан һәнәкле һәм тырмалы бер нисә кеше һаламды түңәрәктең эсенә, аттарҙың аяҡ аҫтына ырғытып торған. Ваҡыты-ваҡыты менән аттарҙы ырҙын табағынан (токтан) сығарып, тырма менән һуғылған һаламды тырматып, аҫта ҡалғанын әйләндереп, аттарҙы ҡабат ырҙын буйлап ебәргәндәр. Был операция бер нисә тапҡыр ҡабатланған. В. М. Черемшанский һүҙҙәренә ҡарағанда, уңыш яҡшы булғанда биш ат көнөнә 100 бот иген һуҡҡан.

XX быуат башында көньяҡ башҡорттары араһында иген һуғыуҙың тағы ике ысулы таралған: таштар менән һәм таштар тейәлгән арба егелгән аттар менән. Иген һуғыу таштары күсеп килеүсе украиндарҙан алынған. Арба менән иген һуҡҡанда, арба егелгән атты ырҙын буйлап һалынған көлтәләр өҫтөнән йөрөткәндәр. Сыбағас һуғыу Башҡортостандың көнбайыш һәм өлөшләтә төньяҡ һәм үҙәк өлөшө өсөн хас булған. Урал аръяғы һәм көньяҡ башҡорттарында сыбағас һуғыу бөтөнләй булмаған, йәки был ысулды һирәк кенә һәм бары тик тары һәм һоло һуғыу өсөн ҡулланғандар. Иген һуғыу маҡсатында ҡулланылған сыбағас **(һүрәттә)** ике өлөштән торған: оҙонлоғо 1,2 метрға еткән көбәктән һәм тәпәстән. Көбәктең алғы осо йыуаныраҡ итеп эшләнгән һәм унда диаметры 1,5 - 2 сантиметр булған втулка быраулаған. Ошо втулкаға ҡайыш кейҙерелгән, уның бер осо көбәктең йыуанайған өлөшөнөң - нигеҙенә, икенсеһе тәпәстең муйынына бәйләнгән. 35 сантиметр оҙонлоғондағы тәпәс - имән, ҡайын йәки ҡарама ағасынан эшләнгән. Көбәктең муйынындағы ҡайыш та, тәпәс муйынындағыһы ла ирекле өйөрөлөп йөрөгән, ураланып тормаған һәм сыбағас менән эшләгәндә ауырлыҡ тыуҙырмаған.



Игенде көрәк йәки тубал ярҙамында елгәргәндәр. Бай башҡорттар күрше рус крәҫтиәндәренән атҡа тағылған һуҡҡыс һәм елгәргесте күреп, үҙҙәрендә лә шуны ҡулланған.

Игенде һаҡлау өсөн амбар һәм келәттәрҙән тыш, башҡа айырым махсус биналар төҙөлмәгән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Яңы тел үҙләштерһәң, үҙеңде башҡа кеше итеп тоя башлайһың һәм хатта уйҙарың да башҡаса тыуа, ҡорола. Башҡортса, русса, инглизсә, испанса һәм португалса һөйләшкәндә, һәр осраҡта башҡа кешемен.*



# АРМИЯ ХЕҘМӘТЕНДӘ

## ир-егетте һәр йәһәттән

**Беҙҙә алмаштырыр йәш быуын ниндәй ул? Сәғит БӘҘРЕТДИНОВ менән әңгәмә ҡороп, ошо һорауға яуап эҙләнек. Ул Өфөлә тыуып үҫкән, өс юғары белемгә эйә, әүҙем ирекмән, донъяға киң ҡарашлы йәш кеше.**

**Сәғит, һин мегаполиста тыуып үҫкәнһең. Ырыуың, ата-бабаларың тураһында ниҙәр беләһең? Бер юлы үҙең менән дә таныштырып үт гәзит уҡыусыларҙы.**

- Мин үҙем - әйле ырыуы башҡорто. Тарихсылар билдәләүенсә, тамырҙарыбыҙ уғыҙҙарға барып тоташа. IV-V быуаттарҙа был ҡәүем Арал буйы һәм Көньяҡ Уралдан алып Көнбайыш Монголия далаларына тиклем таралып ултырған. IX-XII быуаттарҙа ата-бабаларыбыҙ Һырдарья һәм Арал буйы далаларынан Көньяҡ Уралға килә һәм Мейәс, Уй, Әй йылғалары үрендә, Урал йылғаһының үрге ағымында, күпселек осраҡта хәҙерге Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында - Салауат, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле, Балаҡатай райондары биләмәһендә, урынлаша. Ҡайһы бер аралар күсенеп йөрөгән. Мәҫәлән, минең дуҫым - Архангел районының әйле ырыуы башҡорто. Киң билдәле башҡорт тарихсы-ғалимы, яҙыусы, суфый-шағир Тажетдин Ялсығол (1768 - 1838 йылдар) үҙенең "Тарихнамә-и Болғар" әҫәрендә (асылда, әйле ырыуы шәжәрәһе) тарихи шәхестәр, тарихи ваҡиғалар менән бер рәттән, Ҡол Ғәлигә барып тоташҡан үҙенең шәжәрәһен дә килтерә.

Үҙемдең ата-бабаларыма килгәндә, атайым, Вәлиәхмәт Миңләхмәт улы, архивтарҙа ултырып, тулы мәғлүмәт туплай алды, һәм мин бөгөн етенсе быуынға тиклем шәжәрәмде беләм. Ниңәһе ҡыҙыҡ, ул Сәғит исемле бабамдан башлана. Уның тураһында бик үк белмәйбеҙ, ә бына уның улы Бикжан Сәғитов үҙ ваҡыты өсөн ярайһы ҙур поход старшинаһы чинын биләй. Тоғро хеҙмәт итә, Ҡурғаш ауылынан Иҙрискә күсеп ултыра. Был турала "ревизские сказки" тип аталған ул саҡтағы йән иҫәбе документтарында мәғлүмәт бар. Бикжан Сәғитовтың улы - Мөхәмәтфәйез. Ул 48 йәштәр тирәһендә донъялыҡтан үтә. Уның улы Мөхәмәтшакир бик талантлы кеше була, ҡурайҙа оҫта уйнай. Мөхәмәтшакирҙың улы - Бәҙретдин. Ул уҡымышлылығы менән айырылып тора. Бәҙретдиндың улы Миңләхмәт - минең ҡартатайым. Ул, һаулығы насар булһа ла, үҙ теләге менән һуғышҡа китә, яраланһа ла, тыуған йортона иҫән ҡайтып инә. Атайым Вәлиәхмәт Миңләхмәт улы Мәскәү дәүләт педагогия институтының педагогика һәм психология факультетын тамамлай. Мәсәғүт педагогия училищеһында, Башҡорт дәүләт педагогия институтында психология фәнен уҡыта. Артабан Мөхәмәтгәле Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейында фәнни-методик эштәр буйынса директор урынбаҫары вазифаһын биләй. 1999 - 2003 йылдарҙа Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың Закондар сығарыу палатаһы депутаты вәкәләттәрен атҡара. БР-ҙың "Мәғариф тураһында"ғы законына үҙгәрештәр индереп, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу буйынса закон ҡабул итеүҙә туранан-тура ҡатнаша, уның авторҙарының береһе ул. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара, хәҙер "Киске Өфө" гәзитендә эшләй.

Ғаиләлә беҙ - өс малай һәм бер ҡыҙ. Мин үҙем 1988 йылда тыуғанмын. Өфөнөң 136-сы башҡорт лицейын тамамланым. Тәүге юғары белемде Башҡорт дәүләт университеты филология факультетының башҡорт-сит илдәр телдәре бүлегендә алдым. 1999 йылда Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының психология буйынса магистратураһында уҡырға индем. Уны тамамлағас, медицина университеты магистратураһында ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә беренсе ярҙам ойоштороу йүнәлеше буйынса белем алдым. Хәҙер медицина колледженың өсөнсө курсында уҡып йөрөйөм. Алла бирһә, быйыл фельдшер дипломы алам.

**Тамырҙарың тәрән һәм бәҫле. Үҙең дә белемгә ынтылаһың, тәрән фекерләйһең. Әйт әле, филолог-педагог, сит ил телдәре белгесе, психолог, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә беренсе ярҙам ойоштороу буйынса белгес, фельдшер - былар бер-береһе менән нисек бәйләнгән һөнәрҙәр, уларҙы ниндәй маҡсат тотоп өйрәндең һәм өйрәнәһең?**

- Кеше бәләкәйҙән үҙ образын тыуҙыра. Атай-әсәйе, үҙенә ҡарата мөнәсәбәттәр, бала саҡ ваҡиғалары, даими ишеткән һүҙҙәр, мәктәп аша хасил була. Тәүге тапҡыр вуз һайлағанда һәләтемә, мәктәптә өлгәшемә таяндым, тип әйтә алам. Инглиз телен һәйбәт үҙләштергәйнем. Сөнки беҙҙең лицейҙа был сит ил теле тәрәнәйтеп өйрәтелде. Бюджет урынына инер өсөн еңел юлдан киттем килеп сыға. Ләкин эске теләгем башҡа ине. Ул медицина менән психология юҫығында ятты. Ни өсөн тигәндә, бәләкәйҙән атайымдың психология буйынса китаптары менән ҡыҙыҡһына инем. Шәхси китапханаһы бик бай булды. Шул иҫәптән балалар психологияһы буйынса ла баҫмалар күп ине. Мәҫәлән, балалар иғтибарын нығытыуға бәйле матур иллюстрацияланған журнал алдыртты. Ныҡ ҡыҙыҡ ине улар минең өсөн.

Әсәйем минең - табип. Беҙ бәләкәй саҡта ул гел, арағыҙҙан берәйегеҙ медицинаны һайлаһа ине, ти торғайны. Әсәйем дә медицинаға арналған төрлө конференцияларҙан, семинарҙарҙан матур биҙәлгән буклеттар, башҡа материалдар алып ҡайта ине. Уларҙы ҡарау ҙа мине мауыҡтырҙы. Препараттар нисек ҡулланыла, улар ярҙамында ниндәй ауырыуҙар дауалана - ошоларҙы ҡыҙыҡып уҡыным. Әлбиттә, был ҡыҙыҡһыныуҙар эҙһеҙ үтмәгәндер. Педагогика һәм филология тормош ағымына эйәреүем һөҙөмтәһе булһа, психология - эске ынтылышым сағылышы ул. Әле кабинетым бар, мохтаждарға психолог ярҙамы күрһәтәм.

Психологияға уҡытҡанда беҙгә медицина, йәғни кеше организмы төҙөлөшө, эшмәкәрлеге, сирҙәре тураһында белем бирелмәне. Шуға ла медицина колледжына уҡырға индем. Кеше бит тән һәм күңел торошон берләштергән бер бөтөндә хасил итә. Өҫтәмә был белем миңә пациенттың хәлен тәрәндән аңларға һәм уға дөрөҫ тәҡдимдәр бирергә булышлыҡ итә. Миҫал итеп, үҙ практикамдан бер осраҡты килтерәм.

Ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән студент бер туҡтауһыҙ стресс кисерә, имтихандарҙан ныҡ ҡурҡа. Ҡулына иғтибар иткәйнем, унда дерматит булыуын күрҙем. Бөтә бәләләренең башында, триггер булып, ошо сире ятмаймы икән, тигән уй килде башыма. Медицинала психосоматик сир, тигән төшөнсә бар. Психосоматик тайпылыштар - психик һәм физиологик факторҙарҙың үҙ-ара тәьҫире һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән өҙләгәү хәле. Шуға ла психологтарға медицинаны белеү бик тә кәрәк, тип уйлайым.

**Һине полиглот икән, тип ишеткәйнек. Ниндәй телдәрҙе беләһең, телдәр менән ҡасан һәм нисек ҡыҙыҡһына башланың?**

- Эйе, мин инглиз, испан, португал телдәрен, әлбиттә, рус һәм тыуған башҡорт телдәрен беләм, уларҙа иркен аралаша алам.

Әйткәйнем инде, мәктәптә сит илдәр теленән махсус программа буйынса уҡыттылар, тип. Башланғыс синыфтарҙы тамамлаған йылда лицейҙа инглиз телен тәрәнәйтеп өйрәтеүгә нигеҙләнгән кластар асылды. Бишенсelә аҙнаһына ун сәғәт инглиз теле инде. Көн һайын ике дәрес үтә ине. Ул ғына ла түгел, белем биреүҙә ике йүнәлешле программа ҡулланылды: Рәсәйҙә ҡабул ителгән һәм Бөйөк Британияның Кембридж университеты әсбаптары буйынса уҡыныҡ. Яратып уҡыныҡ, тип әйтә алам. Бик ҡыҙыҡ һәм бик үҙенсәлекле хәтирәләр ҡалған ул дәрестәр тураһында. Артабан, ошо йүнәлеште тотоп, университетҡа индем.

Испан телен Мексикала йәшәгәндә үҙләштерә башланым. Ҡайтҡас үҙаллы дауам иттем. Курстарға яҙылып шөғөлләндем. Ә Мексикала йәшәп алыуымдың үҙ тарихы бар.

Испан һәм португал телдәре бер төркөмгә ҡарай, әйтәйек, башҡорт, татар, ҡаҙаҡ һәм башҡа төрки телдәр кеүек. Мексикала йәшәгән испан телле һәм Бразилияла йәшәгән португал телле ике кеше, әгәр әкренерәк һөйләшһәләр, бер-береһен аңлай.

Гете менән Чехов, күпме тел беләһең икән, шул тиклем кеше һин, тигән. Йәғни, әгәр бер генә тел белһәң, һин - бер кеше, ике тел икән - ике кеше һәм артабан шулай күбәйә бараһың килеп сыға.

Сит телде белеү офоҡтарҙы киңәйтә һәм тормош тәмен тулыһынса тойорға мөмкинлек бирә. Телдәрен белмәйенсә, ул телдә һөйләшкән халыҡты, уның мәҙәниәтен һәм традицияларын тулыһынса аңлау мөмкин түгел. Яңы тел үҙләштерһәң, үҙеңде башҡа кеше итеп тоя башлайһың һәм хатта уйҙарың да башҡаса тыуа, ҡорола. Тел структураһы характерҙы, эмоцияларҙы үҙгәртә. Быны үҙемдең тәжрибәмдән сығып әйтәм - башҡортса, русса, инглизсә, испанса һәм португалса һөйләшкәндә, һәр осраҡта башҡа кешемен. Донъяға ҡарашым да башҡаса көйләнә башлай, яңы мәҙәни код барлыҡҡа килә. Уны, лингвистик-мәҙәни код, тиҙәр.

**Ә Мексикаға нисек барып сыҡтың һуң?**

- 2011 йылда армиянан ҡайттым. Ҡапылғарай эш мәсьәләһендә ҡыйынлыҡтар килеп тыуҙы. Лингвистик үҙәктә уҡытыусы урыны таптым. Матур ғына эшләп йөрөгәндә һаулыҡҡа бәйле уҡытыуҙы ташларға тура килде. Теште һурғанда инфекция ингән һәм миңдә нейропатия башланды. Йәғни периферик нервыларҙың, минең осраҡта "тройничный" тип аталған баш нервыларының елһенеүе сәбәпле, ярты битем хәрәкәтһеҙ ҡалды. Һөйләшә лә алмайым. Дауаланыу һәм реабилитация мәлендә студенттарҙың халыҡ-ара "АЙСЕК" тип аталған ойошмаһы менән бәйләнешкә сыҡтым. Резюмемды ҡабул иттеләр һәм үҙҙәренең базаһына индерҙеләр. Индонезия, Төркиә, Ҡытай һәм башҡа илдәрҙән тәҡдимдәр булды. Бер көндә Мексиканан шылтыраттылар. Әгәр риза булһаң, беҙ һине алабыҙ, тинеләр. Атай-әсәйем, дуҫтарым менән кәңәшләштем дә, унда барырға булдым. Ярты йыл Мексика балаларына инглиз теленән дәрестәр бирҙем. Унда белем биреү методикаһы бөтөнләй башҡа. Латин Армерикаһы илдәре ғалимдары берләшеп, үҙенсәлекле "Уна" тип аталған система булдырған. Мин уҡытҡан өсөнсө һәм бишенсе синыф уҡыусылары, әйтәйек, математиканы дәүләт теле булған испанса уҡый ҙа, минең дәрестә шул уҡ темаһы инглизсә тағы бер тапҡыр үтә. Был программаға ингән башҡа предметтарға ла ҡағыла ине. Ике ҡуяны бер юлы атып алған һымаҡ килеп сыға: инглиз телен өйрәнәләр һәм үткән материалды тағы бер тапҡыр ҡабатлайҙар.

Контракт буйынса бер йыл эшләргә тейеш инем, ләкин минe ҡабул иткән ойошманың ваҡытында визамды оҙайтмауы арҡаһында ярты йылдан ҡайтып китергә тура килде. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эшләһәм дә, бай тәжрибә тупланым. Өфөлә кесе синыф балаларын уҡытҡанда ул миңә ныҡ ярҙам итте. Йыл аҙағына уҡыусыларымдың һикһән проценттан ашыуы программаны яҡшы үҙләштерә ине.

**Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы факультетын тамамлағанда диплом эшеңде инглиз телендә яҡлағанһың икән. Был бик һирәк күренеш, ни эшләп шундай ҡарарға килдең?**

- Беҙҙең бүлек ике профилле ине. Ике факультетҡа ҡараныҡ - филология һәм роман-герман. Шуға ла һәр студенттың ике ғилми етәксеһе булды. Мин "Башҡорт, рус һәм инглиз телдәрендә "мин" тамыры" тип аталған темаға диплом эше яҙҙым. Швейцар психологы Карл Густав Юнгтың коллектив тәүаң концепцияһына ярашлы, һәр кемдә, халыҡтарҙа бөтә кешеләр өсөн уртаҡ, дөйөм эмоциональ үткәнебеҙ һөҙөмтәһе булған уйҙар һәм тойғолар йәшәй. Ғалим үҙе әйткәнсә: "Коллектив тәүаңда һәр кешенең мейе структураһында тергеҙелгән әҙәми зат эволюцияһының бөтә рухи мираҫы бар". Шулай итеп, коллектив тәүаң быуындан-быуынға тапшырыла һәм бөтә кешелек өсөн дөйөм булып тора. Улар төрлө халыҡтарҙың символдарында сағыла. Ошо теорияны "мин" тамыры аша иҫбатланым. Сөнки һүҙҙәр ул - шул уҡ символдар. Коллектив тәүаң бар икән, телдәрҙә ул мотлаҡ сағылырға тейеш. Ошо гипотеза өҫтөндә эшләгәндә бик ҡыҙыҡлы һөҙөмтәләр килеп сыҡты. Мәҫәлән, башҡорт телендәге "мин" зат алмашы рус телендә юҡ һымаҡ, ләкин икен-

✓ *Иң элек яҙмышың менән риза булырға кәрәк. Ниндәй генә хәлдәр килеп сыҡҡанда ла. Рәхмәтле була белеүҙе икенсе урынға ҡуям. Яңы таңды ҡаршылайһың икән - башың эшләй, тәнең һыҙламай икән - рәхмәтле бул.*



# СЫНЫҒЫУ...

## КӨСЛӨ ИТӘ

се сағылышта уны табып була: "меня зовут". Инглиз телендә "меня зовут" "my name is" булып яңғырай. Шулай итеп, "мин", "меня", "мей" (my) - мәғәнә яғынан да, яңғырашы буйынса ла яҡын һүҙҙәр. Тимәк, Карл Юнг теорияһы дөрөҫ. Әлбиттә, минең дәлилдәрҙе шик аҫтына ҡуйырға мөмкин. Диплом яҡлағанда комиссия ағзалары араһында, былар тап килеүҙәр генә, тип әйтеүселәр булды. Ғилми етәкселәрем минең позицияла ныҡ торҙо, һөҙөмтәлә һынауҙы уңышлы тоттом.

Диплом эшендә ни эшләп инглиз телендә яҙҙың, тигән һорауға яуап ябай ғына - телде тәрән өйрәнгәс, уны ҡуллана белергә лә кәрәк бит. Диплом эшемдә түгә етди практика тип тә ҡабул итергә мөмкин.

**Республика Хөкүмәте стипендианты булараҡ, һине Рәсәйҙең билдәле вуздарының берәһендә уҡыуыңды дауам итергә димләгәндәр, ләкин һин үҙ теләгең менән әрме хеҙмәтенә киткәнһең...**

- Бишенсе курста Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге степендия лауреаты инем. Артабан уҡыуҙы аспирантурала дауам итеү тураһында тәҡдим яңынылар. Мәскәү һәм Санкт-Петербург вуздарының берәһендә политология, социология һәм тарих буйынса өс йүнәлештең береһен һайлау мөмкинлеге булды. Мин баш тарттым. Йәшем үтмәҫ элек хеҙмәткә барайым, аҙаҡ Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы структураһында эшләрмен, тип уйланым. Июнь аҙағында диплом алдым һәм биш көндән армияға юлландым. Артиллерия ғәскәрҙәре сафына эләктем.

**Егет кеше һалдат мәктәбен мотлаҡ үтергә тейешме? Армия һиңә нимә бирҙе, ысын ир-егет ниндәй булырға тейеш?**

- Армия сафтарында хеҙмәт итеү - үҙенсәлекле тормош тәжрибәһе ул. Тик ир-егеттәрҙән генә торған коллективта бер-берең аңларға, аралашырға, уртаҡ тел табырға өйрәнәһең. Армияла, бигерәк тә түгә осорҙа, төрлө ауырлыҡтар, һынауҙар етерлек була, хеҙмәттәштәрең менән бергә уларҙы үтеп сығыу еңелерәк. Армия хеҙмәтендә сынығыу үтеү - боронғо традиция, ул кешенең шәхесен физик һәм рухи яҡтан сыныҡтыра. Мин уны ир-егеттәрҙең ҡумаҡләп һунарға йөрөүе менән сағыштырыр инем: һунарҙа сая, ҡыйыу, йылғыр, тәүәккәл кешеләр уңышҡа өлгәшә.

Ир-егетмен тиһәң, физик һәм рухи яҡтан көслө булырға ынтылырға кәрәк. Иҡенсенән, яуаплылыҡ тойғоһо ныҡ үсешкән булыуы мөһим: үҙеңдең тормошоңда һәм эшеңдә, ғаиләң, балаларың, иптәштәрең, ғөмүмән, барса йәмғиәт алдында ирҙәрсә яуаплы булыу фарыз. Унан һуң, үҙ-үҙеңә ҙур ышаныс менән ҡарап, ҡыйын хәлдәрҙә ҡалған саҡта ла ҡуйған маҡсаттарыңдан ваз кисергә ярамай. Ир-егет күп һөнәр эйәһе булһа, хуплауға һәм маҡтауға лайыҡ.

**Бөгөнгө көндә һин медицина колледжында уҡыйһың. Һаман уҡыу, һаман студент... Атай-әсәйеңә ҡыйынлыҡ һалмайһыңмы?..**

- Юҡ, мин - тулыһынса үҙаллы кеше. Биш йыл инде үҙмәшғүл сифатында һалым органдарында теркәлгәнмен, тәржемәсе эшен алып барам, психолог консультациялары үткәрәм. Тәүҙә биш йыл тәржемәләр бюроһында эшләнем. Сит илгә сыҡҡан Рәсәй граждандарының, йә, киреһенсә, беҙгә килгән, бында йәшәгән, эшләгән, уҡыған сит ил кешеләренең документтарын тәржемә итә торғайныҡ. Милек алыш-биреше, башҡа мәсьәләләр буйынса килешеүҙәрҙе нотариаль раҫлағанда ҡатнаштыҡ, сит ил граждандары менән никах теркәлгәндә лә загста тәржемәсе булырға тура килде. Ошо уҡ эштәрҙе хәҙер ҙә алып барам. Үҙ ынғайыма булыу, иркле график миңә күберәк оҡшай. Үҙмәшғүл статусы төрлө проекттарҙа ҡатнашырға, ирекмәнлек менән шөғөлләнергә, көндөҙгө бүлектә колледжда уҡыу мөмкинлеген бирә. Даими клиенттарым бар, улар аша ишетеп башҡалар ҙа килә. Ғөмүмән, эшһеҙ ултырғаным юҡ.

**Хеҙмәт юлын уҡытыусы булып башлағанһың. Ни өсөн ул юлды артабан дауам итмәнең?**

- Йәшерен-батырыны юҡ, уҡытыусы һөнәренең аҡсаһы бик-бик тә аҙ. Дәрес үткәрәһең, шунан баш ҡалҡытмай документтар менән ултыраһың. Бер үк нәмәне электрон һәм ҡағыҙ варианттарҙа тултыраһың, шуныһы бигерәк тә күңелде ҡыра ине. 2015 йылда мәктәптән бөтөнләй киттем. Хәҙерге эшем ике-өс тапҡырға юғарыраҡ баһалана.

**Сәғит, һин бик әүҙем ирекмәнһең дә: дүрт мәртәбә Луганск Халыҡ Республикаһына барып, икешәр аҙна хәрби госпиталдәрҙә МХО-ла яраланған яугирҙарҙы дауалағанда ярҙам итешкәнһең...**

- Беренсе тапҡыр ирекмәндәр төркөмө менән госпиталдә 2024 йылдың августында булдым. Мине бер кем дә көсләп йә өгөтләп алып китмәне унда. Үҙ иркем, үҙ теләгем менән барам хәрби госпиталдәргә ярҙамға. Махсус хәрби операция зонаһында булған кешенең тормошҡа ҡарашы бөтөнләй үҙгәрә. Ундағы һәм бындағы ысынбарлыҡ - ике төрлө донъя. Һинең ярҙамың, медицина йәһәтенәнме, психологик яҡтанмы баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә унда. Табиптар, шәфҡәт туташтары, санитарҙар, яралылар менән ябай һөйләшеү ҙә уларға дарыңа ҡарата күберәк яҡшылыҡ эшләргә, изгелеклө ғәмәлдәр ҡылырға тырышыу мөһим. Шунда ғына шәхес гармония кисерә.

**Бөгөнгө башҡорт йәштәре ниндәй булырға тейеш һиненң ҡуҙлектән?**

- Хәҙерге заманда ҡала башҡортона төрлө өлкәләрҙә белемле булыу мөһим. Беҙ тиҙ үҙгәреүсән мөхиттә көн итәбеҙ. Мәҫәлән, яһалма интеллект йәшәйештең барса өлкәләрендә лә көс, ынтылыш бирә. Һалдаттарҙың яраһын бәйләргә лә, уларҙы МРТ, рентген кабинеттарына алып барырға ла, ашатырға ла, йыуындырырға ла, тышҡа сығарып йөрөтөргә лә кешеләр кәрәк. Бигерәк тә ир көсө етешмәй. Шуға ла ирекмәндәрҙең ярҙамы МХО тылында бик мөһим.

**Психолог булараҡ, шәхестең ниндәй сифаттарын өҫтөнлөклө тип һанайһың?**

- Минеңсә, кешенең иң мөһим сифаттарының тәүгеһе - тыйнаҡлыҡ. Был осраҡта нимәне күҙ уңында тотам һуң? Иң элек яҙмышың менән риза булырға кәрәк. Ниндәй генә хәлдәр килеп сыҡҡанда ла. Рәхмәтле була белеүҙе икенсе урынға ҡуям. Яңы таңды ҡаршылайһың икән - башың эшләй, тәнең һыҙламай икән - рәхмәтле бул. Ейғән ризығың өсөн рәхмәтле бул. Өсөнсөһө - яҡшылыҡ, изгелек. "Урал батыр" эпосын алһаҡ, унда: "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, Кеше булһын затығыҙ..." - тиелә. Әлбиттә, был тормоштағы негативты күрмәҫкә тырышыу түгел. Насарлыҡты ла күрергә, уға мөнәсәбәтеңде белдерергә, хатта нәфрәтләнергә лә кәрәк. Кеше төрлө була ала, эмоция ул - тәбиғи күренеш. Ләкин башҡаларға ҡарата, бигерәк тә яҡын кешеләрҙе алмаштыра башлаясаҡ, шуға күрә хеҙмәттә конкурентлыҡ көсәйә барасаҡ. Тимәк, кешегә бер юлы бер нисә һөнәргә эйә булыу файҙалы буласаҡ. Боронғолар ҙа: "Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ", - тигәндәр бит.

Икенсенән, күп теллелек - киләсәк талабы. Сит телдәрҙе ни тиклем күберәк беләһең - киләсәккә юлдарың шул тиклем асыҡ буласаҡ. Сит илдәргә сығып, ваҡытлыса булһа ла эшләп ҡайтыу башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтен, йәшәү рәүешен яҡындан тороп аңлау, уларҙың ыңғай яҡтарын үҙ тормошоңда ҡулланыу мөмкинлеген бирә. Туған телеңде белеү мотлаҡ, сөнки теленән яҙһаң, этномәҙәни кодыңды ла юғалтасаҡһың. Быңың өсөн барса мөмкинлектәр бар: мәктәптәр, уҡыу әсбаптары, интернет селтәрҙәре, электрон программалар. Теләһә ниндәй йәштә лә туған телеңде үҙаллы өйрәнеп була, тик теләк кенә булһын.

Өсөнсөнән, ҡала мөхитендә йәшәгәндә кеше йыш ҡына төрлө ҡыйын хәлдәргә тарый, стресс кисерә, шәхес-ара конфликтлы хәлдәр ҙә булып тора. Шуға күрә үҙ-үҙеңде танып белергә, хис-кисерештәрең, мөнәсәбәттәрең менән һөҙөмтәле идара итергә өйрәнергә лә кәрәк. Ә быңың өсөн психологик яҡтан да белемле булыу фарыз.

Бөйөк мәғрифәтсебеҙ Мифтахетдин Аҡмулланың саҡырыуы, ораны бөгөн дә актуаль: "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!"

**Әңгәмәбеҙҙе йомғаҡлап, шундай һорау бирәйем: киләсәккә ниндәй пландар менән йәшәйһең?**

- Психологтар, кеше үҙенә бер йылға, биш йылға план ҡорорға тейеш, ти. Элек ошо принципты тота инем. Ике йыл тирәһелер, аныҡ маҡсаттар ҡуймайынса, тыуған һәр көндөң, тотош донъяның матурлығын, хозурлығын тойоп, ҡыуанып, шөкөр итеп йәшәйем. Русса әйткәндә, просто живу. Ял көндәрендә оҙатыусы-гид сүрәтендә дуҫтарымды тауҙарға бер көнлөк походтарға алып сығам, башҡа мауығыуҙарым да бар. Нишләп өйләнмәйһең, тип йыш һорайҙар. Был турала әле уйлағаным юҡ. Ғәҙәттә, демографик бурысты минең өсөн ағаларым арттырып үтәгән, тип шаяртам да ҡуям. Ысынлап та, уларҙың икәүһенән туғыҙ туғаным бар.



*Ир-егетмен тиһәң, физик һәм рухи яҡтан көслө булырға ынтылырға кәрәк. Иҡенсенән, яуаплылыҡ тойғоһо ныҡ үсешкән булыуы мөһим: үҙеңдең тормошоңда һәм эшеңдә, ғаиләң, балаларың, иптәштәрең, ғөмүмән, барса йәмғиәт алдында ирҙәрсә яуаплы булыу фарыз. Унан һуң, үҙ-үҙеңә ҙур ышаныс менән ҡарап, ҡыйын хәлдәрҙә ҡалған саҡта ла ҡуйған маҡсаттарыңдан ваз кисергә ярамай. Ир-егет күп һөнәр эйәһе булһа, хуплауға һәм маҡтауға лайыҡ.*

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ҡала башҡорто Сәғит Бәҙретдинов миҫалында, йәш быуын белемгә, күңеле яткан һөнәргә, шөғөлгә ынтыла, тип әйтә алабыҙ. Рухи-әхләҡи ҡиммәттәрҙе өҫтөн ҡуялар, шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең нимәгәләр бәйле булыуын теләмәйҙәр. Бәлки, шуғалыр, йәштәр ғаилә ҡороу мәсьәләһен кисектерә килә һәм, аҙаҡ килеп, күптәре яңғыҙ ҡала, үҙ нәҫеле сылбырын өҙә. Был иһә, кеше үҙенә йөкмәтелгән төп бурыстарҙың береһенән тайпыла, ғүмерен заяға үткәрә, тигән һүҙ. Сәғиткә тиҙерәк өйләнергә һәм атай бәхетен татырға яҙһын, тип теләйбеҙ.**

Рәсүл БАЙҒИЛДИН
әңгәмә ҡорҙо.

*✓ Башҡа тарихсыларҙан айырмалы рәүештә, минең мәғлүмәттәр, видео-фотолар шкафта туҙанда ятмай. Аллаға шөкөр, улар балалар - тыңлаусы аудитория, музейға килеүселәр өсөн эшләй.*



**Тыуған еребеҙҙә, республикабыҙҙа, илебеҙҙә генә түгел, хатта донъя кимәлендәге мөһим тарихи сараларҙа танылыу алған Айҙар Мәжитовты белмәгән кеше юҡтыр. Мәргән уксы ла, ҡурайсы ла булған яҡташыбыҙҙың тарихты иҫ китмәле кимәлдә белеүенә хайран ҡалаһың. Уның башҡорттар, уларҙың үткән данлы юлы, ҡоралы, йәшәйеше тураһында һөйләүен һәм башҡа ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәрен сәғәттәр буйы ялҡмайынса тыңларға мөмкин. Ғүмер үҙенә ике "бишле" һуҡҡан арҙаҡлы яҡташыбыҙ, Темәс тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы мөдире, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, танылған тарихсы-реконструктор, Баймаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы Айҙар Рәйес улы МӘЖИТОВтың һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ.**

# ДОНЬЯҒА БАШҠОРТ ИТЕП ЯРАЛТҠАН

## Аллаһ Тәғәләгә шуға рәхмәтлемен...



### Ни өсөн тыуған көнө ике тапҡыр билдәләнә

Мин был донъяға ете айлыҡ булып тыуғанмын. Ауырлығым бер килограмм өс йөҙ грамм ғына булған. Шуға күрә әсәйем мейес сиңгенә һалып булған да, ваҡыт-ваҡыты менән йүргәкте асып ҡарап, тын алышымды тикшергән. "Иларға ла хәлең юҡ ине", - тип әйтә ине. Фельдшер Мәрйәм инәй: "Ҡуй, Ҡунаҡбикә, баланы яҙҙырып торма, йәшәмәҫ ул", - тип әйткәс, тыуыу тураһында документ алып тормағандар. Шулай итеп, ай ярым ваҡыт үтеп киткән. Унан атай түҙмәгән, 16 мартта ауыл советына барып, метрика алырға ҡарар иткән. Был дата - икенсе тыуған көнөм. Мәрйәм инәйгә ҙур рәхмәт инде, аяҡҡа баҫтырған. Дүрт йәш тулғас, ныҡлап атлап киткәнмен, ләкин телем бик иртә асылған.

Балаға исем ҡушыу - һәр ғаилә өсөн мөһим ваҡиға. Шуға миңә исем ҡушырға барыһы ла йыйылған. Исмәғил олатай (колхозды ойоштороусы, уның беренсе рәйесе) Юлмөхәмәт тип ҡушабыҙ тигән. Сафия өләсәй уға ҡаршы төшкән: "Юҡ, Юлмөхәмәт ат ҡарағы, юлбаҫар булды. Уланыбыҙ Айҙар буласаҡ", - тигән. Ун өс бала тапҡан Геройәсә һүҙе атайым өсөн закон булған инде. Шулай итеп, исемем Айҙар булып киткән.

Хәҙер уйлайым да, Юлмөхәмәт исеме минең булмышымды билдәләгән кеүек. Юҡ, ат урлағаным, юл баҫҡаным булманы, әммә гел юлдамын, мендәрсә саҡрым үтеп, Балтиканан алып Беринг боғаҙына тиклем, күп кенә Европа илдәрен күрергә насип булды. Поляр төнөрәктә үтеп, Чукоткала балалар уҡытып та ҡайттым бит әле мин.

### Нисек тарихсы булып киткән?

Кешенең үҙенә ғүмерлек һөнәр һайлауы, бала саҡ хыялы булып, маҡсатлы башҡарылһа ла, айырым бер осраҡтарҙа көтөлмәгән ваҡиға ла хәл итә икән быны...

Сибай педагогия училищеһын тамамлағас, хәрби хеҙмәтте бай тарихлы боронғо рус ҡалаһы Серпуховта башланды. Чехов ҡалаһында сержант-кесе командирҙар курсын тамамлап ҡайтҡас, хәрби частың дөйөм комсомол йыйылышында комсомол секретаре итеп тәғәйенләнеләр. Август айы аҙағында, частың сәйәси бүлек етәксеһе майор Достоевский Бородино яланмузейына экскурсияға барыу өсөн алдынғы 20 комсомолецтың исемлеген төҙөргә бойорҙо. Бородино ялан-музейы менән танышыу минең буласаҡ һөнәремде билдәләне лә инде. Музей хеҙмәткәре Бородино алышы тураһында һөйләгәндә айырым бер хөрмәт менән атаман Платов етксәлегендә дон казактары һәм башҡорт яугирҙарының фланга һөжүмен телгә алды. Минең күҙҙәрем янып торғандыр инде, экскурсоводтың: "Арағыҙҙа башҡорттар бармы?"- тигән һорауына ниндәй ғорурлыҡ менән ҡул күтәреүемде күрһәгеҙ ине!

Бәлки, ошо минутта мин тарихсы булырға ҡарар иткәнмендер, тип уйлайым. Хеҙмәтем ахырында часть командиры полковник Лось Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына уҡырға йүнәлтмә тапшырҙы һәм лайыҡлы тарихсы булырға өндәмә бирҙе - был хәлдәр һаман да күҙ алдымда тора.

### Тарихсы-тергеҙеүсе лә ул

2012 йылдың бесән осоронда йәшенләп яуып киткән ямғыр ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа ял бирҙе. Мин трактор кабинаһында ятҡан "Ватандаш" журналының яңы һанын ҡулыма алдым. Журналдағы И. Шәйәхмәтовтың "И один в поле воин" мәҡәләһе мине тетрәндерҙе. Сөнки автор ниндәй матди ҡыйынлыҡтар аша Бородино алышы реконструкцияһына яңғыҙы ғына барыуы тураһында бәйән итә ине. Ни өсөн башҡорт егеттәре был изге эштә аҙ ҡатнаша, ни өсөн мин был эштән ситтә тороп ҡалам һуң, тигән уй шулай уҡ ҡасандыр булған Бородино яланына саҡырғандай тойолдо. Илдар Шәйәхмәтовтың телефонын табырға һәм бәйләнешкә сығырға Ҡаратал ауылынан Байғотлин Айбулат ярҙам итте. Бергәләп әҙерләнеп, Бородино алышына юлландыҡ. Шулай итеп мин "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы ағзаһы булып киттем. Данлыҡлы олатайҙар юлынан Бородинонан Парижғаса юл үтергә, Сена йылғаһы буйында ҡурай уйнарға насип булды...

Ошо сараларҙа ҡатнашыу тарихыбыҙҙа билдәле булмаған фактар аса - иҫең китерлек. Башҡа тарихсыларҙан айырмалы рәүештә, минең мәғлүмәттәр, видео-фотолар шкафта туҙанда ятмай. Аллаға шөкөр, улар балалар - тыңлаусы аудитория, музейға килеүселәр өсөн эшләй, төрлө фәнни эҙләнеү эштәрендә, конференция-форумдарҙа, радио-телевидениела күрһәтелә, яңғыратыла.

### Ни өсөн "Месье Баймаҡ"?

Һәр реконструктор-тергеҙеүсенең үҙ ҡушаматы бар. Илдар Шәйәхмәтов - Түрә, Азат Ҡужин - Ҡартатай, Рафаэль - Амантай, Юлай Ғәлиуллин - Мәргән һ.б. Минең ҡушаматым да осраҡлы ҡушылды. Беҙҙә, баймаҡтарҙы, башҡа район кешеләре: "Улар бит баймаҡтар! Күкрәктәре күм-күк", - тип көнләшеп тә, һоҡланып та бер була! Тарихи тергеҙеү "алышында" һәр ғәскәр айырым лагер-йәйләү булып тора. 2012 йылда, Бородиноға республиканан, тарихсытергеҙеүселәрҙән тыш, ҙур делегация барҙы: журналистар, БСТ телевидениеһы һ.б. Журналист Мөнир Ҡунафин кисен хәл белергә килә лә, урелгән тал ситән аша, шаяртып, киң таралған лаҡап "Баймаҡлар бармы?" тип, Колоч йылғаһы буйын яңғыратып һөрәнләп шаярта. Ә беҙҙең йәйләүгә урыҫса ватаемерә һөйләшкән француз Бернард Сизмак ҡунаҡҡа килергә әүәҫләнеп алғайны. Бер ваҡыт француз тыныс йөкө теләп ҡайтырға булды, минең сират еткәс, ҡулымды ҡыҫып, "Доброй ночи, месье Баймак!" тимәһенме! Егеттәргә ней, етә ҡалды. Шулай итеп, "Месье Баймак" минең ҡушаматыма әүерелде .

### Тарих уҡытыусыһы ниндәй ул?

Тарих уҡытыусыһы өсөн үткән тарихты белеү генә түгел, ә заман менән бергә атлау мөһим. Эйе, башҡа предмет уҡытыусылары, мәҫәлән, ҡасандыр йөҙ йыл элек асылған теорема, ҡағиҙә, ҡабатлау таблицаһын йылда уҡыусыларға тырыша-тырыша өйрәтә. Ә тарих уҡытыусыһы яңынан-яңы асыштар, архив сығанаҡтары, документтар менән танышырға, ер-һыу атамаларын, шәжәрә ептәрен ныҡлы белергә тейеш. Сөнки тарихты бер ҡалыпҡа һалып өйрәнеп булмай, уҡыусы дәрестә төрлө һорау бирерлек бар. Ни эшләп мин тарихты уҡыусыларға беҙҙең хөрмәтле ғалим-профессорҙар яҙған китаптарҙан ғына уҡытам, нишләп мин тарих эсендә йәшәмәйем, тигән уй мине тарихи тергеҙеү (реконструкция) донъяһына килтерҙе лә инде. Тарихи реконструкцияның алтын ҡағиҙәһе - реаль ысынбарлыҡты күрһәтеү. Бында ниндәйҙер авторлыҡ-үҙешмәкәрлек юҡ! Тарихи мундир ялтор-ыялтыр концерт-сәхнә кейеменән ары тора, "яу яланында"ла, мин - башҡорт, бөтәһен дә еңәм, тигән сәм ҡабул ителмәй. Әгәр ата-бабаң яу яланынан сигенгән икән, һин дә сигенәһең - тарих боҙоп күрһәтелергә тейеш түгел!

Европа илдәре: Германия, Франция, Австрия, Чехия, Словакия, Польша сиктәрендә үткәрелгән Наполеон дәүере алыштарынан тыш, яҡташыбыҙ Алдар батыр эҙҙәренән Азов походында, ике тапҡыр Балтика диңгеҙе буйы - Ете йыллыҡ һуғыштың Гросс-Егерсдорф алышында, Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында яҡташыбыҙ Шакирйән Мөхәмәтйәновтың (Александр Матросов) батырлығына арналған реконструкцияларҙа ҡатнашырға тура килде.

### Иң иҫтә ҡалған ваҡиға

2015 йылдың май айында Париж ҡалаһының Гринель урамында урынлашҡан д'Эстрэ һарайында, Рәсәй Федерацияһының Францияләғы илселеге резеденцияһында, посол Александр Орлов Рәсәй реконструкторҙарын тантаналы ҡабул итеү ойоштороҙо. Париж Православие Сиркәүе башлығы хәтер молебнын ойоштороҙо. Сиркәү хоры орган музыкаһы оҙатыуында боронғо "Коль славен" гимнын йырлап ебәргәс, минең тәндәрем зымбырҙап китте. Тиҙ генә итек ҡуныҫында йөрөткән түбәтәйемде кейеп алып, әсәйем өйрәткән "Ихлас", "Фатиха" сүрәләрен ҡабат-ҡабат уҡыным. Был тантанала мин берҙән-бер башҡорт-мосолман инем, уҡыған доғаларым ҡабул булғандыр, тип уйлайым, сөнки миңә тиклем доға уҡыусылар булдымы икән, белмәйем.

А. Орлов һәр клуб реконструкторҙары менән таныштым, үҙем һәм "Төньяҡ амурҙары" клубы менән таныштырғас, алыҫ ата-бабаларымдың тап ошо ерҙә 200 йыл элек йөрөүҙәрен, ҡурай уйнауҙарын һөйләп, "Любизар" көйөн уйнап, илсегә ҡурай бүләк иттем. Тап ошо минуттарҙа мин үҙемдең тарихи миссиямды аңланым һәм Аллаһ Тәғәләгә мине был яҡты донъяға башҡорт итеп яралтыуына рәхмәт уҡыным. Әгәр мин башҡорт булмаһам, берәй ваҡыт Парижда булыр инемме икән...

Күҙ алдына килтерегеҙ әле, ошо ваҡиғаларҙан бер аҙна элек мин сират буйынса ауыл көтөүен көтә инем, ә хәҙер Эйфель башняһында торам, атабабалар ат һуғарған Сена йылғаһында итек йыуам, Парижда ҡурай тартам... Париж, Наполеон музейы, Нотр дам де Пари, Эйфель башняһын күреү оноторлоҡ түгел!

### Музей - тормошоноң мөһим өлөшө

Өмөтбай мәктәбендә утыҙ йыллап тарих уҡытыусыһы булып эшләү, музей мөйөшө булдырырға тырышыу бит күп ҡомарткылар йыйыуға килтерҙе. Тик мәктәптә айырым бүлмәлә музей эшләү тәҡдиме ниңәлер яҡлау тапманы. Шуға күрә лә инде шәхси музейым барлыҡҡа килде. Әйткәндәй, хәҙер тап шәхси музей ҡомарткылары Темәс музейының Пушкин картаһы буйынса финанс планын үтәргә ярҙам итә, сөнки рәсми музейҙан кәрәкле экспонаттар сығарыу өсөн байтаҡ документтар тултырыу зарур. Тап ошо саҡта минең музей әйберҙәре ярҙамға килә лә инде. Тарихи ҡомарткыларҙы тергеҙеү, күсермәләрен эшләү, тегенеү эштәре аша

***✓ Арабыҙҙа ҡайһы бер кешеләр тота ла, "Башҡорт бөтә, телебеҙ-тарихыбыҙ юғала", тип һөрәнләй. Уларға яуабым шул: әгәр ҙә һине европалылар ҙа ҡабатлай, өйрәнә, күтәрмәләй, белә икән - тимәк, был халыҡ үлемһеҙ!***

1812, 1918, 1941-1945 йылдарҙағы башҡорт яугирының уставҡа ярашлы тулы формаларын булдырыуға килтерҙе. Мәктәптә эшләү дәүерендә уҡыусыларымдың фәнни-эҙләнеү буйынса республика, Рәсәй конкурстарында енеүсе-призер булыуҙары, музей экспонаттары конкурсында ла призлы урындар алыуы - бер көнлөк эш һөҙөмтәһе түгел инде.

### Темәс музейында ремонт-реставрация эштәре тураһында

2022 йылдың май айында ремонт-реставрация эштәре башланғас та, музейҙың эш йүнәлешен үҙгәртеү ниәте барлыҡҡа килде. Уйлап ҡарағыҙ, Темәс ауылына көньяҡтан ингәндә "Темәс - Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһы", тигән арка ҡаршылай, ә Темәс ауылында был тарихты ҡайҙа күрергә мөмкин ине һуң?

Эйе, элекке музейҙа бер генә зал булды. 1919 йылдың 18 февралендә Башревкомдың Совет власы яғына сығыу тураһындағы 70-се һанлы бойороҡҡа ҡул ҡуйыу мәлен манекен һындары аша күрергә мөмкин ине. Миҫал өсөн, тыуған яҡты өйрәнеү музейҙары республикабыҙҙың һәр районында уңышлы эшләп килә, тиһәк, бер ҙә хата булмаҫ. Тик һәр районды Темәсе юҡ бит, шуға күрә лә музейҙы тағы ла тулыландырыу идеяһын күтәреп сыҡтым. Был ниәтте БР Милли музей директоры Рөстәм Исхаков хупланы һәм фәнни концепцияны Фәнни совет ултырышына сығарҙы, артабан ул Мәҙәниәт министрлығы һәм БР Хөкүмәте тарафынан хупланды. Әлеге мәлдә ошо юҫыҡта экспозиция, ремонт-реставрация эштәре дауам итә.

Темәс тарихы бронза быуатынан башлана. Темәс ҡурғандарын асыҡлағанда археологик ҡаҙыныуҙарҙа ҡатнаштым. Шулай уҡ, ауылдың 21 тарихи объектына белешмә төҙөнөм һәм Темәс ауылы БР Хөкүмәтенең 2020 йылдың 30 декабрендәге ҡарары менән "Тарихи биләмә" дәрәжәһенә лайыҡ булды.

"Үлемһеҙ полк" Бөтә Рәсәй акцияһы сиктәрендә, 112-се Башкавдивизия составында алышҡан Темәс ауылынан 8 кавалерист хөрмәтенә "Үлемһеҙ кавалерия" ат парадын ойоштороуҙы традицияға әйләндереү - маҡсатлы башҡарылған ҙур эш. Кавалерия парадын ойоштороу ауыр эш, әлбиттә. Аттар, һыбайлылар табыуҙа ярҙам иткән Темәстең йылҡысы ир-егеттәре Б. Ҡотлоғәләмов, В. Байгужин, И. Ситдиҡовтарға рәхмәт. Парад өсөн Илшат Хәмит улы Ситдиҡов йыл да 5-6 баш ат бирә, үҙе лә парадта ҡатнаша.

### Уңыштар һәм көйөнөстәр

Әлбиттә, дөйөм эшемдең һөҙөмтәһе - "Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы" статусына лайыҡ булыу, "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында енеү. Шулай ҙа был уңыштар - оҙайлы йылдарҙың эш күрһәткесе

Һүҙ юҡ, етешһеҙлектәрем дә бар. Ул да булһа, беренсеһе, район тыуған яҡты өйрәнеүселәр клубы эшен йәнләндерә алмауым. Икенсенән, Темәс ауылы энциклопедияһын баҫтырыу өсөн грант ота алмауым. Өсөнсөһө инде, Өмөтбай ауылы тарихы тураһында "Өмөтбай йәдкәре" атамалы китабымды баҫтырырға баҙнат итә алмауым. Был эштәр алдағы йылдарға маҡсаттарым булып ҡала.

### Милли кейем ылыҡтыра

Милли, бигерәк тә тарихи кейем һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә буласаҡ, сөнки был - тарих сағылышы. Шуға күрә беҙ, тарихсылар, һәр ваҡыт эҙләнергә, тикшерергә тейешбеҙ. Был һүҙгә бер миҫал: Аустерлиц алышы (Чехия) башланыр алдынан батале уҙәсәк яланға килдем. Тик минең өбраз берәүҙә лә тип әйтерлек ҡыҙыҡһыныу уятмай, фото төшөргә теләүселәр бөтөнләй юҡ. Аптыраҡ... Баҡтиһән, Брно (Аустерлиц) ҡалаһында башҡорт яугирҙары клубы бар икән, чех ир-егеттәре башҡорт булып кейенеп, һәр сарала ҡатнаша, балаларҙы уҡ атырға өйрәтә, тарих һөйләй.

Башҡорт клубын ойоштороусы Фредтың яурынында ике рәт тимер сынйыр тегелеүен күреп аптырағаным. Минең һорауыма Фред: "Был тимер сынйырҙар яурынды ҡылыстан һаҡлай - башҡорт яугирының кейем элементы", - тип иҫемдә ҡалтерҙе. Быңа бит, чех был турала белә, ә беҙ онотҡанбыҙ. Бәлки, был сынйыр элементы артабан погон булып, ғәскәр төрөн айырыу билдәһе булып киткәндер, тип фаразлайым. Ысынлап та, ошо сараларҙа төрлө хуплау-комплимент ишетергә тура килә, ләкин иң иҫтә ҡалғаны - тоҡомло (пародистый) башҡорт тип әйтеүҙәре...

Арабыҙҙа ҡайһы бер кешеләр тота ла, "Башҡорт бөтә, телебеҙ-тарихыбыҙ юғала", тип һөрәнләй. Уларға яуабым шул: әгәр ҙә һине европалылар ҙа ҡабатлай, өйрәнә, күтәрмәләй, белә икән - тимәк, был халыҡ үлемһеҙ!

### Ғаиләһе, яратҡан шөғөлдәре

Ҡатыным Сөмбөл - бар яҡтан да миңә ныҡлы терәк-таяныс. Әгәр ул минең шөғөлөмдө аңлап ҡабул итмәһә, мин күп асыштарыма барып етә алмаған булыр инем. Беҙ яңы өй һалып сыҡҡансы, атай-әсәйем менән йәшәнек. Сөмбөл минең ауырыу атайымды ҡарашты. Бының өсөн мин уға бигерәк тә рәхмәтлемен. Сөнки һәр кемдең ҡулынан килмәй был эш. Ике ҡыҙыбыҙ бар. Раушания мәктәпте - алтын миҙалға, унан медицина университетын ҡыҙыл дипломға тамамланы. Хәҙер дарыуханала эшләй. Бәләкәй ҡыҙыбыҙ Гөлсөм Сибай медицина колледжын тамамланы. Өфөлә онкология үҙәгендә эшләй.

Буш ваҡытымда уҡырға яратам һәм тарихи эҙләнеүҙәремде дауам итәм. Үҙемдә хәрби тарихсы тип һанайым һәм ҡоралдарҙың тарихын өйрәнәм. Икенсе яратҡан шөғөлөм: көҙгөһөн һыу таҙарғас, сыраҡҡа йөрөйөм. Балыҡ булһа ла, булмаһа ла, йылға буйлап йөрөп сығыу - минең өсөн ҙур кинәнес. Мин үҙем Һыуғояр бит, шуға күрә һыу - яратҡан стихиям. Ҡайным әйтә торғайны: "Балыҡсының балыҡ тотҡан ваҡыты ғүмер китабына яҙылмай", - тип. Һыу бит кешене тынысландыра, яман уйҙарҙан арындыра.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мин үҙемдә тейешле һәм кәрәкле заманда донъяға килгәнмен тип һанайым. Әйтеп үтеүемсә, нәк данлыҡлы, батыр, рухлы, аҡыллы башҡорт милләтенән булыуым менән бәхетлемен. Ата-бабаларыбыҙҙың тарихи үткән юлын тергеҙеүем, уны тотош донъяға таныта алыуым - Аллаһ Тәғәләнең мине ошо заманға ебәреп, бойорған эшелер...**

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

ЯУГИР ҘА УЛАР!

# ҺӘР АУЫЛДА БАР ҠЫЙЫУҘАР

**Хәйбулла районының Вәлит ауылынан Махсус хәрби операцияла ете ир-егет ҡатнаша. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар араһынан өлкән лейтенант Таһир Мортазин 2024 йылдың 1 февралендә батырҙарса һәләк була. Яуҙа күрһәткән ҡыйыулығы өсөн һәләк булғандан һуң ул "Ҡаһарманлыҡ" ордены менән наградланған.**

Ҡалған алты егет хеҙмәтен дауам итә. Дим Мортазин Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы" миҙалына лайыҡ. Бер туған Илгиз менән Фәнил Ҡыуатовтар ҙа, Денис Вәлитов та алғы һыҙыҡта бурыстарын намыҫ менән үтәй. Бер туған Айтуған менән Ғәлинур Әбсәләмовтар ҙа илебеҙ именлеген һаҡлап сафҡа баҫа.



Башҡа әсәләр һымаҡ, ике улын яу ҡырына оҙатҡан әсә, Фәнүзә Вәлиәхмәт ҡыҙы Әбсәләмова ла, был йылдар эсендә зарынтизар булып, "иҫән-һаумын" тигән хәбәрҙе көтөп йәшәй. Айтуған улы әлеге мәлдә, контракты тамамланып, тыуған яғына ҡайтҡан, үҙ эшен асыу менән мәшғүл. Ә Ғәлинур хеҙмәтен дауам итә.

Фәнүзә Вәлиәхмәт ҡыҙы һөйләүенсә, улдары төрлө уҡыу йорттарында техник һөнәр үҙләштергән. Улар бала саҡтан спорт менән мауыға, ысын ир-егеттәр булып үҫә. Атайҙары менән ҡуша волейбол уйнайҙар, милли көрәштә алдынғы урындарҙы бер кемгә лә бирмәйҙәр. Айтуған йыр-бейеүгә лә оҫта, концерттарҙа ҡатнаша. Мәле еткәс, егеттәр Ватаны алдындағы бурыстарын үтәргә ашыға. Айтуған, 18 йәшендә һалдат шинеле кейеп, хәрби хеҙмәтен Чита ҡалаһында үтә. Унан ҡайтҡас, һөнәре буйынса тау сәнәғәте предприятиеһында эшләй. Татыр-Үҙәк ауылында йәшәй. Махсус хәрби операция башланғас та үҙ теләге менән ил һаҡсылары сафына баҫа. "Шах" ҡушаматы алған яугир Миңлегәле Шайморатов исемендәге батальон составында алғы һыҙыҡҡа юллана. Яуҙа күрһәткән батырлығы Генерал Шайморатов ордены, "Ҡыйыулыҡ өсөн" миҙалы менән баһаланған.

Икенсе улы Ғәлинур әрме сафын Тула ҡалаһында үтә һәм артабан яҙмышын армия менән бәйләй, ун ике йылдан ашыу Сыбарҡүл хәрби гарнизонында контракт буйынса хеҙмәт итә, гвардия өлкән лейтенант, мотоуҡсылар батальонының ҡорал буйынса командир урынбаҫары Сүриәлә лә булып ҡайта. Украинала барған Махсус хәрби операцияла ла баштан ҡатнаша. Хәрби наградалары бик күп.

Әйткәндәй, 2022 йылда ағалы-ҡустылы Әбсәләмовтар хәрби хеҙмәттәре ваҡытында Украина ерендә - Херсонда осраҡлы рәүештә осраша.

- Өлкән улым Айтуған яралылар ҙы госпиталгә алып килгән булған. Кесеһе иһә БМП-ларҙы ремонтҡа килтергән. Улар күрешкәс, видео бәйләнешкә сығып, күңел булғансы хәбәрләшәп алдыҡ, - тип ҡыуанысы мәлдәрен дә иҫләп алды батыр ир-егеттәр үҫтергән әсә. - Айтуғаным, ярай, иҫән-һау әйләнеп ҡайтты, Аллаһҡа шөкөр. Хәҙер инде Ғәлинур улымдың иҫәнлеге өсөн доғалар ҡылам, һирәк булһа ла хәбәрләшеп торабыҙ, үҙем шылтыратып йонсотмайым. Ҡайһы ваҡыт айлап һөйләшмәгән саҡтар була.

Эйе, әсәләр улдарын көтә, улар өсөн доғалар ҡыла, борсола, төндәрен йоҡламай сыға. "Бөгөн бар әсәләр ҙә минең кеүек хәлдә инде. Борсолоуҙарыбыҙҙы бергә-бергә аралашыу менән баҫабыҙ. Махсус хәрби операцияла йөрөгән барлыҡ ир-егеттәр именлеген, уларҙың иҫән-һау тыуған яҡҡа әйләнеп ҡайтыуын, тиҙерәк илдә тыныслыҡ урынлашыуын теләп, хәйер-саҙаҡалар биреп, ауыл халҡы йыйылып, мәсеттә доғалар ҡылып, ҡорбан салып, аяттар уҡытабыҙ", - ти Фәнүзә Вәлиәхмәт ҡыҙы.

Гөлдәр ҠАДАЕВА.

# ДАНЛЫ ҒАИЛӘ УЛЫ



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле ветераны Илшат Фәсхетдинов Махсус хәрби операция барышында һәләк булған.**

Фәсхетдинов Илшат Ридик улы 1972 йылдың 10 февралендә тыуған. Уның яҙмышы бәләкәйҙән үк сәнғәт менән бәйле. Башҡорт хореография училищеһында (хәҙер Рудольф Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжы) һөнәри белем алғас, Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле сафын тулыландыра, унда оҙаҡ йылдар талантлы балет артисы булып эшләй.

Илшат Фәсхетдинов Башҡортостандың сағыу артистар династияһын лайыҡлы дауам итте. Уның ата-әсәһе күп йылдар Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамблендә эшләне. Атаһы - Ридик Фәсхетдинов, БАССР-ҙың халыҡ артисы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, виртуоз баянсы ине. Әсәһе Эльза Ғәббәсова, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, үҙ ғүмерен бейеүгә бағышланы. Атаһының ҡустыһы - Әхәт Әхмәт улы Фәсхетдинов, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең солисы, ә һуңыраҡ директоры булды. Хәҙер ғаилә традицияһын Илшат Фәсхетдиновтың улы Рияз дауам итә, әлеге ваҡытта ул - Р.Нуриев исемендәге Башҡорт хореография колледжы студенты.

2024 йылдың сентябрендә Илшат Фәсхетдинов үҙ теләге менән Махсус хәрби операция биләмәһенә юллана. Хәрби бурыстарҙы үтәү барышында ул фажиғәле һәләк була, оҙаҡ ваҡыт хәбәрһеҙ юғалған тип иҫәпләнә.

ИНТЕРНЕТТАН



# ИРТӘНГЕ АШТЫ АШАРҒА ИКӘН

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, музыканттарҙың хәтере башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Ғалимдар үткәргән һынауҙарҙа 14 музыкант һәм музыкаға бер ҡыҫылышы ла булмаған 15 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла картиналар йәки һүҙҙәр йыйылмаһы тәҡдим ителгән. Шул уҡ минутта улар әле генә күргән һүрәттәрен йәки һүҙҙәрҙе икенсе өйөмдә ятҡан картиналар араһынан һайлап алырға тейеш булған. Музыканттар ике осраҡта ла эште тиҙерәк башҡарған һәм һирәгерәк яңылышҡан. Музыкант һөнәрен һайлаусыларҙың хәтере ни өсөн нығыраҡ үсешеүен ғалимдар аңлата алмай. Һәр хәлдә, ниндәйҙер музыка ҡоралында уйнау, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу кешенең аҡыл ҡеүәһен үҫтерә, был тикшеренеүҙәр ошону дәлилләй.

■ Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын ғалимдар ҙа тикшереп ҡараған. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоктан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә. Аҡ сәскәнең файҙалы сифаттары ысынлап та бик уникаль, сәскәнең бай химик составы уны төрлөсә ҡулланырға мөмкинлек бирә, ти ғалимдар. Уны юҡҡа ғына халыҡ дауаһында ҡулланмайҙар. Аҡ сәскә сәйе, мәҫәлән, үт ҡыуыуы менән ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй. Шулай уҡ тын юлдары инфекциялар мәлендә ул бик файҙалы. Аҡ сәскә сәйен шәкәрһеҙ эсәләр.

■ Ғалимдарҙың туҡланыу өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, күптәр иртәнге ашты ашамай. Тикшеренеүҙәр раҫлауынса, оҙайлы ваҡытҡа иртәнге аштан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Билдәләнеүенсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итеп кенә ҡалмай, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота һәм шуға ла йөрәк сирҙәре һәм диабеттың үҫешенә юл ҡуймай. Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сәләмәт булыу өсөн иртәнге аштың әһәмиәте бик ҙур. Ғалимдар фекеренсә, ата-әсәләр балаларына яҡшы миҫал күрһәтергә һәм көндә файҙалы аҙыҡтан башларға тейеш.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Тикшеренеүселәр һанап сығарыуынса, ҡала халҡы йыл һайын уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла, мәҫәлән, бысраҡ һауа һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Билдәле булыуынса, машиналар РМ10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә үтеп китә. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр.

МӨҒЖИЗӘЛЕ ҒӘМӘЛ

# ГИПНОЗ: ФАНТАЗИЯМЫ, ӘЛЛӘ ЫСЫНБАРЛЫҠМЫ?



## Тарихи мәғлүмәттәрҙе лә сағылдырамы?

Бер башҡорт егетенең нисек итеп монгол ғәскәрҙәре сафында һуғышта йөрөүе хаҡында һөйләүе лә тамам аптыраткайны. "Һин был донъяға хәҙерге тәнеңдә килгәнсе берәй ваҡыт йәшәнеңме, ошо хаҡта мейеңдә мәғлүмәт бармы?" - тип һорағас, ул бына ниҙәр хаҡында бәйән итте. "Мин һуғышта йөрөйөм. Киев ҡалаһы янында алыш бара. Урыҫтар менән һуғышабыҙ, мин уксы яугирмын, ҙур йәйәнәм атам", - тине. Был егет йәйәүле уксы булған, йәйәнән нисек итеп тоҫҡап атыуын да күрһәтте. "Исемең нисек, ҡайҙанһың?" - тигән һорауға яуабы минең өсөн иҫ китмәле булып тойолдо: "Исемем Искәндәр, Башҡорт иленәнмен". Ошо Башҡорт илендә ологайған ата-әсәһе йәшәүе, әғаһының бер һуғышта һәләк булыуы хаҡында ла әйтте. "Был алышта кем еңәсәк?" тигән һорауға: "Урыҫ ғәскәрҙәре аҙ ҡалып бара, беҙ еңәсәкбеҙ", - тип яуапланы. Аптырағас, уның ошо алышта үләсәгеме, әллә иҫән ҡаласағымы тураһында ла белештем. Шундуҡ яуап ҡайтара алманы: "Яу барышын ҡарап бөтөрәйем әле", - тине лә, бер нисә минуттан һуң әйтә ҡуйҙы: "Бер һыбайлы урыҫ яугиры минең яныма уҡ сабып килеп етте лә, һөңгөһө менән һул яурынама ҡаҙаны, әммә мин уны барыбер атынан атып төшөрә алдым". Иҫегеҙгә төшөрәм, монгол ғәскәре Киев ҡалаһын 1240 йылда яулап ала. Сеанс аҙағында ошо Искәндәрҙең ғүмере нисек бөтәсәге хаҡында һорау биргәс, гипноз аҫтында барыһын да иҫәнә төшөрөүсе уның 6 йылдан һуң сираттағы бер яу барышында һәләк буласағы хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Сеанс бөткәс, мин әлеге студенттан башҡорт яугирҙарының монгол-татар ғәскәрҙәре составында һуғыштарҙа ҡатнашыуы хаҡында белеүбелмәүе, ошо хаҡта әҙәби әҫәрҙәр уҡығанмы, юҡмы икәнлеге хаҡында һораштым. Уның әйтеүенсә, ул был турала электән бер нәмә лә белмәгән икән.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдары башында пединститутың башланғыс кластар факультетында беҙҙең кафедрала биология фәне уҡытыусылары Светлана һәм Сергей Нехорошковтар эшләне. Светлананың үтенесе буйынса мин уның менән регрессив гипноз сеансын уҙғарҙым. Әмәлгә ҡалғандай, унан яҡты донъяға килгән мәлдә үҙен нисек тойоуы хаҡында ла һорау биргәйнем. "Айһай, шул саҡта минә бик насар булғайны. Һауа етмәне, бик ашағым килде", - тимәһенме! Баҡтиһәң, Светлана донъяға 7 айлыҡ ҡына бәпес булып тыуған, сөнки атаһы һәм әсәһе мотоциклда китеп барған саҡта аварияға осраған, әсәһе уны ваҡытынан алда тыуҙырырға мәжбүр булған икән. Күрәһең, авария һөҙөмтәһендә әле тыуып өлгөрмәгән бала организмына кендек ҡаны менән кислород һәм туҡлыҡлы матдәләр килеүе ныҡ кәмегән. Шуныһы ҡыҙыҡ: бала организмының ошо халәтте ҡалыуы уның мейеһендә "яҙылып, теркәлеп" ҡалған. Светлана менән сеансты дауам иттем. Артабан бына шундай диалог килеп сыҡты:

- Әсә ҡарынына ингәнсе, һин бар инеңме?

- О-о-о, мин ерҙән бик алыҫта, күк төпкөлөндә осоп йөрөнөм. Унда шундай матур, шундай иҫ киткес ғәжәп донъя, быға һис бер ишетмәгән ниндәйҙер илаһи моң ағыла. Бынан башҡа бер ергә лә китәһе килмәй.

- Ул саҡта һин ҡош инеңме әллә?

- Юҡ, юҡ, мин - кеше!

- Йә, ярай. Светлана, мин һинән тағы ла бер нәмә тураһында һорайым әле. Һинең элегерәк ерҙә, кешеләр араһында йәшәгәнең булдымы? Ошо хаҡта мейеңдә ниндәйҙер мәғлүмәт бармы, әллә бер нимә лә юҡмы?

Светлана бер аҙға шымып ҡалды. Күрәһең, ундай мәғлүмәт уның өҫкө аңында тиҙ генә пәйҙә була алмай. Әммә, аҙмы-күпме ваҡыт үтеүгә, Светлана шатланып, хатта ҡысҡырыбыраҡ һөйләй башланы:

- Күрәм, балаларымды күрәм!

- Балаларыңдың исемдәрен әйт әле.

- Бына ҡыҙым Люба, уға 12 йәш, ә Ваняға 10 йәш тулды.

- Ә һин үҙең кем һуң, исемең нисек?

- Мин - Анна Павловская.

Мин шунан һуң Светланаға Аня тип өндәшә башлайым.

- Аня, һинең тағы кемдәрең бар?

- Ирем бар, Петр Павловский. Атайым - Иван Спивак, әсәйем - Софья Спивак.

- Ирең ҡайҙа эшләй?

- Юҡ, ул эшләмәй, хеҙмәт итә. Атайым да хәрби хеҙмәттә.

- Ә һин үҙең ниҙәр менән шөғөлләнәһең?

- Йортобоҙҙа хужалыҡ эштәре менән булышам, балаларымды ҡарайым.

- Уҡый-яҙа беләһенме?

- Юҡ, мәктәпкә йөрөмәнем, хәреф танымайым. Сиркәүҙә Библия китабын күргәнем бар, беҙ унда йәкшәмбе көндәрендә доға ҡылырға барабыҙ.

- Йәшәгән урыныңды нисек атала?

- Беҙ Александровское ауылында йәшәйбеҙ.

- Ул ҡайһы тирәлә? Ниндәй ҡалаға барғаның бар?

- Былтыр йәй көнө, ат арбаһына ултырып, Санкт-Петербургҡа барҙыҡ.

Светлана һөйләгәндәрҙе нисек аңлатып була? Күрәһең, Анна Павловская тигән ҡатын XIX быуатта Санкт-Петербургҡа яҡын булған бер ауылда йәшәгән. Ул осорҙа батшаның атлы ғәскәрҙәре империяның баш ҡалаһына яҡын булған ауылдарҙа урынлашҡан була: яҙҙан көҙгә тиклем ғәскәр аттарын яланға сығаралар, фураж әҙерләргә лә уңайлы. Әгәр ҙә ки Светлана яңынан ошо Александровское ауылы урынлашҡан ергә бара ҡалһа, ҡасандыр элекке тормошонда йәшәгән ауылды уның ландшафтына ҡарап булһа ла таныр ине. Әйткәндәй, әлеге көндә Нева йылғаһы буйындағы ошо боронғо ауыл юҡ, сөнки ул тора-бара Санкт-Петербург составына инеп киткән.

Санкт-Петербург менән бәйле тағы ла бер эпизод. Минең Татьяна исемле бер пациенткам, уны элекке тормошо заманына ҡайтарыу менән, ярһып-ашҡынып, хатта күҙҙәренән йәштәр атылып сығып, былай тип әйтә башланы:

- Ҡайтты, ҡайтты бит ҡәҙерлем, ул тере, тере!

- Әйт әле Таня, кем ҡайтты?

- Мин Таня түгел, мин - Василиса (ярһып үкһеүен һаман тыя алмай). Минең ирем Дмитрий ҡайтты. Ах, ах, уны һәләк булды тигән хәбәр алғайныҡ, дөрөҫ булмаған, Слава тебе Господи!

- Тыныслан, Василиса. Барыһы ла һәйбәт бит.

- Димам минең, Димам! Ниндәй шатлыҡ, тереһең бит! Яраларың да төҙәлер, балабыҙ хаҡына йәшәйек әле.

- Мине тыңла әле, Василиса. Был хәл Татьяна тыуғанға тиклем нисә йыл элегерәк булды?

Татьяна-Василиса бер аҙға тынып ҡалды, эстән генә иҫәпләй ине шикелле.

- Таня тыуғансы 88 йыл уҙасаҡ.

- Быны һин ҡайҙан беләһең?

- 6 айлыҡ улым аша беләм (борсола башлай). Ай, улым асыҡҡандыр инде, уны имеҙергә кәрәк.

- Ярай, ярай, өлгөрөрһөң. Әйт әле, һеҙ ҡайҙа йәшәйһегеҙ?

- Санкт-Петербургта. Беҙҙең өйөбөҙ бик ҙур, бер нисә бүлмәбеҙ бар.

- Һеҙ торған урам нисек атала?

- Большая... Большая... Иҫемә төшөрә алмайым.

- Улай булғас, тәҙрәгеҙҙән ҡарағыҙ әле, ниҙәр күренә?

- Ҡаршыла итек мастерскойы, арыраҡ кабак, унан иҫерек мужиктар сыҡҡанын күрәм.

Шуның менән сеанс тамамланды. Татьяна ситтән тороп уҡыу бүлегендә уҡый ине. Яҙғы сессия ваҡытында, сираттағы бер лекциянан һуң, мин унан: "Элекке тормошоңдағы ирең төшөнә кермәнеме?" - тип һораштым. Татьяна, бик ғәжәпләнеп, һорауға һорау менән яуап бирҙе: "Ә һеҙ ошо хаҡта ҡайҙан беләһегеҙ?" - ти. Мин быының мөмкин булыуын фараз итеүем хаҡында әйттем. "Әйе, бер төшөмдә үҙемде Санкт-Петербургтағы әлеге ҙур фатирыбыҙҙа икәнмен тип күрҙем. Бүлмәләр буйлап йөрөгәндә бер ишекте асһам, унда ирем яҙышып ултыра. Миңә асыуланыбыраҡ ҡарап ҡуйҙы, әммә бер һүҙ ҙә әйтмәне. Мин уға ҡамасаулағандырмын, күрәһең", - тип асыҡлыҡ индерҙе Таня.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

**(Дауамы. Башы 5-6-сы һандарҙа).**

***✓ Ерҙәге етешлек, хозур тормош һәм именлек бер ҡасан да мәңге дауам итмәй. Көтөлмәгән сәбәптәр арҡаһында байлыҡ тиҙ арала - ярлылыҡҡа, сәләмәтлек ауырыуға әйләнеүе ихтимал.***

*РАМАҘАН АЙЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!*

**Изге Рамаҙан айына аяҡ баҫтыҡ. Аллаһы Тәғәлә был изге Ҡөрьән Кәрим ебәрелгән айҙа үҙ ҡолдарына ҙур шәфҡәтлелек күрһәтә. Рамаҙан айында Йәннәт ҡапҡалары асыла, Йәһәннәм ҡапҡалары ябыла, мосолмандарҙы тура юлдан тайпылдыртмаһын өсөн шайтандар сылбырҙар менән бәйләнә. Хәҙистәрҙә: "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һуҙылыуын теләр ине", - тип әйтелә.**

# УРАҘА МӘКТӘБЕ ҮТКӘНДӘР...

## һәр һынауға әҙер була



Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең сәхәбәләренең береһе Рамаҙан айына мөнәсәбәттәре тураһында шулай тип һөйләгән: "Беҙ Рамаҙан башланғансы ярты йыл буйы Аллаһы Тәғәләгә, ошо изге айҙы ҡаршы алырға насип ит, тип доға ҡыла торғайныҡ. Рамаҙан үтеп киткәндән һуң ярты йыл буйы Аллаһтан ошо айҙа ҡылған ғибәҙәттәрҙе, яҡшы ғәмәлдәрҙе ҡабул итеүен һорайныҡ".

Аллаһы Тәғәлә нәфсене яралтҡандан һуң уны тәрбиәләү һәм рәхмәтле иттереү маҡсатында төрлө һынауҙарға дусар итә. Хоҙай нәфсенән: "Һин кем һәм мин кем?" - тип һорай. Нәфсе тәкәбберлеген еңә алмайынса: "Һин - һин, ә мин - мин", - тип яуап бирә, үҙен Аллаһы Тәғәлә менән бер тиң ҡуйырға тырыша. Шунан Аллаһы Тәғәлә уны асыҡтыра. Асыҡҡас ҡына нәфсе үҙенең кем икәнлеген танырға мәжбүр була: "Һин бар ғәләмдәр Хакимы, мин һинең ҡолоң", - тип яуаплай.

Кешелә ике башланғыс йәшәй. Беренсеһе изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәгән фәрештәләр башланғысы булһа, икенсеһе түбән хистәргә тартҡан хайуан башланғысы. Кешегә ошо ике башланғыс, ихтыяр, бер ни тиклем һайлау мөмкинлеге бирелеүе уны йә фәрештәләрҙән юғары изге зат итә, йә хайуандарҙан меҫкенерәк итеп, түбәнгә төшөрә. Нәфсегә һәм шәһүәткә ҡаршы торған, көн дауамында аҙыҡтан баш тартҡан, түбән теләктәрҙе ауыҙлыҡлай алған, ғәйбәттән телен һаҡлаған, ғәҙелһеҙлектән йыраҡ торған кеше фәрештә асылын ала, хатта фәрештәләрҙән дә юғарыраҡ күтәрелә.

Ураҙа тотоусының һәр сәғәте, һәр минуты, һәр секунды оло ҡиммәткә эйә. Сөнки ул Аллаһы Тәғәләне, Унының янына ҡайтасағын хәтергә төшөрә. Донъя ләззәттәренең ҡасан да булһа бөтөүен аңлай. Мәңгелек ҡиммәттәргә ынтыла башлай. Тәү ҡарауға, иртә тандан ҡара кискә тиклем ашамаған, эсмәгән кеше ыҙалана кеүек. Ысынында иһә, ураҙаның алдағы мәңгелек тормошта ҙур сауаптар килтерәсәге, Хаҡ Тәғәлә ризалығына өлгәшеүгә сәбәпсе буласағы тураһындағы изге уйҙар уның ғазаптарын юҡҡа сығара. Ураҙа тотоусы көнө буйы үҙенең Хакимы тураһында уйлай. Уйҙары Аллаһы Тәғәлә тураһында булғанға күрә, уның бар тормошо хаҡ юлда төҙөлә башлай. Ураҙалы кеше ифтар ваҡытында ике ҙур ләззәт ала. Беренсеһе - ауыҙ асҡандағы аҙыҡ менән килһә, икенсеһе мәңгелектә ураҙа тотоусы мөьминдәр өсөн генә әҙерләгән Аллаһы Тәғәләнең бүләге. Мөхәммәт бәйғәмбәр, ураҙа тотоусы өсөн ике шатлыҡлы мәл бар, тигән. Улар - ауыҙ асыу мәле һәм Аллаһы Тәғәлә менән осрашыу мәле.

Аллаһы Тәғәлә ерҙе төрлө-төрлө муллыҡтар менән тултырған һәм уларҙы ерҙәге урынбаҫары - кеше ҡарамағына тапшырған. Көн һайын беҙгә яңынан-яңы муллыҡтар ебәрелеп тора. Ләкин беҙ йыш ҡына ошо һанһыҙ байлыҡты ҡәҙерһеҙләп, беҙгә бирелгән ниғмәттәрҙең дә хужаһы бар икәнлеген бөтөнләй иҫкә алмай башлайбыҙ. Күптәр аслыҡ, мохтажлыҡ кисермәгәнгә күрә, Аллаһы Тәғәлә биргән ниғмәттәрҙе лайыҡлы рәүештә баһалай алмай. Ә ураҙа тотҡан кеше ауыҙ асыу мәленә ҡатҡан икмәктең дә Аллаһы Тәғәләнең оло ниғмәте икәнен аңлаясаҡ. Рамаҙан ваҡытында һәр кемгә Аллаһы Тәғәләгә ихлас рәхмәтен еткереү мөмкинлеге бирелә. Мөьмин: "Был ниғмәттәр баштан уҡ минеке булмаған, шуның өсөн мин уларға ябай аҙыҡҡа ҡараған кеүек ҡарарға тейеш түгелмен. Хаҡ Тәғәлә уларҙың хужаһы икән, Унының рөхсәте менән генә ҡулланырға хаҡлымын һәм рәхмәтемде белгертергә бурыслымын" - ти.

Бөтә ғүмерен ҡиммәтле һәм нәфис ниғмәттәр араһында үткәргән, асығыу һәм һыуға сарсау тигән тойғоларҙы белмәгән бай кешегә ураҙа фәҡирлек менән мохтажлыҡ "ләззәттәрен" татырға мөмкинлек бирә. Ошондай һынауҙарҙы үткән етеш тормоштағы кеше мохтаждарҙың хәлен аңларға өйрәнә, уңайы сыҡҡан һайын уларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырыша. Фәҡирҙәргә танау өҫтөнән ҡарауҙан алыҫлаша. Бай кешенең күңелен йомартлылыҡ, мәрхәмәтлелек тултырған һайын, үҙенән фәҡирерәк йәшәүселәргә ҡарата шәфҡәтлелек тойғоһо арта. Ярлылар иһә уға ла мөхәббәт һәм ихлас хөрмәт менән ҡарай башлай. Был төрлө халыҡ ҡатламдары араһында синыф-ара күрә алмаусанлыҡты юҡҡа сығара, йәмғиәттә тыныслыҡ һәм татыулыҡ урынлаштыра.

Ураҙа ярҙамында кеше социаль тормошон байыта, яңы бәйләнештәр урынлаштыра. Был бәйләнештәр донъяуи бәйләнештәргә ҡарағанда таҙараҡ һәм ныҡыраҡ була. Бергә ураҙа тотҡан, ифтар, сәхәрҙәрҙә ҡатнашҡан, тәрәүих намаҙҙарын уҡыған, Ҡәҙер кисәһен һәм Ураҙа-байрамды үткәргән мосолмандар араһында бер-береһенә ҡарата ысын һәм таҙа мөхәббәт, хөрмәт, ярҙам тойғолары барлыҡҡа килә. Улар Бәйғәмберебеҙҙең: "Бер береһенә ҡарата һөйөүҙә, мәрхәмәтлектә һәм миһырбанлылыҡта мөьминдәр бер организмға бәрәбәр. Берәй ағзаһы сиргә юлыҡһа, бөтә тән уның ауыртыуын тоя һәм уртаҡлаша", тигән хәҙисендәге берҙәмлеккә эйә була.

Ерҙәге етешлек, хозур тормош һәм именлек бер ҡасан да мәңге дауам итмәй. Көтөлмәгән сәбәптәр арҡаһында байлыҡ тиҙ арала - ярлылыҡҡа, сәләмәтлек ауырыуға әйләнеүе ихтимал. Ошондай ҡаты һынауҙарҙы аҙағына тиклем лайыҡлы үтер өсөн кеше йәне менән дә, тәне менән дә уларға әҙер булырға тейеш. Ураҙа шундай һынауҙарға ҡаршы мораль яҡтан да, физик яҡтан да әҙерлек ул. Сөнки ул кешене оҙаҡ ваҡытҡа көндәлек хәжәттәренән тыйылып торорға өйрәтә. Бынан тыш, ураҙа камил кешегә хас принципиаллек һәм үҙ-үҙеңде ҡулда тота белеү кеүек характер һыҙаттары ла тәрбиәләй.

Ураҙа мәктәбен үткән кеше ҡыйынлыҡтарҙы, аслыҡты түҙемлек менән үткәреп ебәрергә өйрәнә. Бер ниндәй донъя хәжәте лә уны үҙ ҡоло итә алмай, сөнки ул кемгә таянырға кәрәклеге тураһында яҡшы белә. Аллаһы Тәғәләне, уның бойороуҙарын, шул иҫәптән ураҙаны инҡар иткән кеше иһә мохтажлыҡ тигән ауыр һынау алдында һынасаҡ. Хаҡ Хакимдың ниғмәттәр баҡсаһын ҡалдырып, меҫкендәрҙең ишектәрен ҡағып, хәйерселеккә биреләсәк. Бындай әҙәм мең алтын һарайы булғанда ла меҫкен хәйерсе булып ҡаласаҡ.

**Мораҙым АЗАМАТОВ әҙерләне.**

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Мышар турғайы**

**(Обыкновенный свиристель)**



Турғай һымаҡтар ғаиләһенең суҡтурғайҙар ғаиләһенә бер-береһенә ныҡ оҡшаған 3 төр ҡарай. Рәсәйҙә уларҙың 2 төрө бар, Башҡортостанда иһә 1 төр - мышар турғайы осрай. Сыйырсыҡ ҙурлыҡ ҡына. Уны күптәр белә, төҫө менән башҡа ҡоштарҙан айырылып тора, бигерәк тә башындағы суғынан таныйһығыҙҙыр. Ғәҙәттәгесә, ата ҡоштоң төҫтәре сағыуыраҡ. Миҙгелгә ҡарап төҫөн үҙгәртмәй. Ата ҡоштоң ҡанатында һары һәм ҡыҙыл төҫ бар (инә ҡоштоҡо бик күҙгә ташланып бармай). Осҡан саҡта сыйырсыҡ кеүек оса. Тауышы - моңло, шишмә аҡҡан кеүек, сылтырап тора.

Башҡортостандың бөтөн урмандарында ла бар. Ҡышлай торған ҡош. Ылыҫлы урмандарҙы ярата. Бер ағаста бер нисә пар оя ҡороуы ихтимал. Ояһын нәҙек кенә сыбыҡтарҙан, үләндән, мүктән үрә, йомшаҡ үлән, мамыҡ түшәй. 3-7 йомортҡа һала, инә ҡош үҙе генә баҫа, ата ҡош уға ризыҡты боғағына һалып ташый. 15-17 көнлөк бөпкәләр ояны ташлап китә. Мышар турғайы бер йәй эсендә ике тапҡыр бала баҫып сығарырға һәләтле. Бәпкәләрен бөжәктәр, үҫә биргәс иһә еләктәр менән туйындыра. Оло ҡоштарҙың төп ризығы - еләктәр, шулай уҡ бөжәктәрҙе лә, сәскә бөрөләрен, ағас алҡаларын ашай. Ашауға бик талымһыҙ, күп ашай, эшкәртелеп бөтмәгән еләктәр иһә орлоҡтарҙы таратыу ысулы ла булып хеҙмәт итә. Йәйҙән алып киләһе йыл оя ҡорғанға тиклем парын ташламай, йыраҡ ерҙәргә күсеп йәшәй. Шулай ҙа төп ризығы - мышар. Баҡсаларға килеп, ундағы емеш ағастарын да суҡып өлгөрә. Был бигерәк тә ҡышын күҙәтелә. Шуға ла мышар турғайын ҡышын һәм айырыуса яҙын (апрелдә) ауыл-ҡалаларҙа ҙур туптары менән дә осрата алаһығыҙ. Сағыу һарылы-ҡыҙыллы төҫтәге матур ҡоштар мышарҙарға ҡуна, уны ашай, бер төркөмдө икенсеһе алыштыра. Таулы райондарҙа мышар турғайҙары ҡайһы бер йылдарҙа ғына күренә.

Бер тапҡыр беҙ июнь айында бер пар мышар турғайын "Йәшел сауҡалыҡ" санаторийы эргәһендәге урманда тап иттек. Шул уҡ көндө Өфөнөң Урмансылар паркының ҡарағай ағастарында ла мышар турғайҙарын күрҙек.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



### 23 ФЕВРАЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/ф "Награды России". [16+]
7.00 Телеканал "Доброе утро".
10.15 Д/ф Премьера. Спецрепортаж. "ГЕРОИ. Дыхание боя". [16+]
11.10 Д/ф "Вызываю огонь на себя". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Т/с "20/22". [16+]
15.30 Д/ф "Василий Лановой. "Другого такого нет!" [12+]
16.40, 18.20 "От героев былых времен". Концерт к 55-летию фильма "Офицеры". [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.10 Х/ф "Офицеры". [0+]
21.00 "Время".
21.35 Т/с Премьера. "10 историй о любви и смерти". [16+]
23.35 Концерт Олега Газманова "Русский мир". [12+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

4.25 Х/ф "Свет в твоём окне". [12+]
8.00, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
8.30 Х/ф "За Палыча!" [12+]
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.30, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.50 Х/ф "Движение вверх". [6+]
14.25 "Песни от всей души". [12+]
17.20 Большой праздничный концерт, посвящённый Дню защитника Отечества.
21.30 Х/ф "Кракен". [12+]
23.55 Х/ф "Позывной "Пассажир". [16+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С Днем защитников Отечества!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Д/ф "Курская дуга (битва)". [16+]**
**9.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 "Шаймуратов генерал". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.45 Гора новостей.**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Династия чести. [12+]**
**12.00 Д/с "Герои". [12+]**
**12.45 Спектакль "Звезда героя". [12+]**
**14.15 Х/ф "В небо за мечтой". [16+]**
**16.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**16.15 Концерт Уфимского ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Д/ф "Герои. Два капитана". [12+]**
**19.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Защитника Отечества. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.00 Д/с "Морская авиация. Ударная сила океанов". [16+]**
**23.45 Т/с "Жуков". [16+]**
**2.30 Спектакль "Израненная судьба". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**

### 24 ФЕВРАЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.50 Х/ф "Офицеры". [0+]
13.40, 14.20, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "10 историй о любви и смерти". [16+]
0.05 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.50 Х/ф "Позывной "Пассажир". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
0.05 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.40, 3.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Подкидыш". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00, 23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Д/ф "Точка науки. Проверено наукой". [12+]**
**18.15 Специальный репортаж. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). КХЛ.**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**0.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). [12+]**
**2.15 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**4.30 Специальный репортаж. [16+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 25 ФЕВРАЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 23.30 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
0.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
0.50 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Подкидыш". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 "География вкуса". [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Ап-асыҡ. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Т/с "Хороший доктор". [12+]**
**21.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**0.00 Х/ф "Защита". [16+]**
**2.00 Спектакль "Салават". [12+]**
**4.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

### 26 ФЕВРАЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 "Давай поженимся!" [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Ландыши". [16+]
23.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Я буду помнить". [16+]
0.05 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Подкидыш". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Специальный репортаж. [12+]**
**16.15 "География вкуса". [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Креативный код. [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Трактор" (Челябинск). [12+]**
**2.00 Спектакль "Почему девушки плачут?". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 27 ФЕВРАЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.15, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Х/ф "Золото Умальты". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башкортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Ключ от всех дверей". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! Хором! [12+]
0.10 "Истории Большой Страны". [12+]
1.10 Х/ф "За полчаса до весны". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Подводная война на Балтике". [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Тирмәкәй. [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**16.45 Дознание. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башҡорт йыры представляет". [12+]**
**21.15 Формула здоровья. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Защита". [16+]**
**2.00 Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

### 28 ФЕВРАЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Дочь Сталина. Пепел иллюзий". К 100-летию со дня рождения Светланы Аллилуевой". [16+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.15 Х/ф "Весна на Заречной улице". [12+]
15.05 Х/ф "Полёты во сне и наяву". Ко дню рождения Олега Янковского". [16+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Ледниковый период". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "Валентин Серов. "Я в душе скандалист". [16+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Большая Медведица". [16+]
0.50 Х/ф "Из чувства долга". [12+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 "Аль-Фатиха". [12+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 "Елкән". [6+]**
**12.00 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00, 4.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**17.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**18.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәнгелдәк. [6+]**
**20.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**20.30 "Байыҡ" представляет… [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.30 "Башҡорт йыры представляет". [12+]**
**0.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.45 Х/ф "Аэронавты". [12+]**
**2.45 "И в шутку, и всерьез". [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

### 1 МАРТА
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 Д/ф "Империя: Екатерина II". [12+]
17.05 Д/ф "Влад Листьев. Улыбка на память". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Три аккорда". Финал. [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.35, 1.35 Х/ф "Вернуть Веру". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башҡортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.07 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.50 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**14.30 Дарю песню. [12+]**
**15.45 Дорога к храму. [6+]**
**16.15 Честно говоря. [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 "Моя семья". [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Х/ф "О любви". [16+]**
**0.15 Хоккей. "Адмирал" (Владивосток) - "Салават Юлаев" (Уфа). [12+]**
**2.15 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**4.45 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Февраль - март (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ақшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (6) дүшәмбе | 6:20 | 6:34 | 8:20 | 13:30 | 16:42 | 18:37 | 20:16 |
| 24 (7) шишәмбе | 6:18 | 6:32 | 8:18 | 13:30 | 16:44 | 18:39 | 20:18 |
| 25 (8) шаршамбы | 6:16 | 6:30 | 8:16 | 13:30 | 16:46 | 18:41 | 20:20 |
| 26 (9) кесе йома | 6:13 | 6:27 | 8:13 | 13:30 | 16:48 | 18:43 | 20:22 |
| 27 (10) йома | 6:11 | 6:25 | 8:11 | 13:30 | 16:50 | 18:45 | 20:24 |
| 28 (11) шәмбе | 6:08 | 6:23 | 8:08 | 13:30 | 16:51 | 18:47 | 20:26 |
| 1 (12) йәкшәмбе | 6:06 | 6:20 | 8:06 | 13:30 | 16:53 | 18:49 | 20:28 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

*КЕМ АЛЫҠ!*

**Быйылғы ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусылар араһынан "бәхетле билет" эләккәндәрҙең исемдәрен барлайыҡ. Иң тәүҙә сәмле, ғәмле, фекерле милләттәштәр өсөн йән аҙығы, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға ифрат рәхмәтлебеҙ икәнде белдерәйек. Һеҙ - иң аңлылар, вайымлылар, илһөйәрҙәр, телһөйәрҙәр. "Аңлы уҡыусы" тип атауыбыҙ юҡҡа түгел, сөнки хәҙер гәзит-журнал-китап уҡыусылар тамам һирәгәйҙе. Күрәһең, аҡ ҡағыҙ битендәге һүҙҙе һанлаусы, уның әһәмиәтен баһалаусы аңлылар сафы һирәгәйә бара. Ә шулай ҙа бындай статустағы уҡыусыларыбыҙҙы юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ иткәндәр, "Гәзиттә бит шулай яҙылған!" тип, һәр һүҙен гәзит һүҙе менән йөпләүселәр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Ә беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, йөкмәткеле яҙмаларыбыҙ менән танһыҡтарын ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.**

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!



**Тәтешле районы** Ҡатҡы-Йылға ауылынан Ринат Әхмәтов, **Сибай ҡалаһынан** Хәйҙәр Тапаҡов, **Учалы ҡалаһынан** Т. Йосопова, **Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Айгөл Таһирова, **- "Башҡорт ырыуҙары";**

**Ғафури районы** Красноусол ауылынан Венера Йәнбирҙина, **Йылайыр районы** Яманһаҙ ауылынан Хәмдиә Рыҫкилдина, **Баймаҡ районы** Аҡморон ауылынан Ғәлиә Исламғолова **- Рәми Ғарипов. "Минең антологиям";**

**Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Люция Таһирова, **Учалы районы** Бөйҙә ауылынан Гүзәл Бүләкова, **Ишембай районы** Кесе Мәҡсүт ауылынан Мәҙинә Сәғитова, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Мәғрифә Кейекбаева **- "Урал Батыр";**

**Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Ләйсән Ҡотоева **- Мостай Кәрим. "Әҫәрҙәр";**

**Салауат районы** Лағыр ауылынан Ғилман Мусин, **Учалы районы** Ҡунакбай ауылынан Х. Ғатауллина, Стәрлебаш районы Ҡабыҡҡыуыш ауылынан Солтанбәк Ишембәтов, **Хәйбулла районы** Түбәнге Смаҡ ауылынан Ханнан Мөхәмәтйәров, **Архангел районы** Ҡыҫынды ауылынан Г. Абдуллина, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Ғәлиә Саптарова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Зайтуна Туҡубаева, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Мауләмбирҙе Назыров, **Күгәрсен районы** Үрге Мөрсәләй ауылынан Гүзәлиә Ҡотлогилдина, **Әбйәлил районы** Юлдаш ауылынан Г. Ғафарова, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Минзәлә Ямантаева **- Ноғман Мусин "Һайланма әҫәрҙәр";**

**Учалы ҡалаһынан** Әминә Мөхәмәҙиева, **Ишембай ҡалаһынан** Рафаиль Мөхәмәтов **- Спартак Ильясов. "Ҡағанат вариҫтары";**

**Йылайыр районы** Япарһаҙ ауылынан Рауил Вәхитов, **Салауат район**ы Тирмән ауылынан Фәүзиә Шакирова, **Учалы районы** Илсе ауылынан Әлфиә Хәлилова, **Стәрлебаш районы** Елембәт ауылынан Г. Шәмсетдинов, **Йылайыр районы** Ҡашҡар ауылынан Зарифа Юламанова, **Йылайыр районы** Матрай ауылынан Нурия Мәҡсүтова, **Ғафури районы** Имәндәш ауылынан Рамилә Мәхмүтова, **Күгәрсен районы** Мәҡсүт ауылынан Хәлиҙа Бикҡолова, **Баймаҡ районы** Баҫай ауылынан Камил Ҡасимов, **Сибай ҡалаһынан** Рүзидә Үтәшева, **Бүздәк районы** Ҡаңны-Төркәй ауылынан Рәйсә Йосопова **- Рәсүл Байгилдин. "Һай, түрәкәйгенәһе";**

**Учалы районы** Мәскәү ауылынан З. Мөхтәрова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Мәғәзирә Иҫәндәүләтова, Сидоровка ауылынан Файза Ыласынова, **Сибай ҡалаһынан** Хәлил Һөйөндөков, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Бүләк Дәүләтшина **- Сабир Шәрипов. "Һайланма әҫәрҙәр";**

**Йылайыр районы** Матрай ауылынан Рәйсә Мелкоедова, **Күгәрсен район**ы 1-се Төпсән ауылынан Резедә Айытҡужина **- Таңсулпан Ғарипова. "Әҫәрҙәр";**

**Өфө ҡалаһынан** Г. Толобаева, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Шәүрә Ҡорбанғәлиева, **Учалы районы** Озерный ауылынан Нәҡиб Әюпов, **Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан Фатима Сәфиуллина **- Рауфан Мортазин. "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек";**

**Баймаҡ районы** Мәмбәт ауылынан Хәбир Юнысов, **Ғафури районы** Ҡауарҙы ауылынан Миңзәлә Назирова, **Салауат районы** Мөрсәлим ауылынан Ф. Ниғмәтова, **Учалы районы** Мәскәү ауылынан Флүрә Садыҡова, **Йылайыр районы** Үрге Ғәле ауылынан Сәкинә Асаинова, **Йылайыр районы** Матрай ауылынан Зөлфиә Ғүмәрова, **Балаҡатай районы** Яңыбай ауылынан Риф Ҡыяметдинов, **Дыуан районы** Иҫке Хәлил ауылынан Зилара Низамова, **Миәкә районы** Ҡырғыҙ-Миәкә ауылынан Ф. Шәймәрҙәнова, **Белорет районы** Сосновка ауылынан Фәнилә Мусина, **Күгәрсен районы** Төпсән ауылынан Н. Айытҡолова **- "Башҡорт халыҡ ижады";**

**Баймаҡ районы** Мерәҫ ауылынан М. Зәйнәғәбдинова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Рәйлә Айытҡолова, **Йылайыр районы** Кесе Юлдыбай ауылынан Зифа Төлкөбаева, **Йылайыр районы** Кесе Юлдыбай ауылынан Фирҙәүес Мараҡанова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Ғилмия Айытҡолова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Абдуллина, **Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Филиә Ҡотоева, **Йылайыр районы** Матрай ауылынан Тәнзилә Иҫәндәүләтова, **Учалы районы** Рысай ауылынан Зөлфирә Ғарипова, **Дыуан районы** Арый ауылынан Зәйнәб Вәлиева - **"Башҡортса дини календарь".**

● Шулай итеп, был акциябыҙ киләһе 2026 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылыу барышында ла үҙ көсөндә икәнен белеп ҡуйығыҙ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ. Шулай уҡ квитанцияларығыҙҙа адрестар тулы (индекс мотлаҡ кәрәк), аңлайышлы итеп тултырылһын ине, тигән теләк тә бар.

**Иҫкәрмә.** Бүләкләнеүселәр китаптарҙы үҙҙәренең почтальондары аша алыр.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 февраль "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов, И. Ҡаҙаҡбаев), музыкаль комедия. 12+

**21 февраль "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

**22 февраль "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**23 февраль "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 февраль "Всё могло бы быть иначе..."** (И. Губач, М.Күлбаев), лирик комедия. 19:00. 16+

**21 февраль "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев, М. Күлбаев), әкиәт. 12:00. 0+

**23 февраль "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин, М. Күлбаев). 18:00. 12+

**25 февраль "Поджигатель"** (Г. Горин, М. Күлбаев), трагикомедия. 19:00. 16+

**26 февраль "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Күлбаев). 19:00. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 февраль "Удивительное путешествие во времени"** (В.Щербакова). 19:00. 12+

**21 февраль "Кошкин дом"** ( С. Маршак). 12:00 һәм 15:00. 0+

**21 февраль "Вот так репка!"** ( И. Токмакова). 14:00. 0+

**22 февраль "Три поросенка"** (Д.Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**20 февраль "Күңелем - йыр ғына"** Башҡортостандың халыҡ артисы Радик Вәлмөхәмәтовтың юбилей концерты. 12+

**25 февраль "Кешеләргә һоҡланам"** шағирә Фирүзә Абдуллинаның ижад кисәһе. 12+

**26 февраль "Этнокод Востока"** Башҡортостан Республикаһының милли халыҡ уйын ҡоралдары оркестры концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**20 февраль "Эх, Өфө ҡыҙҙары!"** (И.Абдуллин), музыкаль комедия. 12+

**21 февраль "Сказка о Царе Салтане"** (А.Пушкин), әкиәт. 0+

**24 февраль "Һырғалаҡ"** (А. Житковский), балалар баҡсаһы хроникаһы. 16+

**26 февраль "Ярлыҡау"** (М.Кәрим, инсц. И.Ҡаҙаҡбаев), баллада. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**20 февраль "Насретдиндың алтын ишәге"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12:00. 0+

**20 февраль "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 19:00. 12+

**21 февраль "Жизнь за други СВОя"**, МХО-ла ҡатнашыусылар тарихы тураһында спектакль. 12+

**22 февраль "Три богатыря и "Соловей-разбойник"** (А.Зарипов), әкиәт. 12:00. 0+

**22 февраль "Рядовойҙар"** (А. Дударев), драма. 12+

**26 февраль "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр"** (В.Гуркин, М. Күлбаев), комедия. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәгет Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24-26 февраль "Өҙөлгән өмөт"** (Н.Асанбаев), драма. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**25 февраль Раян Алтыншиндың** концерты. 6+

## БР Милли музейы

**20 февраль "Русское наследие: от предков к потомкам"** Халыҡ-ара туған телдәр көнө айҡанлы экскурсия. 12:00. 6+

**20 февраль "Геройҙар тураһында һүҙ"** Ватанды һаҡлаусылар көнө айҡанлы сара. 12+

**21 февраль "О русской дуэли"** лекция-экскурсияһы. 12:00. 12+

**21 февраль "Воинская слава народов Башҡортостана: история и современность"**. 15:00. 12+

**21 февраль "Брошь в стиле башкирского нагрудника"** оҫталыҡ дәресе. 12+

**25 февраль "День государственного флага Республитки Башкортостан"** сараһы. 11:00 - 17:00. 6+

**26 февраль "Билбау үрәбеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+

*Йәштәр араһында этномода хәҙер бик киң таралды. Төрлө проекттарҙа ҡатнашырға саҡыралар, музейҙарҙа үткәргән оҫталыҡ дәрестәренә кешеләр күпләп килә.*

АФАРИН ЕГЕТ!

# ЗАМАН ЙӘШТӘРЕ ЛӘ...

## этномода шауҡымында



(Башы 6-сы биттә).

Шулай уҡ мин һәр ваҡыт эҙләнеү, бөгөнгө көндә бик үк таралмаған милли кейем өлгөләрен тергеҙеү өҫтөндә. Силәбе өлкәһе башҡорттарының бәләкәй ҡалпағын эшләнем. Музей өлгөләре буйынса тегелгән беренсе хәситәмде эшләгәндән һуң, мәҫәлән, Санкт-Петербургтағы "Собака.ru" журналы коллаборация ойошторорға тәкдим итте. Журнал өсөн хәситә менән төрлөсә стилләштереп төшөрөлгән фотолар интернет селтәрендә таралды. Хәҙерге көндә онотолоп барған хәситә заманса образ элементы булараҡ модаға инде. Әйткәндәй, хәситә төрлө халыҡтарҙа осрай торған биҙәүес, һәм һәр милләт уны үҙенә генә хас деталдәр менән тулыландырған.

Эштәрем тарихи ысынбарлыҡҡа тура килһен өсөн боронғо өлгөләр йыям. Музейға барһаң да, ундағы экспонаттар быяла аҫтында, ә үҙеңдең коллекцияңдағы әйберҙәрҙе һин тотоп ҡарап, бар яҡлап та өйрәнеп эшләй алаһың. Ул әйберҙәрҙе эҙләп табыуы үҙе бер мажараға әйләнеп китә. Әлбиттә, файҙалы танышлыҡтарһыҙ булмай, тик ҡайһы бер ваҡытта һис уйламағанда бик ҡыҙыҡлы үрнәктәр табыла. Мәҫәлән, бер ваҡыт өләсәйемдең мунсаһынан боронғо камзул табып алдым. Ул ваҡытта әле кейем тергеҙеү менән бик мауыҡмаһам да, уның тарихи йәһәттән бик ҡиммәтле әйбер икәнен аңлай инем, алып ҡайтырға булдым. Өләсәйемдең ҡуҫтәнәстәр менән ҡуша шул камзулды ла миңә тоттороуын уның фатиха биреүе кеүек ҡабул иттем. Был камзул - минең шәхси коллекциямдағы беренсе әйбер.

Туғандарым да ныҡ ярҙам итә. Инәйапайҙарым бирнә һандығы менән килгән юрған-түшәктәрен, өләсәләренән ҡалған, ҡасандарын тирмәләрҙә ятҡан балаҫтарын алып киләләр. Шул юл менән килеп эләккән олатайымдың өләсәһенең балаҫы бар миндә хәҙер. Ниндәй генә хәлдә килеп етмәһен, туғандарҙан ҡалған ҡомартҡылар бигерәк тә ҡәҙерле бит ул. Тағы ла Силәбе, Екатеринбург, Ырымбур, Пермь башҡорттарына хас үрнәктәр йыям, әлбиттә. Уның өсөн төндәрен йоҡламай, интернет селтәрен гизгән ваҡыттар булғылап тора. Һәр алған әйбер тураһында мөмкин тиклем тулы мәғлүмәт яҙып, һаҡлап ҡалырға тырышам. Һәр әйберҙең ҡәҙере бар, ул исемһеҙ, билдәһеҙ булырға тейеш түгел. Киләсәктә үҙемдең шәхси музейымды асыу хыялы ла бар, Аллаһ бойорһа.

Йәштәр араһында этномода хәҙер бик киң таралды. Төрлө проекттарҙа ҡатнашырға саҡыралар, музейҙарҙа үткәргән оҫталыҡ дәрестәренә кешеләр күпләп килә. Селтәр баҫырға килеүселәргә эштәренең башынан аҙағынаса консультация үткәрәм, материалдар менән эшләргә ярҙам итәм, бар булған тәжрибәм менән бүлешәм. Ҡатнашыусыларға бик оҡшай, был тема бик тә актуаль, сөнки глобалләшеү ваҡытында ниндәйҙер үҙенсәлегең булыу бик мөһим.

Йыш ҡына заказға ла тегәм, ҡайһы ваҡыт республикала билдәле артистар өсөн сәхнә костюмдары тегеүҙә лә ҡатнашам. Был йүнәлеш минең өсөн шулай уҡ ҡыҙыҡ.

Барлыҡ эштәремдә мин беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың социаль паспорты булған, рухи һәм матди яҡтан байлығын күрһәткән милли кейемдәребеҙҙе беҙ генә түгел, ә бөтә донъя белергә тейеш тигән маҡсат менән эшләйем. Конкурстарҙың да Башҡортостандан ситтә үткәрелгәндәрен һайларға тырышам. Канада журналдары, бер нисә оҫта менән бергә "Elle" журналы, билдәле брендтар менән хеҙмәттәшлек иттек.

**Һин йөрәт иткән иң ауыр, әммә шул уҡ ваҡытта иң ҡыҙыҡлы проект ниндәй булды?**

- Һәр бер проектымды күңел һалып, яратып башҡарам. Килеп сыҡмаған осраҡта бер аҙ кисектереп торған саҡтар ҙа булғылай. Һәр әйберҙең үҙенең "бешеп сығыу" ваҡыты була бит, шул ваҡыты етһә, барыһы ла башымда уйланылғанса килеп сыға, һәр деталь үҙ урынына ятып ҡына тора.

Иң яратҡан эштәремдең береһе - халҡыбыҙ өлгөләренә таянып, әсәйемә тип бағышлап эшләгән селтәр. Әйе, ул идеаль түгел, дөрөҫ булмаған урындары ла бар, бөгөнгө көндә ул әҙерәк таушалып бөткән, күпте күргән, күпте кисергән биҙәүес. Әммә ул бик күп йылы хәтирәләр һаҡлаған тәүге эштәремдең береһе.

Тағы бер минең өсөн ауыр булып тойолған проект - "Башфонд" башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды менән бергә төрлө сауҙа үҙәктәрендә балалар өсөн ойошторолған оҫталыҡ дәрестәре. Был проекттың үҙенсәлеге һәр кешенең үҙе теләгән биҙәүесте эшләргә өйрәнеүендә ине. Берҙән, балалар менән, икенсенән, кеше күп булған йәмәғәт урынында эшләп өйрәнмәгәйнем, шул ғына бер аҙ ҡурҡытып торҙо тәүҙә. Ни өсөндөр башҡорттар бик күп булманы, ә тап башҡа милләт балаларының сауҙа үҙәге буйлап йөрөгән ерҙән килеп, өйрәнеп китеүҙәре, икенсе көндә дуҫтарын алып килеүҙәре бик ҡыуандырҙы. Был бит уларҙың беҙҙең тарихыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныуын аңлата. Ата-әсәләрҙең дә, ваҡыты булмаған осраҡта ла, түҙеп, кескәйҙәрҙең башлаған эштәрен тамамлауын көтөүҙәре айырым маҡтауға лайыҡ ине.

**Этника менән ҡыҙыҡһыныуың, милли кейемдәр тегергә теләгән кешегә кәңәштәрең ниндәй булыр?**

- Был эшкә тәүләп тотонған кешеләр иң тәүҙә туҡыма төрҙәрен өйрәнергә, милли кейемдәр тураһында күпләп материалдар ҡарарға, аң даирәһен киңәйтергә тейеш. Бөгөнгө көндә йыш блогер-этнодизайнерҙар күп, оҡшағандарының эштәрен күҙәтеп барыу ҙа артыҡ булмаҫ. Сәхнә кейеме менән традицион кейемдең айырмаһын күреп өйрәнеү мөһим, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уларҙы бергә бутап эшләгән оҫталар бик күп. Милли музейҙарға барып, халҡыбыҙ костюмдарының аҫыл өлгөләрен өйрәнеү - иң мөһим аҙымдарҙың береһе.

Йыш ҡына минән: "Стилләштереүгә нисек ҡарайһың?" - тип һорайҙар. Яуабым һәр саҡ бер: әгәр милли кейем эшләгән кешеләр үҙҙәренең коллекцияларын ниндәйҙер яңы идеялар һалып, стилләштереп эшләп, дөрөҫ атама биреп, дөрөҫ итеп күрһәтһәләр, мин барыһына ла риза. Мәҫәлән, ниндәйҙер яңы технология һәм дизайн менән селтәр эшләп, уны тик "селтәр" тип кенә танытһалар, минең күҙәтеүемдә был эштең шунда уҡ бәсе төшә, сөнки минең өсөн селтәр - ул музейҙарҙа һаҡланған, аҫыл өлгөләре үҙгәрешһеҙ булған милли кейем элементы. Эшләгән әйбере яҡшы, әммә атамаһы дөрөҫ булмай икән, тимәк, ул кеше үҙ һөнәренең нескәлектәренә тулыһынса төшөнөп етмәгән. "Неоселтәр" йәки "наноселтәр" тиһәләр, уның ниндәйҙер яңылығы булғанын, заманса арт-проект икәнлеген аңлап, тыныс күңел менән ҡабул итеп була.

**Шулай итеп, башҡорт халҡының милли кейемен һәм биҙәүестәрен шулай киң аудиторияға танытҡаның, күптәрҙе үҙ һөнәрең менән ҡыҙыҡһындырғаның һәм әңгәмә өсөн ҙур рәхмәт, Иҙел. Киләсәктә һиңә тағы ла юғары ижади үрҙәр теләп ҡалабыҙ.**

**Айһылыу ДАУЫТОВА әңгәмәләште.**

---

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТША ҒАЛИМ БУЛҺА...

## йорт үҙыр

Атаһыҙ етем - туйҙа етем, әсәһеҙ етем көн дә етем.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙөргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ни өсөн ирҙәр ҡатындарына ғына башҡаларға ҡарата ҡылмай торған насарлыҡтар ҡыла?

**(Пьер Бомарше).**

Ас кешене ашатҡың килһә, уға балыҡ бир. Ас кеше бер ваҡытта ла асыҡмаһын, тиһәң, ҡулына йылым тоттор.

**(Генрих Гейне).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким күрәҙәсегә килгән һәм уға:**

**- Дәүләтте нисек көслө итергә? - тигән һорау биргән.**

**- Аҡыл эйәләре-карттарҙың тәжрибәһенә, белеменә таянырға һәм... - тигән күрәҙәсе һәм һүҙен артабан дауам итмәксе булған, ләкин хаким уны артабан тыңлап тормаған, әйләнеп китеп барған.**

**Хаким үҙенең һарайына ҡайтҡас, бөтөн ил буйынса аҡыл эйәләрен саҡырырға бойорған. Улар йыйылып бөткәс, һәр береһен үҙ һарайында урынлаштырып, бер нимәгә лә мохтажлыҡ кисертмәйенсә йәшәткән. Тегеләре иһә хакимға аҡыллы кәңәштәр биргән, ул кәңәштәр ярҙамында ил көслө һәм бойондороҡһоҙ булып танылған.**

**Сирек быуат үткәс, хаким илдәге халыҡтың ҡырҡа кәмеүен, бары тик ҡарттар ғына тороп ҡалып барыуын, балалар бөтөнләй һирәгәйеүен шәйләп ҡалған. Шунан ул баяғы күрәҙәсегә эҙләп тапҡан һәм уға үпкәһен белдергән:**

**- Мин һинең кәңәшеңдә тыңлап, эргәмә ҡарттарҙы йыйып, улар тәжрибәһенә һәм белеменә таянып идара иттем. Ләкин отолдом. Һин миңә дөрөҫ кәңәш бирмәнең...**

**- Юҡ, бында һинең ашығыусанлығың һәм алдан күрә белмәүсәнлегең ғәйепле, - тигән күрәҙәсе. - Теге ваҡыт һин минең кәңәшемдең тәүге яртыһын ғына тыңланың, икенсе яртыһын тыңларға түҙемлегең етмәне...**

**- Икенсе яртыһында ни тураһында әйтелә ине һуң? - тигән хаким.**

**- Боронғо аҡылда әйтелеүенсә, идара иткәндә аҡыл эйәләре-карттарҙың белеменә, тәжрибәһенә таян, ләкин бар аҡсаңды балаларға һал. Сөнки аҡыл - ул нигеҙ, ә балалар - улар диуар, ә һарай дөрөҫ һалынған нигеҙ һәм диуарҙары менән көслө. Дәүләтте бөтөн һәм көслө көйө һаҡлау өсөн нигеҙ һәм диуарҙарҙың ныҡлы ғына түгел, ә матур булыуы, уның архитектураһында аҡыл көсөнөң һәм бөйөклөктөң ярашыуы ла кәрәк. Ә һин бар көсөңдө нигеҙ ҡороуға ғына йүнәлттең дә, диуарҙар төҙөргә оноттоң..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 19.02.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 19.02.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 20.02.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 310